Рәми Ғарипов

# МИНЕҢ АНТОЛОГИЯМ

Әҙһәм Атнабаев

# Минең антологиям

* * *

Ракеталар оса йондоҙҙарға,
Оса алыҫ, төпһөҙ диңгеҙгә.
Кешелегем — бөйөк йондоҙҙарым!
Еткәнсе мин осоп тик һеҙгә.



Рәми Ғарипов

# МИНЕҢ АНТОЛОГИЯМ

ТӘРЖЕМӘЛӘР

ӨФӨ
БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
1990

ББК 84(0)
F 21

**Ғарипов Рәми**

F 21 Минең антологиям. Тәржемәләр. Төҙөүсеһе Н. В. Ғарипова. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. — 224 бит.

Рәми Ғарипов талаптлы шағир булыу менән бергә ғәжәйеп оҫта тәржемәсе лә ине. Ул донъя лирикаһына өлөш индергән күренекле шағирҙар ижадын башҡорт уҡыусыһына бөтә күркәмлегендә еткереү йәһәтенән тиңдәшһеҙ өлгөләр ҡалдырҙы.

Йыйынтыҡта Рәми Ғариповтың оҙаҡ йылдар дауамында башҡарған тәржемәләре туплап бирелә.

F $\frac{4702110200-150}{М\ 121(03)-90}$ 68—90 ББК 84(0)

ISBN 5—295—00471—6

© Ғарипов Рәми, 1990

Һәр сәнғәттең үҙ серҙәре, үҙ ауырлыҡтары. Ижад эшендә һәр кемдең үҙ шатлыҡтары, үҙ ғазаптары. Кеше күҙ күрә алған бер нисә төҫтән рәссам ниндәй ғәжәп донъя тыуҙыра ала. Етә нота тамғаһына һыйып бөткән ауаздарҙан көй сығарыусы күпме илаһи моңдар ижат итә. Әлбиттә, художник беҙ күрмәгәнде күрә, композитор беҙ ишетмәгәнде ишетә, улар башҡа кеше еңеп сыға алмаҫлыҡ күпме ауырлыҡтарҙы еңеп сыға, беҙ белмәгән әллә ниндәй тылсымдарҙы белә. Тағы ла шуныһы һоҡландыра: бер ерҙә тыуған көй йәки һүрәт, ошо ерҙең моң-ауаздарын тамсы ла сайпылдырмайынса, төҫ-бояуҙарының балҡышын башҡа ерҙәргә, башҡа халыҡтарға илтеп еткерә ала.

Был яҡтан ҡарағанда әҙәбиәттең яҙмышы башҡасараҡ. Борон-борондан халыҡтарҙы бейек тауҙарҙан да, йырып үткеһеҙ урмандарҙан да, һәләкәтле сүлдәрҙән дә, ташҡын даръяларҙан да былайыраҡ бер кәртә — тел айырмаһы, тел барьеры бер-береһенән сикләп, айырып торған. Ләкин кешелек, яңынан-яңы тиҙлектәр яулап, етеҙҙәрҙән-етеҙ самолеттарҙа тауыш тиҙлегенән дә шәберәк осоп, тауыш барьерын үткәнгә тиклем күп мең йылдар элек үк һүҙ ҡаршылығын, тел барьерын, һөйләштәрҙәге айырманы еңергә өйрәнгән. Борон-борондан илдәрҙе илдәргә бәйләүсе, халыҡтарҙы бер-береһе менән таныштырыусы, алыҫ араларҙы яҡынайтыусы сәйәхәтселәр, илселәр, каруансылар, илгиҙәрҙәр менән, дөрөҫөрәге, уларға юл ярып, тәржемәселәр, төрлө телдәргә маһир кешеләр булған.

Тәржемә — бөйөк эш, кешелектең үҫеш юлында хәл иткес күренештәрҙең береһе. Шул уҡ ваҡытта тәржемә, бигерәк тә әҙәби тәржемә, үтә яуаплы һәм ҡатмарлы хеҙмәт ул. Кескәй генә хикәйәне лә бер телдән икенсе телгә әйләндереүҙең ни тиклем ауыр икәнлеген быны үҙе эшләп ҡараған кеше генә яҡшы аңлай торғандыр.

Мин был һүҙҙәрҙе тәржемәсе хеҙмәтенә хөрмәт йөҙөнән генә яҙмайым. Күптән билдәле булһа ла, беҙҙә тейешле талап ҡуйылмаған мәсьәләгә уҡыусының иғтибарын йүнәлткем килә.

Башҡорт әҙәбиәтендә тәржемә өлкәһендә байтаҡ традиция тупланған һәйбәт-һәйбәт өлгөләр бар. Әммә беҙҙә был мөһим эште бик йыш кәсепкә әйләндереп ебәрҙеләр. Мин берәй оло дата йәки юбилей уңайы менән ашыҡ-бошоҡ эшләнгән кампания баҫмалары тураһында ғына әйтмәйем. Ҡыҙғаныска ҡаршы, был яуаплы эште табышҡа әйләндергән, уны системаға һалып алған профессиональ кәсепселәр барлыҡҡа килде. Бәлки, профессиональ тигән һүҙ бында артыҡтыр...

Тәржемәнең иң нескәһе, иң ҡатмарлыһы, иң ауыры — шиғри тәржемә. Бер телдән икенсе телгә күсергәндә оригиналға тиң шиғри яңғырашҡа ирешеү асылда хыял булып ҡына ҡала, сөнки бындай тәржемә ваҡытында телдең моңон, аһәңен, тапҡырлығын, шул халыҡҡа ғына хас тел мәргәнлеген юғалтмай һаҡлап ҡара!

Талантлы шағир Рәми Ғарипов үҙенең алдына бына шундай юғары маҡсаттар ҡуйып эшләгән һәм шул маҡсаттарға ирешкән талантлы тәржемәсе лә булды. Ул ысынлап та үҙе тәржемә иткән шағир менән ярышҡан һымаҡ сәмләнеп эшләне, ҡат-ҡат варианттар аша һаман да камиллыҡҡа ынтылды. Шуға ла ул әҫәрҙең хуш еҫен, ҡабатланмаҫлығын юғалтманы, уны башҡортса тәбиғи яңғырата алды.

Тәржемәгә Рәми Ғарипов эш юҡтан эш булһын тип йәки еңел табыш булһын тип тотонманы. Был үтә яуаплы эшкә ул барлыҡ һәләтен, барлыҡ ғүмерен арнаны. Тәржемәгә булған мөхәббәте шағирҙың донъяға ҡарашынан, йәшәү рәүешенән, уның интернациональ рухынан, киң тәбиғәтенән тыуғайны. Тыуған шиғриәтенең офоҡтарын нисек тә киңәйтергә ашҡынып йәшәгән Рәми Ғарипов башҡорт уҡыусыларын донъя лирикаһының гәүһәрҙәре менән мөмкин

тиклем күберәк таныштырыу өсөн көсөн дә, ваҡытын да йәлләмәне.

Рәми Ғариповтың тәржемәгә ни тиклем талапсанлығы тураһында хәҙер инде халыҡ көләмәсенә оҡшаш, әммә ысын булған мәҙәк һәм фәһемле ошо ваҡиға асыҡ һөйләй. Бер күренекле рус совет шағирының тәржемә китабын Рәмигә нәшриәттән эске рецензияға бирәләр. Әммә байтаҡ ваҡыт үтә, унан яуап һаман юҡ та юҡ икән. Был китапты башҡортсаға тәржемә иткән өс иптәшебеҙ аптырағас Рәми Ғариповтың йортона килә. Улар байтаҡ әңгәмәләшеп ултырғандан һуң, хушлашыр алдынан ғына һүҙ әлеге тәржемә китабына килеп етә.

— Был шиғырҙарҙы тәржемә иткән кешеләрҙең моғайын береһе һуҡыр, береһе һаңғырау, береһе телһеҙҙер. Ә кемегеҙ һуҡыр, кемегеҙ һаңғырау, кемегеҙ телһеҙ — уныһын үҙегеҙ үҙ-ара бүлешеп алығыҙ. Бындай зәғиф тәржемәселәргә мин фатихамды бирә алмайым, — тип, Рәми йыйынтыҡты теге өс иптәшкә кире ҡайтарып бирә.

Тәржемә эшенә Рәми Ғарипов үҙ шиғырҙарына ҡараған кеүек, хатта унан да талапсанраҡ ҡараны, күпме бөйөк шағирҙарҙың ижад донъяһында йөҙөһөҙ төндәрен үткәрҙе, уларға остаздары күреп табынды.

Ғүмере буйы тәржемәне ошолай ололау, уға әллә күпме ваҡытын сарыф итеү арҡаһында уның үҙенең яҙыласаҡ байтаҡ шиғырҙары бәлки яҙылмай ҙа ҡалғандыр. Ләкин писек кенә булмаһын, бындай иҙге эштең шағирҙы һис кенә лә ярлыландырыуы мөмкин түгел. Сөнки ошо эш аша тәржемәсе башҡа халыҡтарҙың аҡыл эйәләре, уларҙың моң хазиналары менән йылдар һәм быуаттар аша осраша, ижади аралаша, фекер уртаҡлаша. Ошондай аралашыуҙар Рәми Ғарипов күңелендә әллә күпме байрамдар тыуҙырғандыр, тип уйлайым. Башҡорт шиғриәтенә иһә бындай тығыҙ ижади бәйләнеш ҡабатланмаҫ аҫыл үрнәктәр бүләк итте. Рәми Ғарипов тәржемәләре һәр саҡ әҙәбиәтебеҙҙе байытыусы шатлыҡлы ваҡиғаға әйләнде.

Хәҙер уйлайһың да йөрәгең һыҙланып, тағы ла аптырап ҡуяһың: ғүмере буйы халыҡтар дуҫлығы, әҙәбиәттәр дуҫлығы хаҡында хәстәрләп, үҙ милләтенә башҡа милләттәрҙең йөрәк тауышын, зиһененең нурын уларҙың шиғри ынйылары аша еткерер өсөн

йәнен фиҙа ҡылып йәшәгән Рәмиҙе пиндәйҙер тарлыҡта, сикләнгәнлектә, хатта милләтселектә ғәйепләп, ҡыйырһытыр өсөн бәгзе бәндәләрҙең писек намыҫы етте икән? Хәйер, намыҫ тураһында һорау был осраҡта урынлы ла түгелдер...

Рәми Ғариповтың шиғырҙары, мәҡәләләре, көндәлектәре, хаттары әле уҡыусыға тулы көйөнсә барып етмәгән кеүек, тәржемәләре лә китап булып ошоға тиклем донъя күрә алмай килде. Ниһәйәт, был китаптың донъяга сығыуы бик ҡыуаныслы хәл. Тик шулай ҙа был ҡыуаныс әлегә тулы түгел. Атаҡлы Ғүмәр Хәйямдың Рәми Ғарипов тарафынан тәржемә ителгән робағиҙарып башҡорт уҡыусыларына еткерәһе бар әле, сөнки, Әхиәр Хәкимов әйткәнсә, «Ғүмәр Хәйямды бер кем, бер ҡасан, һис бер телгә Ғариповтан яҡшыраҡ тәржемә иткәне юҡ». Был робағиҙар йыйынтығын да шиғриәт һөйөүселәребеҙ күптән зарығып көтә.

Башҡорт уҡыусыларына ҡойоп ҡуйған әллә күпме тәржемәләр — тотош шиғри хазина ҡалдырһа ла, Рәми Ғарипов үҙе рус теленә лә, башҡа телдәргә лә әлегә тейешле кимәлдә, тейешле сифатта тәржемә ителгәне юҡ. Дөрөҫ, уның ике китабы — береһе Өфөлә, береһе Мәскәүҙә — русса баҫылып сыҡты. Ул йыйынтыҡтарҙа һәйбәт кенә тәржемәләр ҙә юҡ түгел. Ләкин Рәми Ғариповты үҙ дәрәжәһендә ил уҡыусыһына күрһәтеү өсөн ҙур эш башҡараһы бар.

Иң яҡшы тәржемәләрен туплап төҙөгән был йыйынтығын Рәми Ғарипов «Минең антологиям» тип атағайны. Ошо антологияны — халыҡтар дуҫлығы китабын уҡыусыларыбыҙ бына ҡулға ала, донъя шиғриәтенең төрлө йондоҙҙары менән осраштырасаҡ сәйәхәткә сыға. Урау юлдар үтеп булһа ла, хәҡиҡәт барыбер халыҡҡа барып етә.

**Рауил Бикбаев.**

I

Ли Бо
Абуабдулла Рудаки
Хафиз
Жэми
Алишер Навои
Хосе Рисаль
Исикава Такубоку

## Ли Бо

(701—762)

*
* *

Эҫе кондән ял итергә
Болоттар ҡасып бөттө,
Ҡоштарҙың да һуңғы тубы
Янымдан осоп үтте.

Ҡарап торам мин тауҙарға
Тауҙар ҙа ҡарай миңә.
Оҙаҡ, оҙаҡ ҡарашабыҙ, —
Ялҡытмай икән ниңә?

## Абуабдулла Рудаки

(860—941)

### ЯРАТМАЙҺЫҢ

Яратмайһың, тик көтәһең ләззәт
Ғазабынан минең һөйөүҙең.
Ҡыланаһың эҙләп саф хәҡиҡәт,
Ә торғаны ялған һин үҙең!

### ҺИН КИТКӘС

Тәҡәт бөттө,
Зиһен китте,
Ҡатҡан башҡынам.
Һине һөйөп,
Яңғыҙ көйөп,
Ҡайҙа ашҡынам?
Һағыштарым
Һағыш түгел —
Баҫҡан Ҡаф тауы.
Ә тауҙа һуң
Бармы күңел? —
Ҡая таш ҡына!..

## ҠАУЫШЫУ

Килде...
— Кем?
— Һөйөклөм.
— Ә ҡасан?
— Ул ҡасҡан ал таңдан...
— Ә кемдән?
— Хөкөмдән.
— Ә ниңә?
— Кем ҡаты атаңдан?!.
Өс үптем...
— Ә кемде?
— Йәремде.
— Ни ерен?
— Иренен...
— Татлымы?
— Балдан да!
— Ҡайнармы?
— Эҫерәк утыңдан!..

## МӘРХӘМӘТ

Мәрхәмәтле, имеш, тиҙәр
                    был яҡтарҙың батшаһын:
Алтын менән, имеш, биҙәр
                    ул уҡтарҙың башағын,—
Шул алтынға кәфен таба
                    яугирҙарҙың үлгәне,
Яралылар һатып ала
                    төрлө дарыу үләнен...

## БӘХЕТ

Был өйҙә мин
бик бәхетле, дәртле инем,
Батшаларҙы
буйһондорған саҡлы инем,
Был өйөм дә,
мин үҙем дә — элеккесә,
Тик бәхет юҡ,
ә бит уға хаҡлы инем!..

## ХАРАБА

Һин, ҡәғбәмде, харабалай,
иткәс кафыр һарайы,
Дуҫ-ишкә лә хәҙер шулай
гел шикләнеп ҡарайым.
Мөхәббәтем! Ниңә улай,
һиңә мең ҡабат табынып,
Мин аллаһыҙ динһеҙ ҡалдым, —
инде кемгә ярайым?..

## ҠОЙ ШАРАБЫҢ!

Ҡой шарабың!.. —
бер тамсыһын йотһа Нил,
Иҫерерлек
булһын мәңге крокодил;
Ә ҡоралай
арыҫланға әйләнеп,
Ажарынан
тетрәп торһон бар яһил!

## ҺОРАҒАНДЫ ЯРАТМАЙҘАР

Һорағанды
яратмайҙар берәүҙәр:
Тыңлап бөтмәй,
тик түҙергә өндәйҙәр.
Һинең дә юҡ
мине тыңлар түҙемең,
Ә ҡалай һуң
түҙә икән миндәйҙәр?

## СӘСКӘЛӘР

Сәскә атты тағы ялап,
туғайҙар,
Хуш еҫтәрен еҫкәп-һулап
туймайҙар.
Сатнап торған, сытыр яҡҡан
саҡ ҡайҙа?
Тик, ут булып, гөлдәр генә
уйнайҙар...

## ФАНИ ДОНЪЯ

Кит был фани донъяһынан,
аңлап шуны:
Бер уйынсыҡ иткән уны
сихыр ҡулы.
Буш әкиәт итеп күр ҙә
яҡшылығын,
Урап уҙ һин яманлыҡҡа
илтер юлын!

*
* *

Кил, уйнатсы һорнайыңды — йыуатһаңсы,
Уйнауыңдан бар ҡайғымды онотһамсы.
Ҡой касама шундай шарап — төбөндәге
Боҙон да саф яҡут күреп, бер йотһамсы!

*
* *

Аҡыллы гел яҡшылыҡҡа, татыулыҡҡа ынтылыр,
Аҡылһыҙҙың бар белгәне һуғыш та ыҙғыш булыр.

*
* *

Хәтерләйҙәр минең хаҡта,
тик бәләгә ҡапҡан саҡта,
Тик биҙгәктең ҡайһы саҡта
һүҙе йылы минең хаҡта.
Сарсап ятһам, ҡатып асҡа,
күҙкәйҙәрем, һеҙҙән башҡа
Тоҙло, ҡайнар бер тамсы һыу
биреүсем дә юҡ бит хатта!..

## Хафиз

(1325—1389)

*
* *

Әгәр Шираз һылыуҡайы баҫһа минең яраны,
Бер миңенә бирер инем Сәмәрҡәнде, Бохараны!

Ҡой, эй, саҡый, касаға мәй! Йәннәттә бит тәтемәй
Был гөлбаҡса шаулағаны, был шишмә йырлағаны.

Аҡылымды алып китте, аһ, ҡарасман шуҡ ҡыҙҙар —
Шулай була туйҙа һыйҙы төрөктәр урлағаны.

Минең меҫкен һөйөүемә шул һылыумы һуң мохтаж?
Гүзәллеккә ниңә кәрәк кершән ягып торғаның!

Беләм Йософ сибәрлеген — ҡөҙрәтле көскә эйә,
Хатта намыҫ пәрҙәһенән сығарыр Зөләйханы!

Ниндәй ауыр һүҙҙәр әйтмә — табынғаным һин генә:
Иренеңдән балдар тамһа, мин йыйырмын тамғанын.

Ҡолаҡ һал, дуҫ, кәңәшемә: оло аҡылын тотҡан
Йәштәр тиҙерәк барып шаҡыр хаҡлыҡ тигән ҡапҡаны.

Хәмер менән йырға әүрәп, онот донъя серҙәрен,
Ул хикмәткә бер кемдең дә юҡ төшөнә алғаны.

Мәрйен кеүек һүҙҙәр теҙеп, һөйлә-көйлә, эй Хафиз,
Ҡара төндә һүҙҙең яҡты йондоҙ булып янғаны!

## Жәми

**(1414—1492)**

*«Яҙғы баҡса» шәлкеменән*

* * *

Әй, күңелем, һүҙгә ҡолаҡ һалһаң,
Аҡыллы ир һүҙе — ғилемең:
«Яуыз эшкә ҡындан ҡылыс алһаң,
Шул ҡылыстан булыр үлемең!»

* * *

Донъяларҙы гиҙгән: «Донъя, — тигән,—
Халыҡ күңеленең дәфтәре.
Бәхетле һин, күрһәң шул дәфтәргә
Тик яҡшылыҡ яҙыу хәстәрен».

* * *

Сер тотоу һәм тотмау хаҡында
Бер аҡыллы әйтеп ҡалдырған:
«Тәүгеһе ул — ҡылыс ҡынында,
Икенсеһе — уҡ ул — атылған».

* * *

Дәрәжәң ҙур булһа, ғилем — нур,
Наҙанлыҡ — хур, күҙгә пәрәнжә.
Дәрәжәнән кеше булмай ҙур,
Кешенән ҙур була дәрәжә.

* * *

Аҡыллыға яҡшы тик шул бары:
Нигә күңеле ята, ашҡына.
Ә алтының, алмас, ынйыларың —
Ҡәбер өҫтөндәге таш ҡына.

* * *

Ягымлы ла тауыш, һылыу йөҙ —
Икеһе лә биләй йөрәгең.
Икеһе лә булһа — түҙһәң түҙ, —
Ғилемеңдең бармы кәрәге?

* * *

Һылыулығың һинең көн кеүек,
Һарғайырмын инде гөл кеүек.
Кешеләрҙең шелтә һүҙҙәре
Ут үрләткән гепә ел кеүек.

* * *

Әй, йөрәгем, һағыш-ҡайғыла
Дуҫың килһә, ҡайғың юҡ була.
Ауыр саҡта яҡшы дуҫ кәрәк.
Еңел саҡта дуҫтар күп була.

* * *

Йомарттың бар алтын-көмөшө
Дуҫтарының килер юлында,
Һарандың бар йыйған өлөшө
Дошманының булыр ҡулында.

*
* *

Һине күрмәй, көтә алмайым,
Күрһәм тағы, китә алмайым.
Өмөтөмдө өҙөп бөтәм бит, —
Һине һөйөп бөтә алмайым.
Утта янып нисә ҡалмайым.
Серҙәремде сисә алмайым,
«Былбылым!» — тим эстән, ә үҙем
Һүҙҙән эшкә күсә алмайым.
«Ярай, көтөрмөн!» — тим таң һайын,
Көтөрмөн, тим, көтә алмайым.
Үҙең үбеү бүләк итһәңсе,
Ә мин бүләк итә алмайым.
Сабырлыҡҡа, Жәми, өйрәтмә, —
Был эште мин үтәй алмайым!..

*
* *

Бер танышым зарланды:
«Интегәм, — ти, — бурҙарҙан.
Күпме фекер урланды
Минең шиғри юлдарҙан».
Күп юлдарын уҡыным,
Юҡ шул фекер йораты, —
Хаҡ, ахыры, ҡорҙашым!
Барһын бөткән урлатып!

## Алишер Навои

(1441—1501)

*
* *

Кеше булган кешелә
Мең кешенең эше бар.
Кеше булмаç кешелә
Кешенең ни эше бар?

## Хосе Рисаль

(1861—1896)

*
* *

Һаклай белһә халык үҙ телен,
Һис иркенән яҙмаç илендә:
Ул күктәге бөркөт шикелле, —
Кем тотала уны күгендә?..

## Исикава Такубоку

(1885—1912)

*
* *

Эш тә эш,
Эш тә эш. Ниндәй емеш?
Тормош еңеләймәй, имеш!..
Иҫ китеп шуға,
Ҡарайым ҡулға.

*
* *

«Һуғам!» — тинеләр миңә.
Яуап бирҙем:
«Һуҡ!» — тинем.
Ах, әгәр ҙә хәҙер ҙә
Мин шулай булһа инем!

*
* *

Бер ҡыҙға һорау бирәмен:
«Әйт, тим, үлгең киләме?»
«Ҡара бында!» —
Тип ул шунда сер әйтте,
Муйынындағы йөйҙө күрһәтте.

# II

## Франсуа Вийон
## Перси Шелли
## Джордж Гордон Байрон
## Генрих Гейне
## Генри Лонгфелло

## Франсуа Вийон

(1431—1464)

*
* *

**Һыуһап үләм шишмә эргәһендә,**
**Күҙ йәш аша көләм, уйнап эшләйем.**
**Ҡайҙа барһам, шунда минең өйөм,**
**Ете ят ер миңә — тыуған илкәйем.**
**Мин барыһын беләм, мин бер ни белмәйем!**

## Перси Шелли

(1792—1822)

### ОЗИМАНДИЯ

Ослатҡанда бер юлсыны алыҫ илдәрҙән,
Һөйләгәйне миңә ни күргәнен сүлдәрҙә.
Имеш, бынан бик алыҫта, эҫе көньяҡта,
Сүлдәр серен һаҡлаған бер һыныҡ һын ята.

Әле булһа яһиллығы сыҡҡан йөҙөнә,
Буйһондормаҡ булып бар донъяны үҙенә.
Оҫта рәссам ҡулы йәнһеҙ ташҡа йән өрөп,
Ажарлығын был заманға ҡуйған еткереп.

Бер ярсыҡта тороп ҡалған һүҙе бар тағы:
«Мин — Озимандия! Мин — батшалар батшаһы!
Хакимдары бар заман һәм илдең, диңгеҙҙең.
Күрегеҙ һеҙ ҡөҙрәтемде, быны мин төҙҙөм!..»
Бер ни ҙә юҡ!.. Тәрән тынлыҡ!.. Үкен-үкенмә, —
Үле сүллек һәм кәфендәй сикһеҙ күк кенә...

## ЯҢҒЫҘЛЫҠ ХЫЯЛДАРЫ

**Моңһоу ғына һүнә уйҙарым,**
**Өлгөрмәйсә йырға әйләнеп.**
**Шулай һүнә айҙың нурҙары,**
**Яҡтыһына көндөң бәйләнеп...**
**Күпме ине йондоҙ сәйләнем!..**

## Джордж Гордон Байрон

(1788—1824)

*
* *

Хыялдарын юлда кешенең
Тартҡан һымаҡ яңғыҙ кәшәнә,
Тартып торһон күҙең ҡараһын
Аҡ ҡағыҙҙың ошо ҡараһы.

Үтеп киткәс йәшлек йылдарың,
Уҡыһаң бер шағир юлдарын,
Хәтерләрһең хәтәр бер мәлен,
Нисек һине һөйөп йөрөгәнен
Һәм күмгәнен шунда йөрәген...

## Генрих Гейне

---

(1797—1856)

*
* *

Алтын аяҡлы йондоҙҙар
Йөрөй күктә тын ғына.
Бала кеүек йоҡлаған ер,
Сумып топ тынлығына.

Йәшел ҡолаҡтарын ҡуйып,
Айҙы тыңлай урмандар.
Тауҙар, ҡулдарын һонғандай,
Шәүләләрен һуҙғандар.

Сеү, йөрәгем йыр ишетә,
Был моң кемдең һағышы?
Әллә һандуғас йыры был,
Әллә иркәм тауышы?

*
* *

Эй һин, һылыу, балыҡсы ҡыҙ!
Кәмәңде ҡалдыр ҡомда.
Ултыр янға, һөйләшәйек,
Сабый бул минең ҡулда.

Ҡуй башыңды йөрәгемә,
Ҡурҡма иркәләүҙән.
Диңгеҙ ҙә бит туҡтамай һис
Яҙмышыңды үртәүҙән.

Минең йөрәгем дә диңгеҙ:
Йә таша ул, йә ҡайта.
Уның төпкөлөндә, йоҡлап,
Ғәжәп ынйылар ята...

*
* *

Ғашиҡ булды ҡыҙға егет,
Ә ҡыҙ һөйҙө башҡаны,
Тик башҡаһы бүтән менән
Бергә йәшәй башланы!

Ғәрлегенән тотто ла ҡыҙ
Сыҡты ҡуйҙы бер иргә.
Шулай итеп, ҡыҙ егетте
Тереләй күмде ергә...

Донъяла был иҫке нәмә,
Тик мәңге яңы ҡала.
Үҙ башыңа төшһә инде,
Йөрәкте ярып һала!..

*
* *

Шайтан менән бик шаярма —
Ғүмер юлдары ҡыҫҡа.
Тамуҡ киҫәүҙәре барын
Онотоп ҡуйма, дуҫҡай.

Түләп бар гел бурысыңды,
Ҡыҫҡа ла түгел ғүмер, —
Әле байтаҡ бурыстарға
Батырға тура килер.

*
* *

Ғәмһеҙлекте, һүрәнлекте
Хөрмәт иттең бик күптән.
Тик мин генә, һөйөп һине,
Йөрөттөм тауҙан-күктән.
Таҡыр юлдар эҙләй инең,
Тапҡанһың бит, һөйөклөм:
Ҡултыҡлаған бына ирең,
Өҫтәүенә — һин... йөклө!..

*
* *

Йөрәгемдең иң түренә
Тын ауаз үтеп инде.
Ҡойол, әйҙә, яҙ моңо һин,
Ҡойондор яҙғы көндө!
Ҡойонһондар гүзәллектең
Талыҡҡан сәскәләре,
Тапшыр, күрһәң, ҡыҙылына
Йөрәгем сәләмдәрен.

*
* *

Мәңге-мәңге ҡуҙғалмайса
Япа күктә йондоҙҙар.
Һағынышып, һарғайышып,
Бер-берсһенә ҡарайҙар.

Һис бер телсе аңламаҫлык
Ғәжәп серле бер телдә
Һөйләшәләр, серләшәләр
Был ғашиҡтар һәр төндә.
Тик мин белдем ул тел серен,
Асайыҡ инде һеҙгә.
Һөйөклөмдөң нурлы йөҙө
Бер асҡыс булды беҙгә.

*
* *

Яла яғыр тотош бер йыйылыш,
Тотош бер йыйылыш ялғаплар.
Ләкин хаҡлыҡ һинең яҡта икән,
Ялмай алмаҫ һине ялалар.

Ялағайҙар мәңге ялған яҡлы,
Ә ялғандың ялҡын — телдәре.
Ялҡын теле ҡайһы яҡҡа аумаҫ,
Ҡайһы яҡтап иҫмәҫ елдәре!..

Ныҡ тор, егет, хаҡлыҡ хаҡына һин,
Тура ҡарап әйт һин ир һүҙен.
Дөрөҫлөктө ҡурҡып яҡламайҙар,
Мең ялғанға торор бер үҙе!

*
* *

Йөрәгемдең һулҡып һыҙлағанын
Әгәр ҙә бит баҫа белгәндә,
Сабый сәскәләр ҙә үкһеп-үкһеп
Илашырҙар ине эргәмдә.

Әй, һандуғас, моңло ҡошсоғом һин,
Аңлай белһәң әгәр ҡайғымды,
Һайрар инең һин дә, йыуатып бер,
Йырлар инең миңә йырыңды.

Алыҫтағы алтын йондоҙҙарым,
Мин янғанды күрә белһәгеҙ,
Күктән төшөп, һеҙ ҙә күңелемә
Бер йылы һүҙ әйтер инегеҙ.

Юҡ, яңғыҙ мин, һис кем быны белмәй,
Бер ҡыҙ ғына белә ҡайғымды.
Тик ул үҙе минең йөрәгемә,
Йөрәгемә һүнмәҫ ут һалды!..

## Генри Лонгфелло

(1807—1882)

### УҠ МЕНӘН ЙЫР

Керсш киреп, зәңгәр күккә уҡ аттым,
Тик уғымды «һә» тигәнсе юғалттым.
Йәш сағында уҡ атһаң да, ул уҡҡа
Күҙ эйәрмәй, етә икән болотҡа!

Йыр сығарып, маҡтаным күҙ нурымды,
Тик юғалттым «һә» тигәнсе йырымды.
Йәш сағында кем һуң күрмәй йондоҙон,
Инде хәҙер тороп ҡалдым яңғыҙым.

Йылдар үтте. Эҙләп таптым уғымды
Ботағынан йөҙйәшәр бер олондоң.
Ә йыр эҙләп, күпме тау-таш ҡуптарҙым.
Йыр йөрөгән йөрәгендә дуҫтарҙың.

# III

**Александр Пушкин**
**Михаил Лермонтов**
**Федор Тютчев**
**Алексей Толстой**
**Аполлон Майков**
**Иван Никитин**
**Алексей Плещеев**
**Иван Бунин**
**Александр Блок**

Заказ 66

## Александр Пушкин

(1799—1837)

### ТОТКОН

Ултырам ситлектә, ҡаҡмай керпек тә,
Ирекһеҙ иптәшем — бер йәш бөркөт тә,
Ян тәҙрәм төбөндә, ҡарғап донъяһын,
Ҡағына һәм суҡый ҡанлы ҡалъяһын.

Суҡый ҙа ырғыта, текләй тәҙрәгә,
Әйтерһең, бер уйҙы уйлай ул бергә.
Ҡарашы, тауышы ниҙер көткәндәй,
«Әйҙәсе, осоҡ!» тип әйтер киткәндә.

Беҙ ирек ҡоштары! Ваҡыт осорға,
Болоттар артылып тауҙар ҡосорға,
Ундағы диңгеҙҙең күм-күк ситендә
Йөрөйөк һин дә... мин елдәр иркендә!..

### БОЛОТ

Баҫылған дауылдың, эй, һуңғы болото!
Бер үҙең еләһең, донъяңды онотоп.
Бер үҙең ташлайһың шомло шәүләңде,
Бер үҙең боҙаһың шундай шәп көндө.

Бит әле генә һин бар күкте ҡапланың,
Һәм һине уратып, ут-йәшен ялтланы.
Дәһшәтле күкрәп, шаштың, үкерҙең,
Һуғарҙың дым менән ҡомһоҙ был ерҙе.

Инде ҡас, юғал һин! Үтте бит ваҡытың,
Йәшәрҙе ер йөҙө, йөрөмәсе ялҡытып.
Ел дә бит, япраҡтан елпеп күк пәрҙә,
Ҡыуалай үҙеңде зәңгәр күктәрҙән.

## БАҒЫУСЫМА

Йән дуҫҡайым ауыр көндәремдең,
Күгәрсенем, ҡартлыҡ көнөндә
Күптән-күптән яңғыҙ көтәһеңдер
Ҡарағайлы урман өңөндә.

Тәҙрә төптәрендә, һаҡ торғандай,
Күҙ алмайһың килер юлымдан.
Энәләрең йыш-йыш туҡталғандай
Ярғыланып бөткән ҡулыңда.

Текләйһең дә өнһөҙ ҡапҡаларға,
Алыҫтағы һорғолт юлдарға,
Көрһөнәһең һағыш-ҡайғыларҙан,
Сәғәт һайын сумып моңдарға...

## ҠЫШҠЫ ЮЛ

Ялбыр болоттар эсенән
Ай сығып ҡарап ҡуя.
Моңһоу яландар өҫтөнә
Моңһоу нурҙарын ҡоя.

Эс бошоргос ҡышҡы юлдан
Өс толпар бара юртып.
Ҡыңғырауы гел бер моңдан
Зың-зың килә ҡаңғыртып.
Ниндәйҙер бер яҡын моңдо
Һуҙа күсер тауышы:
Йә сая бер киңлек унда,
Йә йөрәктең һағышы.
Ут та, йорт та ҡараңғыла,
Тик ҡар ята ағарып..
Буй-буй бағаналар ғына
Салынып ҡала бары...

*
* *

Асыуланма, ҡайғырма һин,
Алдаһа әгәр тормош.
Килмәй булмаҫ, килер шат көн,
Тик һин йәшәргә тырыш.
Йөрәк йәшәй киләсәктә,
Күңелһеҙ тик бөгөнгә.
Һәр ни китә, һәр ни үтә,
Ә үткән хуп күңелгә.

*
* *

Һөйҙөм һине, бәлки мөхәббәтем
Һүнмәгәндер әле күңелемдә.
Тик ул һине башҡа борсомаһын,
Күренмәһен ҡайғы күҙеңдә.
Баҙнатһыҙ һәм көнсөл ғазап менән
Һөйҙөм һине өнһөҙ, өмөтһөҙ.
Һөйҙөм һине наҙлап, бар йөрәктән,
Зарыҡма һин шундай һөйөүһеҙ.

## Михаил Лермонтов

(1814—1841)

### ШАГИР ҮЛЕМЕ

Һәләк булды шағир! — намыҫ ҡоло —
Ҡабул итмәй яла һүҙҙәрҙе.
Күкрәктәге ҡурғаш, ҡанмаҫ ҡоно
Ғорур башын уның эйҙерҙе.

Хурлыҡтарын ваҡсыл рәнйетеүҙең
Күтәрмәне шағир күңеле! —
Донъяһына ҡаршы сыҡты үҙе
Һәм ауҙы ул, яңғыҙ, тоңолоп...

Үлтерелде!.. Ниңә илрәү хәҙер,
Буш кәрәкһеҙ маҡтау йырҙары,
Меҫкен аҡланыу һәм ялған ҡәҙер? —
Атҡарылды яҙмыш ҡарары! —

Һеҙ түгелме тәүҙә ҡыуыусылар
Уның азат, ҡыйыу аҡылын,
Көлкө күреп тоҡандырыусылар
Көйрәп ятҡан ҡуҙҙың ялҡынын?

Йә, улайһа — инде шашынығыҙ,
Ул түҙмәне аҙтыҡ йәбергә.
Һүнде көндәй даһи аҡылыбыҙ,
Шиңде шөһрәт тажы ҡәбергә.

Үлтереүсе — уға ни һуң кәрәк? —
Ҡорал тоҫҡап торҙо юлында.
Тыныс тибә ҡыуыҡтай буш йөрәк —
Тертләмәне ҡорал ҡулында.

Ғәжәпме һуң? Ул, бер илһеҙ муйнаҡ,
Бәхет, дан ауларға юл сыҡҡан.
Йөҙәрләгән килмешәктәр һымаҡ,
Яҙмыш яҙып, беҙгә юлыҡҡан;

Һәм, мыҫҡыллап беҙҙең телебеҙҙе,
Ек күреп ул сит ер йолаһын,
Аяһынмы инде данлыбыҙҙы,
Аңлаһынмы шул мәл, ҡан ағыҙып,
Ҡемгә тоҫҡап ҡулын һуҙаһын?!.

Инде ул юҡ — бер аяуһыҙ ҡулдан
Гүр эйәһе инде ителде;
Илаһи көс менән үҙе яҙған,
Һуҡыр көнсөллөктән ҡорбан булған
Йырсы һымаҡ иҙеп кителде...

Ниңә хор күңел һәр дәртле тойғоға
Ят булған был ҡонсол, тынсыу донъяға
Алыштырҙы һил наҙ, дуҫтарҙы?
Ниңә ҡул бирҙе һуң хаин йәндәргә,
Ниңә ышанды ул юха телдәргә,
Белә тороп йәштән уларҙы?

Сәскәлеһен сисеп, кейҙерҙеләр
Сәнескеле бер таж үҙенә.
Тик ағыулы йәшерен энәләр
Ҡаҙалдылар нурлы йөҙөнә.

Һуңғы һулыштарын ағыуланы
Туң йәндәрҙең быш-быш һүҙҙәре.

Үс алырға бушҡа хыялланып,
Өмөт сәреп, йөмдө күҙҙәрен.

Тынып ҡалды сихри йыр өндәре,
Яңғырамаҫ улар яңынан.
Гүр ҡуйынында уның ирендәре
Асылмаҫҡа инде ябылған.

Ә һеҙ, битһеҙ, ямапаты сыҡҡан
Ырыуығыҙ шаҡшы тоҡомдар,
Яҙмыш ҡаҡҡандарҙы ергә йыҡҡан
Меҫкен үксәгеҙгә тиң ҡолдар!

Һеҙ, тәхеткә ҡомһоҙ баҡҡан өйөр,
Ирек, Аҡыл, Данды быуҙығыҙ.
Ҡануидарҙан табып һыйыныр ер,
Хаҡ-хөкөмдө — барыһын ҡыуҙығыҙ!

Ләкин бар ул, башҡа хөкөм дә бар,
Бар дәһшәтле хаким, ул көтә,
Таныш уға һеҙҙең бар ҡылғандар,
Алтын уны алмай өркөтә.

Ярҙам итмәҫ ул саҡ ялғаныгыҙ,
Һуҙмаҫ һеҙгә ҡабат ҡалҡаның,
Йыуа алмаҫ ҡара бар ҡаныгыҙ
Шағирҙың хаҡ, изге был ҡанын!..

## БАЛЛАДА

Диңгеҙҙең бейек ярында
Бер һылыу ҡыҙ ултыра.
Иркәләнеп егетенә,
Һүҙен әйтә ул тура:

2

Күк йөҙөндә гәжәп, тантаналы!
Зәңгәр нурҙа йоҡлай ер тыныс...
Ниңә ауыр миңә, ниңә ҡыйын?
Ни көтәм мин? Ни һуң ҡурҡыныс?

3

Юҡ, көтмәйем бер ни тормоштан мин
Үткәнем дә миңә йәл түгел:
Ирек һәм тыныслыҡ эҙләйем мин!
Онотолоу теләй был күңел.

4

Тик кәрәкмәй һалҡын гүр йоҡоһо...
Килә минең шулай йоҡлайһым:
Серем итһен күкрәктәге көстәр,
Йә тын ғына рәхәт һулаһын.

5

Татлы тауыш, хистәремде наҙлап,
Йырлаһын гел һөйөү хаҡында,
Һәм, эйелеп, мәңге йәшел имән
Шаулап торһон башым осонда.

## ХӘЙЕРСЕ

Ҡапҡа төптәрендә изге йорттоң
Бер хәйерсе тора тилмереп.
Әсе хәсрәт, сарсау һәм аслыҡтан
Кибеп бөткән меҫкен, саҡ тере.

Тик бер һыныҡ ҡына икмәк көттө,
Күҙ ҡараны менән ялбарып.
Кемдер шул саҡ гәмһеҙ уҙып китте,
Уң ҡулына уның таш һалып.

Шулай тилмерҙем мин һөйөүеңә,
Күҙ йәштәрем менән мин яндым.
Иң, иң матур тойғоларым һиңә
Мәңгелеккә шулай алданды.

## ЕЛКӘН

Яңғыҙ елкән күренә ағарып,
Диңгеҙҙәге зәңгәр томанда.
Ни эҙләй ул алыҫ илгә барып?
Ни ҡалдырған тыуған яғында?

Ел һыҙғыра, уйнай тулҡын менән,
Һәм мачтаны һығып ҡарай ул.
Юҡ! Бәхет тә эҙләп елмәй елкән,
Бәхеттән дә ҡасып бармай ул! —

Аҫтан күк һыу, өҫтән ҡояш ҡарай,
Ҡойондороп алтын нурында.
Ә ул тынғыһыҙ гел, дауыл һорай,
Әйтерһең дә, тынлыҡ бар унда!

## ҠАЯ

Төн үткәрҙе кескәй алтын болот
Күкрәгендә мәғрүр ҡаяның
Һәм ашығып таңдан юлға сыҡты,
Күңелле ел менән шаярып.

Тик дымлы эҙ ҡалды йөҙ һырында
Ҡарт ҡаяның. Әллә шунлыҡтан,
Тора яңғыҙ, тәрән уйға сумып,
Һәм тын ғына илай бушлыҡта.

## ТОТҠОН

Асығыҙ миңә төрмәһен,
Бирегеҙ көн яҡтыһын,
Һылыуҙың ҡара күҙлеһен,
Аттың ҡара яллыһын!
Иң элек мин йәш матурҙы
Татлы үбеп ҡосормон,
Аҙаҡ атҡа атланыр ҙа
Ҡырға елдәй осормон...

Тик бейек төрмәм тәҙрәһе,
Ауыр ишек йоҙаҡта.
Ҡаплай ҡыҙҙы төн пәрҙәһе —
Ҡара күҙкәй йыраҡта.
Йәшел туғайҙа толпарым
Иркен саба йүгәнһеҙ,
Елдәр тарай ялбыр ялын,
Уйнаҡлап йөрөй гәмһеҙ.

Ә мин, яңғыҙ, ҡыуанысһыҙ,
Һаран ут яҡтыһында
Янам ялһыҙ, йыуанысһыҙ,
Янам мин зинданымда.
Ишетәм ишек артында
Ярты төн тынлығында:
Тере йоҙаҡ — һаҡсы йөрөй,
Яуап юҡ аҙымында.

## О. СМИРНОВАҒА

Үҙең юкта бик күп әйтер һүҙем,
Ә һин барҙа килә тыңлайһым.
Әйтер һүҙҙәремде әйталмайым,
Һин, өндәшмәй, һалкын карайһың.

Нишләргә һуң, ярлы телем минең
Аҡылыңды биләй алмаһа?..
Былар барыһы көлкө булыр ине,
Әгәр бик күңелһеҙ булмаһа...

## Федор Тютчев

(1803—1873)

*
* *

Оло мәғәнә бар айырылыуҙа,
Мәғәнәһенә алһаң төшөнә:
Бер көнөңмө, мәңгелекме уҙа,
Ни ҡылһаң да, һөйөү — төш кенә.

Тик күҙ йомоп күҙ асҡансы китә,
Төштөң тағы һиндә ни эше?
Ә иртәме, һуңмы, — ахыр сиктә
Уянырға тейеш бит кеше...

### ИКЕ СТИХИЯ

Тулҡынды — тулҡын, уйҙы уй ҡыуа,
Икеһе лә шул бер заттан тыуа:
Тик бындағыһы — бикле йөрәктә,
Ә ундағыһы — сикһеҙ киңлектә.
Шул уҡ мәңгелек ташыу ҙа ҡайтыу,
Шул уҡ шик-шомдо буштҡа ҡуҙғатыу...

## Алексей Толстой

(1817—1875)

### ШӨҢГӨР СӘСКӘЛӘР

Эй күк шөңгөр сәскәләр,
Даламдың күрке һеҙ!
Ниңә шулай бик моңһоу
Күгелйем күҙегеҙ?
Ниңә, зың да зың килеп,
Сыуаҡ май көлгәндә,
Баш сайҡашып, шымдығыҙ
Бәрхәттәй үләндә?
Атҡан уҡтай, йомолоп,
Елдерә атҡайым.
Гүйә, һеҙҙе ул түгел,
Мин үҙем таптайым...
Эй, күк шөңгөр сәскәләр,
Даламдың күҙҙәре.
Әйтмәгеҙсе, исмаһам,
Ҡәһәрле һүҙҙәрҙе!
Үтер ҙә китер инем,
Таптамай һеҙҙе мин,
Ярһыған шул атҡайым,
Тоймай ҙа теҙгенен.
Саң борҡотоп артынан,
Уҡ һымаҡ ул елә.
Ҡайҙа мине елдерә?
Уныһын кем белә!..

## ТОМАН

Аҡ күбектәй, ҡаплап алған
Күл өҫтөн аҡ томан.
Төпһөҙ күлдәй уйға сумған
Йәш егет ҡайғынан.

Мәңге ятмаҫ, — ятһа ятыр
Аҡ томан таңғаса.
Ел сығыр ҙа, ул таралыр,
Ә ҡайғы — һис ҡасан!

## Аполлон Майков

(1821—1897)

### ЕМШӘН *

Шәлкем генә емшән үләне
Шиңгәндә лә яҙмай еҫенән.
Терелтәлер ирҙең үлгәнен,
Төшөрөп тә илен иҫенә...

Борон заман иркен далала
Йөрөгәндә йәйрәп, күсенеп,
Ике туған ике хан була —
Олтораҡ та Серсән исемле.

Бер саҡ шулай оло туй барған,
Күп урыҫты алғас әсиргә.
Йырау-сәсән йырҙар сығарған,
Өлгөрмәгән ҡымыҙ әсергә...

Ҡапыл шунда керел араға,
Яу баҫҡан, ти, ҡара ҡойондай.
Барыһы ятҡан тырым-тырағай,
Билендәшкән аҡҡош тубындай.

---

* Емшән — хуш еҫле дала үләне.

Аҫкан-киҫкән икән Мономах,
Ҡарамаған йәше-ҡартына...
Донга ҡаҫҡан Серсән ух та ах,
Ә Олтораҡ — Ҡафтау артына.

Күп ел иҫкән дала иркендә...
Тейенмәйсә иле ырыҫҡа,
Мономах та үлгән бер көндө,
Ҡара ҡайғы һалып урыҫҡа.

Саҡырған да батыр сәсәнде,
Серен сискән Серсән батырға:
«Еткер уға беҙҙең сәләмде,
Сыҡһын, — тигән, — тиҙерәк ҡайтырға.

Баш булһа ла барлыҡ Ҡафтауға,
Байлығына әйҙә төкөрһөн.
Дошман үлде, бөттө яу-ғауға,
Далаһына ҡайтып көн күрһен.

Йырла уға беҙҙең йырҙарҙы,
Ирсмәһә күңеле бик йырға,
Төҫө итеп дала-ҡырҙарҙың,
Шул емшәнде, — ҡайтыр, — бир уға!»

Ултыра, ти, туйлап Олтораҡ,
Яран-ҡыҙҙар тулы сатырҙа.
Алтын-көмөш торғас ялтырап,
Уйы ла юҡ икән ҡайтырға.

Индерәләр шул мәл сәсәнде,
Һөйләтәләр илдең хәлдәрен.

«Ҡайтып күрсе ерең-әсәңде!» —
Тип бөторә сәсән хәбәрен.

Тик ондәшмәй ләм-мим Олтораҡ,
Көләп кенә ҡуя ни бары.
Ярандары тора ҡалтырап,
Көнгә тиңләп, данлай ҡолдары...

Шунда сәсән йырлап ебәрә
Ата-бабаларҙың йырҙарын,
Батырҙарын күҙҙән үткәрә,
Йырлай данлы ҡыпсаҡ яуҙарын...

Олтораҡтың йөҙө ҡомһарып,
Тик асыуы таша был йырга.
Башын гына ҡагып ул бары,
Ҡуша уны алып сыгырга.

Шул саҡ сәсән бирә сыгарып
Хуш еҫ бөрккән дала бүләген.
Хан, нишләргә белмәй, агарып,
Ҡыҫып ала усҡа йөрәген...

Был ни булыр, тиеп, ҡурҡышып,
Барса халыҡ хандан күҙ алмай.
Ә олуг хан дала ҡыртышын
Үбеп илай, үкһеп түҙалмай.

Ҡысҡыра хан, йәйен ҡоласын:
— Хан түгел мин һеҙгә бөгөндән!
Сит илдәрҙә солтан булгансы
Булайым, — ти, — олтан илемдә!..

Иртән иртүк томан таралгас,
Тау баштары сумгас баҡырга,

**Хан, хушлашып, атҡа атлангас,**
**Каруандар сыга ҡайтырга.**

**Тау артынан тауҙар артылып,**
**Тиҙерәк көтөп дала келәмен,**
**Ул алыҫҡа ҡарай, атлығып,**
**Төшөрмәйсә ҡулдан үләнен...[1]**

---

[1] Был хикәйәт, авторҙың аңлатмаһы буйынса, Волын йылъяҙмаһынан алып яҙылған һәм шағирҙың «Тарих тауыштары» тигән циклына индерелгән *(Р. F.)*

## Иван Никитин

(1824—1861)

### МУЖИК

Өҫкә кейеп тишек күлдәк,
туҙған сабата ҡатып,
Ултыра ул, мужик меҫкен,
нишләртә, тип, баш ватып.
Ҡайғы-хәсрәт баҫҡан уны,
уйға сумған, ҡуҙғалмай.
Бөҙрә сәсен өтә ҡояш, —
уныһы ла ҡыҙғанмай.
Ғүмер баҡый көсөн түкте,
ялсыманы һабанда.
Урып бураға һалғаны
булды һыуға һалғандай.
Өйөндә лә, әүендә лә
бил яҙманы эш менән,
Тик тапҡаны өнһөҙ-һүҙһеҙ
китеп торҙо кешегә...
Күктән бары, бәхет түгел,
ризыҡ-икмәк һораны.
Тәңреһе лә икмәк менән
тултырманы бураны...
Бары бәлә-ҡаза бирҙе!..
Шуға оло үпкәһе.
Тик һүҙ әйтмәй ауыҙ асып,
асһа — күренер үпкәһе!.

## Алексей Плещеев

(1825—1893)

### АЛҒА!

*(Рус «Марсельеза»һы)*

Алға, дуҫтар! Ҡурҡыу һәм шик белмәй,
Тотонайыҡ данлы көрәшкә!
Күктәрҙә мин инде күреп ҡалдым:
Ҡанды йыуып, унда нур төшкән!

Ҡыйыурaҡ! Ҡулға-ҡул бирешеп,
Ҡуҙғалайыҡ алға беҙ бергә,
Фән байрағы аҫтарында, әйҙә,
Киләйек ныҡ, уртаҡ фекергә.

Ялғанлыҡ һәм гөнаһ әһелдәрен
Язалайыҡ тура һүҙ менән,
Йоҡлағандың йоҡоларын асып,
Илтәйек хаҡ яуҙың үҙенә!

Табынып зат эҙләп ерҙә-күктә,
Тыуҙырмайыҡ уйлап аллалар,
Баш эймәйек улар алдында беҙ,
Бирһә лә мең рәхәт донъялар!

Тик мөхәббәт һүҙен сөйөп илдә,
Еткерербеҙ байға, фәҡиргә,
Ғәфү итеп хатта залимдарҙы,
Беҙ түҙербеҙ барлыҡ йәбергә.

Бәхетлеһең, ауыр ғүмереңде
Ҡанлы яуҙа янып үткәрһәң;
Талантыңды, ялҡау бер ҡол ише,
Ергә күммәй, үргә күтәрһәң!

Юл яҡтыртыр яҡты йондоҙ булып,
Янһын беҙгә изге хәҡиҡәт,
Ышаныгыҙ: ысын йөрәк һүҙе
Яңғырамаҫ бушҡа, ул — ҡиммәт!

Ҡолаҡ һал, дуҫ, дуҫың һүҙҙәренә,
Йәш күсөбөҙ ташып торғанда:
Алға, алға, сигеү белмә артҡа,
Ни күрһәк тә алыҫ барғанда!

## Иван Бунин

(1870—1953)

### ЯҢҒЫҘЛЫҠ

Ел дә ямғыр, ел дә томан
Был ялангас һалҡын бушлыҡта.
Баҡсалар ҙа үлеп ҡалған,
Яҙға саҡлы тынған ҡошсоҡтар.
Мин яңғыҙым. Һүрәт төшөрәм,
Өй ҡараңғы. Тыштан ел өрә...
Кисә булдың һин янымда,
Тик бойоҡһоң, булһаҡ беҙ бергә.
Ә мин һине ҡатынымдай
Тоя башлағайным эңерҙә...
Ярай! Хуш! Нисек тә мин яңғыҙ
Яҙға саҡлы үлмәм ҡатынһыҙ.
Шул уҡ болот бөгөн тағы ла
Ағыла ла һаман ағыла.
Болдор алдын йыуған ямғыр,
Эҙҙәреңде теләп күмергә.
Яңғыҙыма шундай ауыр
Ҡарап тороу һоро эңергә.
«Борол!» — тиеп шул саҡ ҡапылдан
Ҡысҡыраһым килде артыңдан.
Тик үткән юҡ ҡатын-ҡыҙ өсөн,
Ни хәл итәң? Хәл ит, италһаң!
Ут яҡ, эйҙә, ҡайғың баҫ эсеп...
Шәп булыр ҙа ине эт алһаң!

## Александр Блок

(1880—1921)

*
* *

Аһ, йәшәгем килә, йәшәгем:
Бар терене килә йыр иткем,
Бар йәнһеҙгә килә йән өргөм,
Булмағанды килә бар иткем!

Ят донъяның мәхшәр был төшө
Быуһа быуһын, әйҙә, алҡымдан, —
Киләсәктә шат бер йәш кеше
Әйтер, бәлки, шағир хаҡында:

Кисерәйек, тиер, гонаһын,
Шулмы, тиер, уны ир итте!
Ул бит — Ер һәм Ҡояш балаһы.
Тантанаһы, тиер, иректең!..

*
* *

Тәүҙә барыһын ул уйынға алды,
Аңланы һәм — шелтә ташланы,
Матур башын сайҡап, яулыҡ менән
Күҙ йәштәрен һортә башланы.

Һәм, тештәре менән үртәп, көлдө,
Көтмәгәндә барыһын онотоп.
Хәтерләне — һәм үкһеп ебәрҙе,
Өҫтәлемә сәсен туҙғытып.
Төҫө ҡасты: китте, кире килде,
Ниҙер көттө, ярһып йөрәге,
Ҡәһәрләне, кинәт йөҙөн борҙо
Һәм мәңгегә китте, күрәһең...
Ярай, ваҡыт эшкә тотонорға,
Ғәҙәттәге эшкә — көндәге.
Үтте ләме икән шулай ғүмер,
Шаулап киткән кеүек күлдәгең?!

*
* *

Гамлет — мин ул. Туңа йәнем-тәнем,
Үргән саҡта мәкер ауҙарын.
Донъяла тик тәүге мөхәббәтем
Иретә был боҙлоҡ тауҙарын.
Алыҫтарға һине, Офелиям,
Алып китте тормош һалҡыны.
Тик мин генә бында хәлдән таям,
Йотоп ыулы ҡылыс ялҡынын...

*
* *

Төнгө урам, фонарь, аптекаһы.
Мәғәнәһеҙ һаран яҡтылыҡ.
Сирек быуат йәшә шулай тағы —
Шулай ҡалыр һаман — барһы ныҡ.
Үлеп, тағы баштан башлаһаң да,
Шул уҡ донъя бағыр ни бары:
Шул уҡ боҙло тулҡын каналында,
Төн, аптека, урам фонары...

# IV

**Сергей Есенин**
**Михаил Исаковский**
**Михаил Светлов**
**Яков Шведов**
**Александр Решетов**
**Александр Твардовский**
**Борис Ручьев**
**Константин Симонов**
**Вадим Шефнер**
**Михаил Дудин**
**Владимир Торопыгин**
**Геннадий Молодцов**
**Николай Рублев**
**Игорь Волгин**

## Сергей Есенин

(1895—1925)

*
* *

Алһыу һыуҙар һибеп йөрогән ерҙә
Кәбеҫтәгә ел — таң килене, —
Бер ҡолонсаҡ саған имеп тора
Инәһенең йәшел еленен.

*
* *

Кис булды. Ысыҡтар
Емелдәй ситәндә.
Мин, талға һөйәлеп,
Торам юл ситендә.

Ай нуры яҡтырта
Нәҡ беҙҙең ой башын.
Ҡайҙалыр алыҫта
Һандуғас тауышы.

Кис йылы. Мин хәс тә
Ҡыш мейес янында!
Шәм кеүек теҙелеп,
Ойоған ҡайындар.

Тик төнгө һаҡсыға
Таңғаса йоҡо юҡ.
Иренеп кенә ул
Туҡылдай туҡ та туҡ.

*
* *

Ябынған да ялбыр юрған,
Йыр йырлай ҡыш — шаулай урман,
Ҡарағайҙар сайҡала.
Тирә-яҡта хәсрәт йотҡан,
Алыҫ илгә юлдар тотҡан
Сал болоттар айҡала.

Ә урамда ҡар бураны
Йәйһә лә ебәк юрғанын,
Уғата һыуыҡ тышта.
Сыр-сыу сыпсыҡ балалары,
Ташлап киткәс аталары,
Тәҙрәләргә йылышҡан.

Өшөгән меҫкен ҡошсоҡтар,
Йонсоп бөткән ас сыпсыҡтар,
Бер-беренә һырыға.
Ә ел-дауыл, йәне асып,
Шаҡый ҙа тәҙрә ҡапҡасын,
Ҡоторона пығыраҡ.

Елдәр, елеп, көй көйләйҙәр,
Серем итә меҫкенкәйҙәр,
Боҫоп тәҙрә ҡашына.
Һәм төш күрә һәр бисара:
Имеш, кондәй балҡып тора
Яҙ-һылыуҡай ҡаршыла.

*
* *

Уҡалаған күл өҫтө шәфәҡ нурынан,
Ҡарағайҙар таң ҡалған һуйыр йырынан.

Ҡыуышында ҡайҙалыр һыҡтай һарығош,
Һыҡтамайым мин генә — яҡты был һағыш.

Беләм, кисен сығырһың әүен артына,
Ултырырбыҙ хуш еҫле кәбән аҫтына.

Иҫергәнсе үбермен, гөлдәй иҙермен,
Бер иҫерткәс, ғәйбәт ни — уға түҙермен.

Үҙең, ирен, ташларһың ебәк шәлеңде,
Ҡаршыларһың ҡыуаҡта йәнһеҙ мәлеңде.

Әйҙә шашһын һуйырҙар моңһоу йырында,
Һөйөнөсле һағыш бар ал таң нурында.

*
* *

Ташҡын томаны
Ялағас ләмен,
Ай ҙа ташланы
Алтын теҙгенен.

Йөҙәм кәмәмдә,
Ярға тартыләм.
Сиркәү-кәбәндән
Хуш еҫ бөркөлә.

Тик ҡара һуйыр
Килә ҡур ҙа ҡур,
Әйҙәп тын һаҙға —
Киске намаҙға...

*
* *

Ҡарҙарын ҡоя муйылым,
Үләп сумған ысыҡҡа.
Ужымға һуҙып муйынын,
Ҡырға ҡарғалар сыҡҡан.

Ҡарағайҙар ҡул болғайҙар,
Аңҡый сайыр еҫтәре.
Әй һеҙ, урман, киң туғайҙар,
Яҙға китә иҫтәрем!

Елдәр һөйләй сер-хәбәрен,
Елкендереп күңелде.
Уйлап-уйлап һөйгән йәрен,
Күңел йырға күмелде.

Ҡойон, муйыл, ҡарҙарыңа,
Ҡоштар моңо түгелһен!
Йүгерә-атлай ҡырҙарыма,
Һибәм сәскәң күбеген.

## ҠЫРПАҠ ҠАР

Еләм. Тып-тын. Тыпылдаша
Ҡарҙа бары дағалар.
«Ҡарр» ҙа «ҡарр!» — тип ҡарҡылдаша
Туғайҙа тик ҡарғалар.

Кемдер сихырлаған урман
Йоҡлай, татлы төш күреп.
Ҡарағай аҡ тун ябынған,
Белгән төҫлө өшөрөн.

Юлсы ҡарттай эйелгән дә
Таянған ул таяҡҡа,
Ә тумыртҡа түбәһендә
Тәүбә туҡый яп-яҡҡа.

Саба атым. Алда киңлек.
Ҡар яуа, түшәй шәлен.
Ә юл оҙон таҫма кеүек,
Иге-сиге юҡ әле!..

*
* *

Әй һин, минең тыуған Рәсәй!
Бер һүрәт, тим, ойҙәрҙе...
Иге-сиге күренмәйсә,
Күк һура тик күҙҙәрҙе.

Мин, бер юлсы дәрүиш ише,
Ҡырҙарға торам ҡарап.
Кәртә буйҙарына төшөп,
Тирәктәр кибә шыңрап.

Бал, алма еҫе аңҡытҡан
Баҫымсаҡ күҙкәй килә,
Йәш-елкенсәк ҡырға сыҡҡан,
Йырлашып бейей, көлә.

Әйҙәй мине йәшел һуҡмаҡ
Иркенә тугайҙарҙың.
Сыңлай, һырғалары һымаҡ,
Көлөшөүе ҡыҙҙарҙың.

Ҡысҡырһа яу: «Ташла Русты,
Йәннәткә, тип, кил инде!»
Кәрәкмәй, тирмен, йәннәте,
Бирегеҙ тик илемде!

## ҺЫЙЫР

Ҡартайған ул, тештәр бөткән,
Күп балдаҡ мөгөҙөндә,
Көтөүсе лә туҡмап коткән
Тугайҙа йөрөгәндә.

Йөрәге тауыш яратмай,
Сысҡан ҡыштырлаһа ла.
Бары Аҡбәкәлен уйлай,
Юҡ инде, тип, донъяла.

Бирмәнеләр улын уга,
Тарһындылар, күрәһең.
Елдәр уҫаҡ баганала
Елберләтә тиреһен.

Уҙмаҫ улы яҙмышынан,
Етер ул көн һыйырга:
Элмәк һалып муйынына,
Сыгарырҙар һуйырга.

Иламһырап, моңһоу ҡарар,
Мөгөҙөн ҡаҙар ергә...
Тик тугайҙар, аҡ сауҡалар
Төшкә керә хәҙергә.

## ӨЙӨР

Йәшел ҡаштаҡта йылҡы өйөрө
Юшай, көндәрҙең сал саңын өрөп.

Текә ярлауҙан зәңгәр ҡултыҡҡа
Ыҫмала төҫлө ялдары ятҡан.

Ат күҙе ҡарай мөлдөрәп һыуҙан,
Көмөш йүгәнен ай шуға һуҙған.

Үҙ шәүләһенән ат үҙе өркә,
Бышҡырып төнгә, яңы көн көтә.

•

Яҙғы көн зыулай ат ҡолағына,
Тәүге себен дә танһыҡҡа ғына.

Тик кискә инде туғайҙа аттар
Тибенә башлай, ята ҡолаҡтар.

Һарлығып күктә, ярып ҡыуаҡты,
Тояҡ тауышы килә тып та тып.

Йондоҙға тулҡын үрелеү була,
Көлдәй себендән һыу өҫтө тула.

•

Көн дә байыны. Һил ҡалды туғай.
Көтөүсе малай һыҙҙыра ҡурай.

Бар өйөр тыңлай, эйеп ҡаҡ башын,
Һомай ҡошҡайҙың зарын, һағышын.

Ә сәңгел шаңдау, тейеп иренгә,
Уйҙарын илтә күҙ күрмәҫ ергә.

Һөйөп көнөңдө, ҡара төнөңдө,
Көйләйем, илем, һиңә көйөмдө.

## ЭТ ХАҠЫНДА ЙЫР

Иртән иртүк арыш һаламында
Эт ояһын елдәр туҙҙырҙы.
Септә ышығына ятып, кәнтәй
Ете ерән көсөк тыуҙырҙы.

Ете ерәнен ул эңергәсә
Ялап иркәләне һалҡында.
Һәм уйылып ҡына ҡар ирене
Йылы ҡорһағының аҫтында.

Тауыҡтар ҙа төнәр ваҡыт етеп,
Көн дә инде тамам кисекте,
Шул саҡ һытыҡ йөҙлө хужа сығып,
Тоҡҡа тыҡты ете көсөктө.

Хәлһеҙ кәнтәй, көрткә бата-сума,
Ҡалмай барҙы уның артынан...
...Йылыу һыуҙың тоноҡ тигеҙлеге
Оҙаҡ-оҙаҡ ятты ҡалтырап.

Ялай-ялай тирле ҡабырғаһын,
Саҡ һөйрәлеп ҡайтып кергәндә,
Өй башынан йөҙгән ай ҙа уға
Бер балаһы булып күренде.

Сәңкеп-сәңкеп оҙаҡ шыңшыны ул,
Күкһел бейеклектән күҙ алмай.
Ә ҡыйгас ай тау артына шыуҙы,
Йәшеренде унан, оҙамай.

Гүйә, шул саҡ һыныҡ урынына,
Көлкө күреп, кемдер таш атты.
Мөлдөрәшеп ҡарға эт күҙенән
Алтын йондоҙ булып йәш аҡты.

*
* *

Йөрөмәм инде, иҙмәм ал ҡыуаҡты,
Эҙләһәм дә тапмам эҙеңде.
Төштә генә күрҙем мин ул саҡты,
Һоло сәс көлтәһен үҙеңдең.

Шәфәҡтең ал уты ине йөҙөң,
Еләктең ал һуты — иренең,
Күктең ҡото ине ике күҙең,
Һылыулыҡта, наҙҙа бер инең.

Күҙ емдәрең шиңгән саҡтарыңда
Исемең дә, иреп, юҡ булды.
Тик таушалған шәлең ҡаттарында
Бал еҫтәре ҡалған ҡулыңдың.

Таң һыҙылып, бесәй балаһындай,
Өй башында битен йыуғанда,
Һинең хаҡта йырлап сайпылғандай
Һыу ҡыҙҙары моңһоу йылғамда.

Бышылдаһа ҡайсаҡ күкшел төндәр,
Ул хыялың, йырың ине, тип,
Шулай ҙа мин ул һыныңды кемдәр
Уйлап тапты икән һинең, тим...

Йөрөмәм инде, иҙмәм ал ҡыуаҡты,
Эҙләһәм дә тапмам эҙеңде.
Төштә генә күрҙем мин ул саҡты,
Һоло сәс көлтәһен үҙеңдең...

## ТӨЛКӨ

*А. М. Ремизовка*

Ҡайтып еткәс тә ул саҡ һөйрәлеп,
Һынған аяҡ менән өңөнә,
Тәгәрмәстәй ауҙы бөгәрләнеп
Ҡан һыҙылып килгән эҙенә.

Күҙҙәренә ут сағылды һаман,
Һаҙ сайҡалды төтөн эсендә.
Ел артылып сыҡты ҡыуаҡтарҙан,
Йәҙрә һипкән төҫлө тәтелдәп.

Баш осонда һаман саңыт туҙа
Ҡандай еүеш ҡыҙыл эңерҙә.
Ҡалҡытһа ла башын болоҡһоуҙан,
Теле инде туңа һеңерҙә.

Тик ҡойроғо елдә хәс тә ялҡып,
Серек кишер тәме — ирендә.
Ағас бәҫе, балсыҡ еҫе аңҡый,
Ҡаны һарҡый әле сөрөлдәп...

*
* *

Ҡыр ялангас, ҡыуаҡтар буш,
Һыу өҫтөнән томан тартыла.
Тәгәрмәстәй, һүрән ҡояш
Тәгәрәне күк тау артына.

Серем итә соҡорло юл,
Бөгөн әле алды хәтергә:
Сал ҡышты ла ҡаршылар ул,
Күп ҡалмаған инде көтөргә.

Аһ, үҙем дә шау томанда
Ҡарап торҙом кисә самалап:
Ерән ай ҙа, бер ҡолондай,
Еғелеп алған беҙҙең санаға!

*
* *

Ярып киләм тәүге аҡ ҡарҙы,
Һыйы сәскә баҙлай күңелдә.
Күк шәм итеп шәфәҡ ҡабыҙҙы
Бер йондоҙон инде күгендә.

Көнмө, төнмө — бер ни тоймайым,
Ел йә этәс йырын ишетәмдер?
Ҡыш та түгелдер был, моғайын,
Тик аҡҡоштар ергә төшкәндер?

Әй, күркәм дә аҡлан был саҡта!
Һалҡынынан — ялҡын йөрәгем!
Ҡыҫып алғым килә ҡосаҡҡа
Ҡайындарҙың ап-аҡ күкрәген.

Әй, дөм-ҡара урман ҡосағы,
Ни ерен кәм әкиәт иленән?
Күтәреп тә килә ҡосаһым
Талдарыңдың нескә биленән!

*
* *

Беләм, беләм: бар ул бәхет, бар!
Ҡояш та бит әле һүнмәгән.
Бәхет юрап беҙгә, ал таңдар
Ҡыҙыл намаҙлыҡмы йәймәгән? —
Беләм, беләм: бар ул бәхет, бар!

Зыңла, зыңла, алтын илкәйем,
Ел һин, ел һин, алтын елкәйем!
Көтөүсе лә көтә көпкәйен,
Тыңла, тыңла өмөт көйкәйен,
Зыңла, зыңла, алтын илкәйем!

Яратам мин ярһыу һыуҙарҙы,
Һыуҙарҙағы алһыу нурҙарҙы.
Ҡыҫһа ла был ҡайғы алҡымды,
Аҡ күңеле һүнмәҫ халҡымдың, —
Яратам мин ярһыу һыуҙарҙы!

*
* *

*Л. И. Кашинаға*

Йәшел генә толомҡайың,
Ҡыҙ күкрәге — күкрәгең.
Эй һин, һылыу ҡайынҡайым,
Быуала ни күрәһең?

Ни бышылдай елдәр һиңә,
Ни һөйләй ҡом-туприғың?
Әллә йәшел сәстәреңә
Кәрәкме ай-тарағың?

Әйтсе, әйтсе серҙәреңде,
Ҡатымы бик уйҡайың?
Яратам мин йырҙарыңды,
Яҡын миңә моңҡайың.

— Бында, — тине ҡайынҡайым, —
Бөгөн, йондоҙло төндә,
Килде көтөүсе дуҫҡайым,
Йәш эркелеп күҙендә.

Ай япты атлас юрғанын,
Үләндәр яçтыҡ булды.
Ә ул ҡосаҡлап иланы
Ялангас аяғымды.

Көрһөндө лә таң атҡанса,
Әйтте, һыйпап япрағым:
«Яҙын торналар ҡайтҡанса
Һау булып тор, аппағым!»

## КАНТАТА

Йоҡлағыҙ һеҙ, туғанҡайҙар!..
Тыуған еркәй яңынан
Ҡакшау белмәç ҡыҙыл яуҙар
Туплай Кремль янына.

Ерҙә яңы ил яһайҙар —
Ялмап алған ялҡында.
Йоҡлағыҙ һеҙ, туғанҡайҙар,
Шиңмәç гөлдәр аçтында.

Ҡояш, алтын мөһөр төçлө,
Һаҡлай изге ҡапҡаны.
Һеҙҙең яндан, ер йөҙөнөң
Ҡаршыларға ал таңын,
Атлай илдең ҡалҡаны.

*
* *

Көҙгөсә уһылдай ябалаҡ —
Иркендә таңғы юл сатының.
Сәстәрем көлтәһен һағалап,
Эй, тарай ел-ҡараҡ алтынын.

Яланса, даласа: «Аһ-һа-һай!» —
Тип һуҙам уҫаҡҡа ҡулымды.
Тиҙҙән, тим, ҡойоноп ҡарҙа, ай
Ултырыр башына улыңдың.

Тиҙҙән мин ҡатырмын япраҡһыҙ,
Ҡолаҡта — йондоҙ ҙа ҡар сыңы...
Йәштәргә йырҙарым яраҡһыҙ,
Ҡарттар ҙа тыңламаҫ йырсыһын.

Килер бер йәш шағир киң ҡырҙан,
Яңыса яңғырар ян-яҡтар...
...Күҙгөсә һыҙыра ямғыр ҙа,
Күҙгөсә бышылдай япраҡтар.

*
* *

Йәлләп, саҡырып йәш тә ҡоймам инде,
Аҡ сәскәһен ҡойғас алмағас.
Мин яңынан йәш булалмам инде,
Күҙҙәр һарыһы бер ялмағас...

Дарҫлап тибалмаҫһың хәҙер инде,
Һалҡын төшкән ялҡын йөрәгем.
Артта ҡалды аҡ ҡайынлы илде
Ялан аяҡ ҡыҙырып йөрогәнем.

Берәҙәк йән! Һаман, һаман һинең
Һүрәнәйә бара ялҡының.
Әй, юғалған саф йәшлегем минең,
Күҙ ялҡыным, хистәр ташҡыным...

Нәфсесреm һараная барып,
Төшмө һин, тим, ғүмер хаҡында.

Әйтерһең дә, яҙғы таңды ярып,
Сабып үттем аҡбуҙ атымда.

Беҙ һәммәбеҙ ҡунаҡ был донъяла,
Күр, саған да ҡоя баҡырын...
Әйҙә атһын, әйҙә ятһын шулай
Ғүмер сәскәһе һәм ахыры!..

## ӘСӘЙЕМӘ ХАТ

Һин иҫән-һаумы әле, әсәй ҡарсыҡ?
Мин дә иҫән. Күптин-күп сәләм!
Ни хәлдә һуң беҙҙең аҡ аласыҡ?
Нур яуҙырһын уға бар ғәләм!

Хат яҙғандар. Эстән һыҙып ҡына,
Минең өсөп бик тә көйөнөп,
Йыш сығаһың икән юл сатына,
Иҫке еләнеңде кейенеп.

Күҙҙәреңә эңер ҡараһында
Бер үк мәхшәр, имеш, күренә:
Кемдер, имеш, эске янъялында
Хәнйәр ҡаҙай бәгрем түренә.

Ҡуйсы, әсәй! Юҡҡа үртәлмәсе,
Тик күҙеңә шулай күренә.
Түгел дә мин бөткән бер эскесе,
Ҡайтып һине күрмәй, үлергә.

Мин һаман да шулай бик илгәҙәк,
Тик бер өмөт менән толданам:
Ҡайтҡым килә тәпәш өйгә тиҙерәк,
Ҡотолоп был мәхшәр донъянан.

Мин ҡайтырмын, беҙҙең ап-аҡ баҡса
Шау яҙғыса сатыр киргәндә.
Тик уятма сабый саҡтағыса,
Таң һарынан тороп эргәмдә.

Уятма һин уйлап туйған уйҙы,
Болартма ла һүнгән хыялды.
Был донъяла йонсоу-юғалтыуҙы
Үтә иртә татып, мин яндым.

Өйрәтмә лә мине инанырға,
Үткәндәргә инде юл ябыҡ.
Һин генә бер терәк йыуанырға,
Һин генә бер изге яҡтылыҡ.

Шулай булғас, һис тә болоҡһома,
Минең өсөн бик тә көйөнөп.
Йыш сыҡмасы улай юл сатына,
Иҫке еләнеңде кейенеп.

## СОВЕТ РӘСӘЙЕ

*А. Сахаровка*

Ул гәрәсәт үтте.
Күптәр ҡалды ятып.
Дуҫ-иштәр ҙә инде бик аҙ күренә.
Мин, һигеҙ йыл үткәс,
Тағы төштөм ҡайтып
Етемһерәп ҡалған еремә.

Кемгә өндәшергә?
Кем менән һуң бүлешергә
Иҫән ҡалыуымдың моңһоу шатлығын?

Бында хатта
Бүрәнә ҡош — елтирмән дә ергә
Күҙен йомоп,
Бер ҡанатҡа ҡалған, ҡаҡлығып.

Бер кемгә мин таныш түгел бында,
Ә белгәндәр инде — күптән онотҡан.
Элек атай йорто торған был урында
Хәҙер инде кол ҡатҡан да,
Борҡоп, саң ятҡан.

Ә шулай ҙа тормош ҡайнай.
Яҡ-яғымда
Ҡарты, йәше — барһы мыж килә.
Тик, эшләпәм сисеп, һаулыҡ һорашҡанда,
Һәр ҡараштан һалҡын бөркөлә.

Һәм башыма күс-күс уйҙар килеп ҡуна:
Илемме был?
Әллә был тик төшөммө?
Һәр кемгә мин — дәрүиш һымаҡ,
Ят бер ҡунаҡ,
Алла белһен ҡайҙан —
Әллә айҙан килеп төштөммө?

Былмы һуң мин?
Шул ауылдың үҙ ярсығы!
Бит ҡасандыр шул ауылда бер бисә
Танҡан өсөн генә даусан бер йырсыһын,
Бөтә Рәсәй буйлап даны китәсәк!..

Тик аҡылым бөрөп ала йөрәгемдән:
«Иҫеңә кил! Ташла үпкәңде!
Был бит бары яңы быуын өйҙәрендә
Яңы яҡтылыҡ тик ҡыуа үткәнде...

Ә һин инде бер аҙ шиңә тоштоң,
Бүтән йәштәр йырлай бүтән йыр.
Уларға бит, —
Мулы төшкәс был өләштөң, —
Әсә бөгөн — ауыл түгел, бөтә Ер!..»

Эй илгенәм! Ҡалай инде мин көлкөлө! —
Ас яңаҡҡа йәш ҡанмы һуң килешә?
Ауылдаштар теле ят бер тел шикелле,
Үҙ илемдә, гүйә, мин бер килмешәк!

Бына бөгөн —
Йәкшәмбе көн — яҡташтарым
Йыйылған да волость алдында,
Сатай-ботай һөйләп телмәр-сығыштарын,
Кәңәшәләр тормош хаҡында.

Кис тә булды.
Һорғолт ҡыр яҡтарын
Шәфәҡ манғас шыйыҡ буталға,
Тирәктәрҙең ялтыр тояҡтарын
Канау буйлап, гүйә, ут алған!

Аҡһаҡ «ҡыҙылармис» әллә йоҡомһорай,
Хәтер ептәренә сырмап маңлайын?
Перекопты ҡалай алғандарын һайрай,
Буденныйҙы маҡтай, табып һүҙ яйын.

«Беҙ, — ти, — теге... буржуйҙарҙың унда,
Ҡырымында, арт һабағын шулай уҡыттыҡ!..»
Ә сағандар ҡолаҡтарын ҡарпайтҡандай,
Бисәләр «аһ» килә, эңер ҡурҡытып.

Тауҙан төшә шул саҡ комсомолдар,
Өҙә яҙып гармун күреген.
Бедный Демьян агиткаһын таҡмаҡлайҙар,
Туғай яңғыратып, ана, күрегеҙ!..

Бына һиңә илең!
Ҡайҙан алып әле
Халҡым, тип, мин тамаҡ ярҙым йырымда?
Бында инде минең йырҙың үткән мәле,
Үҙемдең инде кәрәк юҡ бында...

Ярай, кисер, илем!
Ҡыумаһаң да,
Эшләгәнем еткән һиңә — алҡымдан!
Йырҙарымды бөгөн һанға һуҡмаһаң да,
Мин йырланым һине ауырыу сағыңда.

Ҡалай булһа, шулай —
Барһын эскә тирәм.
Яңы юлдар ярып, бәлки, баралмам.
Октябргә, Майға бар йәнемде бирәм,
Тик лирамды ғына инде биралмам.

Бирмәм уны төрлө ят ҡулдарға,
Хатта әсәм менән дуҫым, ҡатынға.
Тик үҙемә ышанып ул сер ҡалдырған,
Тик үҙемде һалған уттан ялҡынға.

Үҫегеҙ һеҙ, йәштәр, уҙып йәш имәнде,
Башҡа юлда башҡа моңдо һеҙгә ятларға.
Ә мин китәм, мәңге баҫып ярһыу йәнде,
Әле күҙ күрмәгән алыҫ яҡтарға...

Әммә
Күргәндә лә бөтә Ер шарында
Яу, дау үткән,
Һәм ғәм, алдау бөткән рәсемде,
Йәнем-тәнем менән йырлар инем унда
Алтынан бер өлөш ерен — Русымды!..

* * *

Һөйләште лә тынды алтын сауҡа,
Үҙенең шат, ҡайын телендә.
Торналар ҙа оса йылы яҡҡа,
Йәлләп тормай һис ни илендә.

Кемде йәлләргә һуң?
Һәр кем шулай
Килә, китә, өйөн ҡалдырып.
Тик тармалар менән бер тулған ай
Ҡарап ҡала барыһын, ҡаңғырып.

Ҡарап торам мин дә буш тугайҙа
Торналарҙы елдәр ҡыуғанын.
Шат йәшлегем генә бары уйҙа,
Йәл дә түгел ергә тыуғаным.

Йәл дә түгел бушҡа үткән йылдар.
Йәл дә түгел күңел гөлдәрем.
Яна әле, ана, ут-баландар,
Тик йылытмай ялҡын телдәре.

Бөтмәй әле янып тәлгәштәре,
Ҡыуарһа ла, ҡалыр үләндәр.
Тән ҡойғандай ағас күҙ йәштәрен,
Мин дә ҡоям моңһоу үләндәр.

Әгәр заман, бер өйөмгә өйөп,
Уларҙы ла түкһә ел менән,
Әйтегеҙ тик алтын сауҡа, тиеп,
Яҙып ҡалды алсаҡ теленән...

## ЛЕНИН

*«Гуляй-поле» поэмаһынан өҙөк*

Бар ҡанундар урынынан ҡупҡан,
Ил, бураплы көндәй, низағлы.
Ярҙарынан күңел ярһып сыҡҡан,
Һаташтырған беҙҙе азатлыҡ.

Рәсәй! Күңел түрендәге әсәй!
Һине күреп, һыҡтай йөрәгем —
Нисә йыл һуң, юҡ, ишетмәй Рәсәй
Эт өрөүен, этәс һөрәнен.

Нисә йыл һуң илдең һил тормошо
Юғалтҡанға тыныс һүҙҙәрен,
Тояҡтарҙан, ҡара сәсәк ише,
Уйғыланган улъя ерҙәре.

Бер өҙлөкһөҙ күкрәү, иңрәү, үрт һәм
Арба-тачанкалар сыйлауы...
Әллә, йоҡлап, мин төшөмдә күрәм:
Һөңгө менән бар әйләнә-тирәм
Солғанғанмы, ҡубып сүл яуы?

Юҡ, төш түгел, түгел, өндә күрәм,
Йомолмаған һис тә күҙҙәрем:
Яу артынан сапҡан яуҙар менән,
Дауҙар менән тулған ерҙәрем.

Ҡайҙа бара был яу? Һуғыш ҡайҙа?
Шаңламай ҙа һүҙҙе ер-дала.
Белмәйем, был — пур яуамы айҙан,
Сәсрәгәнме күккә бер дага?

Мәшхәр ҡупҡан ерҙә...
Тик күк тыныс.
Күренәлер һуҡыр күҙгә лә:
Айҡап йөрөй илде ут та ҡылыс,
Һәм үҙ-ара ыҙғыш өҙгөләй...
. . . . . . . . . . .

Әсәй-Рәсәй! Шомло, моңло аҙан!
Ҡайын-гөлөн күрмәй үтмәсе!
Килеп сыҡты икән ул ҡайҙарҙан
Һине болоҡһотҡан фетнәсе?
Дәһшәтле бер даһи. Һыны менән
Ул күңелгә минең инмәгән.
Ат эйәрләп, сабып йөрөмәгән,
Дауылға ла ҡаршы елмәгән.
Ҡылыс һелтәп, баш та йәнсемәгән,
Баҫтырмаған ҡыуып ул яуҙы.
Үлтерештә, тиҙәр, бары һөйгән
Тик бүҙәнә атып алыуҙы.
Герой хәҙер шартлы исем генә:
Йөҙлөк кейгән герой һанала.
Ә ул шунда малай-шалай менән
Тау шыуған, ти, ҡышын санала.
Бөҙрә сәстәр ҙә ул еткермәгән
Әүрәтергә ҡатын-ҡыҙ халҡын.
Батмус һымаҡ башын кем күрмәгән? —
Ул ябайҙан-ябай, баҫалҡы.

Оялсан һәм йылы ҡараштары,
Ул бер сфинкс һымаҡ хәс миңә.
Аңлай алмайым мин: был ер шарын
Тетрәтте ул ниндәй көс менән?

Тик тетрәтте...
Эй, ел-дауыл, туҡта,
Ҡотороп сәс ирек орлоғон,

Йыусы, йыу бәхетһеҙ был халыҡтан
Сиркәү, төрмәләрҙең хурлығын!..
. . . . . . . . . . . . . .

Ауыр ине, ауыр заманалар,
Уҫал ҡулдар аҫты, киҫтерҙе,
Ҡаныбыҙҙы эскән аҡ батшалар
Залимдарға ғына төҫ бирҙе.
. . . . . . . . . . . . . .

Эй, батшалыҡ! Яман еҫле төйәк!
Быуат-быуат эстең, типтерҙең.
Ә һуңынан беҙҙе һәр аҡ һөйәк
Ҡоллоғона һатты тимерҙең.

Ил иланы, күреп был афәтты,
Һәм ил көттө шул мәл берәүҙе...
Һәм ул килде.
. . . . . . . . . . . . . .

Ҡөҙрәт һүҙен әйтте,
Алға әйҙән беҙҙе бер үҙе.

«Михнәт ятмаҫ, — тине, — юлыңа,
Барын алһаң, эшсе, ҡулыңа.
Берҙән-бер юл ошо: ҡотолоу —
Ул Советҡа һеҙҙең төтөнөү...»
. . . . . . . . . . . . . .

Һәм беҙ киттек — елдәр олоп торҙо —
Уның күҙе баҡҡан яҡтарға.
Ябырылдыҡ
Барлыҡ халыҡтарҙы
Ирек көтөп торған саҡтарға...
. . . . . . . . . . . . . .

...Бына ул юҡ...
Илау, йырлау нимә,
Хәсрәт өнө күмгәс бар илде?
Баҡыр туптар аһылдауы менән
Һуңғы сәләм инде бирелде.

Беҙҙе ҡотҡарған зат
Инде вафат.
Инде ул юҡ! Ә терелә? —
Ул ҡалдырған яҙғы ташҡын илен
Бетон ярҙарына төрөрҙәр.

«Ленин үлде!» һүҙе юҡ уларға,
Улар ҡалды ҡыҫып тештәрен.
. . . . . . . . . . .

Тағы ярһыбыраҡ
Һәм нығыраҡ
Эшләй улар уның эштәрен...

## ЕГЕРМЕ АЛТЫ ХАҠЫНДА БАЛЛАДА

*Шәп художник Г. Якуловҡа —*
*ихтирам менән*

Йырла йыр һин, шағир,
Йырла йыр.
Зәңгәр күк тә бағыр,
Йылмайыр.
Диңгеҙ ҙә бит, күкрәп,
Йыр йырлай.
Шул йырҙарҙы, тетрәп,
Ер тыңлай.
Егерме лә алты
Алтын ир,

Егерме лә алты
Аҫыл ир,
Егерме лә алты
Комиссар! —
Гүрҙә ҡалыр ятып,
Ҡом — осар...
Ике йөҙ ҙә ете
Саҡрым
Ергә дошман илтеп
Атырын
Кем белгән дә кем һуң
Онотор?
Онотоусы булһа,
Ер йотор...
Күрәһеңме, унда
Томанмы?
Ҡалҡып сыҡҡан ҡомдан —
Шаумянмы?
Ана тағы, йырып ҡомдоң
Төйәген,
Күтәрелгән илле ҡулдың
Һөйәге...
Егерме лә алты
Ир ине,
Ниәттәре алтын,
Бер ине.
Ҡайһы бере күкрәгенән
Атылған,
Ҡабырғаһы йәҙрә менән
Ватылған.
Ватылһа ла күкрәк,
Ҡабырға:
«Кәрәк. — тиҙәр, — тиҙерәк
Ҡайтырға.
Ни мәғәнә, — тиҙәр, —
Ятыуҙан!

Ә унда һуң ниҙәр —
Бакуҙа?
Ерҙе япҡан саҡта
Аҡһыл был томан,
Ни бар тыуған яҡта,
Әйт, Әзербайжан?!»

. . . . . . . .
. . . . . . . .

Тәгәрәй, күк ярып,
Ай-ҡауын.
Диңгеҙ белә ярын
Сайҡауын.
Бына шундай төндә
Томан боларҙы.
Инглиздәр отряды
Атты уларҙы.

Коммунизм бит ул —
Ирек байрағы.
Ҡупҡандай ел-дауыл,
Халыҡ ҡайнаны.
Килә, тип, шул байраҡ
Беҙҙең тарафҡа,
Бар сүкеш, бар ураҡ
Баҫты бер сафҡа.
Унда Рәсәйҙе
Ильич күкрәтһә,
Баяр-байҙар уны
Күреп тетрәһә,
Ә бында, Шәреҡтә,
Бит уң ҡанаты
Булды шул шәриктәр —
Егерме алты.

Хәтерләй һәр кеше
Ауыр ул йылды.

Ул хәнйәр ҙәе ише
Тәрән уйылды.
Бар илдең яу-йото
Тап шул замацды
Уттарға ырғытты
Әзербайжанды.

Коммунабыҙға был,
Аһ, ауыр ине.
Ҡоторғас ел-дауыл,
Ауҙы тау иле.
Шул мәлде атылды
Егерме алты.
Һәм был хәбәр булды
Ҡатынан ҡаты...
Ирегән балауыҙ
Шикелле ҡомда
Инглиз — ялмауыҙ
Ҡала артында,
Ҡылыс һурып ҡындан,
Төҫкап мылтыҡтан —
Уларҙың барын да
Йыҡты аяҡтан...

Егерме лә алты
Алтын ир,
Егерме лә алты
Аҫыл ир,
Егерме лә алты
Комиссар! —
Гүрҙә ҡалыр ятып,
Ҡом — осар.
Ике йөҙ ҙә ете
Саҡрым

Ергә дошман илтеп
Атырын
Кем белгән дә кем һуң
Онотор?
Онотоусы булһа —
Ер йотор...

Күрәһеңме, унда
Томанмы?
Ҡалҡып сыҡҡан ҡомдан —
Шаумянмы?
Ана тағы, йырып ҡомдоң
Төйәген,
Күтәрелгән илле ҡулдың
Һөйәге...
Егерме лә алты
Ир ине,
Ниәттәре алтын,
Бер ине...

. . . . . . .

Гүйә, бөгөн дә төн
Кәфен төҫөндә.
Егерме алты өн
Баку өҫтөндә...
Егерме алты һын —
Илдең күҙ нуры.
Шул хаҡта булһын
Был ҡайғы йыры.

Юҡ та, ел түгел был,
Юҡ, түгел томан.
Ишетсе, ни ти ул —
Дуҫына Шаумян:
«Джапаридзе, тим,
Ҡарасы шунда —

Икмәкме был, ни
Эшсе ҡулында?
Нефть ҡап-ҡара,
Ҡанылай ерҙең.
Ҡарасы, ҡара:
Паровоз бара...
Караптар күрҙем!
Барлыҡ караптар,
Барлыҡ поездар
Йондоҙ таҡҡандар —
Беҙҙең йондоҙҙар!»...

Джапаридзе уға:
«Эйе, — ти, — әгәр
Һүҙҙәрең хаҡ булһа,
Бик шәп был хәбәр.
Тимәк, кәрәге юҡ
Беҙҙең уфтауҙың.
Эшсе синыфы ныҡ
Тота Ҡафтауҙы».

Тәгәрәй, күк ярып,
Ай-ҡауын.
Диңгеҙ белә ярып
Сайҡауын.
Нәҡ шундай уҡ төндә
Томан боларҙы.
Инглиздәр отряды
Атты уларҙы.

Коммунизм бит ул —
Ирек байрағы,
Ҡупҡандай ел-дауыл,
Халыҡ ҡайнаны.
Килә, тип, шул байраҡ
Беҙҙең тарафҡа,

Бар сүкеш, бар ураҡ
Баҫты бер сафҡа.
Унда Россияны
Ильич күкрәтһә,
Баяр-байҙар уны
Күреп тетрәһә,
Ә бында, Шәреҡтә,
Бит уң ҡанаты
Булды шул шәриктәр —
Егерме алты...
. . . . . . . .

Күгәрә бара
Һаман күк йөҙө.
Улар үҙ-ара
Бөтөрә һүҙен.
Ҡайһыһы ҡайҙан
Улар атылған.
Ағас-Ҡоймаға
Сыға ҡайтырға...

Йырла йыр һин, шағир,
Йырла йыр.
Зәңгәр күк тә бағыр,
Йылмайыр...
Диңгеҙ ҙә йырлап,
Ҡанатын ҡаҡты.
Йәшәй йән нурлап,
Егерме алты,
Егерме алты!..

*
* *

Уңалдылар иҫке яраларым,
Мәхшәр төштәр тормай һағалап.
Таһарандың сәйе — дауаларым,
Сәйханала сығам дауалап.

Ярарға тип, ахыры, ҡунағына,
Сәйханасым — гүйә, бәйгелә! —
Ҡаты хәмер, шарап урынына
Һыйлай мине ҡыҙыл сәй менән.

Һыйла, әйҙә, хужам, тик сама бел,
Шау ҡыҙыл гөл икән баҡсаңда.
Күҙен тиккә ҡыҫмағандыр бер гөл,
Ҡара пәрәнжәһен асҡанда.
Рәсәйҙә беҙҙең яҙ гөлдәрен
Тотмайҙар бит улай һис бәйҙә.
Белмәйҙәр ҙә хәнйәр хәйләләрен,
Үпкәнгә лә янсыҡ сисмәйҙәр.
Ә был шәфәҡ йөҙлө нескә билем
Яҡынайтһа ара алыҫын,
Мин Хорассан шәлен ябыр инем,
Түшәр инем Шираз балаҫын.
Сәйҙе, хужам, һин ҡатыраҡ яһа,
Мин алдамам һине ғүмерҙә.
Мин үҙемә үҙем бирәм баһа,
Һин ни уйлаһаң да эңерҙә.
Ишеккә лә тишеп ҡарамай тор,
Ҡапҡасы бар барыбер ҡапҡаңдың...
Тиккә генә күҙе балҡымайҙыр
Ҡара пәрәнжәһен асҡандың.

* * *

Һораным мин бөгөн асламсынан —
Йәнәһе лә аҡса ваҡлатам! —
Ҡалай әйтергә, тип, Лал һылыуға
Саф фарсыса бер һүҙ: «Яратам»?

Һораным мин бөгөн асламсынан,
Елдән еңел, күлдән тынырак:
Ҡалай әйтергә, тип, Лал һылыуға
Наҙлы «үбеү» һүҙен һуңырак.

Һораным мин тағы асламсынан,
Ҡулға алып сак-сак үҙемде:
Ҡалай әйтергә, тип, Лал һылыуға
«Һин — минеке» тигән һүҙемде.

Тик асламсым еҙә киҫте былай:
«Әйтелмәй, тип, һөйөү һүҙ менән —
Ғашиҡтар тик йәшерен ямаһһыулай,
Аңлашалар бары күҙ менән.

Үбешеүгә исем-ат бирмәйҙәр —
Яҙыуымы ул ҡәбер ташында?
Үбешеү тик ирей ирендәрҙә,
Ҡыҙыл гөлдөң наҙлы тажындай.

Мөхәббәтте ант та нығытмайҙыр,
Ул сыныға шатлыҡ-ҡайғынан.
«Һин — минеке» тиеп әйтә алыр
Пәрәнжәне асҡан ҡул ғына».

*
* *

Шаһәнәм һин минең, Шаһәнәм,
Төнъяктанмы әллә булғанға,
Мин әҙермен һиңә йырларға
Ай аҫтында арыш бешкәнен,
Шаһәнәм һин минең, Шаһәнәм.

Төнъяктанмы әллә булғанға, —
Шираз нисек матур булмаһын,
Ай ҙа нисек серле тыумаһын,
Етмәй беҙҙең иркен ҡырҙарға, —
Төнъяктанмы әллә булғанға.

Мин әҙермен һиңә йырларға:
Был сәсте мин алдым арыштан,
Теләһәң, ал һис тә ҡарышмам,
Бармағыңа мөмкин урарға, —
Мин әҙермен һиңә йырларға.

Ай аҫтында арыш бешкәнен
Бөҙрә сәстәремдән минең бел,
Ҡәҙерлем, һин шаяр, йылмай, көл,
Тик иҫләтмә, иҫкә төшмәһен
Ай аҫтында арыш бешкәне.

Шаһәнәм һин минең, Шаһәнәм,
Төнъяҡта бер һылыу ҡыҙ ҡалған,
Иҫ киткес ул һиңә оҡшаған,
Көнләшәлер, бәлки, ул һинән...
Шаһәнәм һин минең, Шаһәнәм!

*
* *

Һин әйтәһең, Сәгәҙи, тип,
Үпкән, имеш, гел түштән.
Сабыр итсе, мин дә бер көн
Ситтә ҡалмам был эштән!..

«Гөлдәр Ефрат аръягында
Ҡыҙҙарҙан сибәр», — тинең.
Һинең һымаҡ йырлай алһам,
Башҡа көй көйләр инем:

Өҙөр инем ул гөлдәрҙе,
Булмаһа йыуанысым —
Шаһәнәмдән башҡа юҡ бит
Донъяла ҡыуанысым.

Ғазаплама вәғәҙә тип,
Вәғәҙәме килешә?
Шағир булып тыуғас ергә,
Шағирҙарса үбешәм...

*
* *

Булғаным юҡ Босфор ерҙәрендә,
Һин һорашма ул ер хаҡында.
Тик диңгеҙҙе күрҙем күҙҙәреңдә,
Тоҡанғанда зәңгәр ялҡындан.

Карауандар яллап Багдатҡа ла
Ебәк-ҡына тейәп китмәйем.
Һомғол һының мине утҡа һала,
Тубығыңда серем итәйем.

Әллә тағы — күпме үтенһәм дә —
Күҙ төбөңдә шикле йыйырсыҡ?
Эйе, бынан алыҫ үҙ илемдә
Мин танылған мәшһүр бер йырсы.

Күңелемдә — тальян сыңы айҙың,
Ҡолағымда — эттәр һаулауы.
Күк илемде, ахыры, фарсы ҡыҙы,
Һиңә генә ҡыйын аңлауы?

Эс бошҡандан түгел, мин бит бында
Тойоп килдем һинең тауышты.
Ҡулдарыңа — аҡҡош ҡанатындай —
Тапшырҙым мин инде яҙмышты.

Үткәндәргә үпкәм булмаһа ла,
Тынғы эҙләп килдем мин бында.
Йә, һөйләсе миңә ни булһа ла
Шат ҡояшлы илең хаҡында.

Саф һулышың менән һин сихырлап
Баҫып торсо тальян һағышын.
Алыҫтағы төньяҡ ҡыҙын уйлап,
Йышаймаһын йөрәк ҡағышым.

Булмаһам да Босфорҙа мин ҡунаҡ,
Һүҙ табырмын уның хаҡында.
Күҙҙәрең бит барыбер диңгеҙ һымаҡ
Тоҡанғанда зәңгәр ялҡындан.

*
* *

Зәғфрандай илдең зәңгәр кисе,
Тыныс ҡына гөлдәр иҙерәй.

Һәсе, йәнем, бер йыр йырлап бирсе,
Хәйәм үҙе алһын иҫерә.
Тынын ҡына гөлдәр иҙерәй.

Ай нурына Шираз ҡойонғанда,
Күбәләктәй — йондоҙ күстәре.
Бында миңә бик ят тойолғандай,
Пәрәнжәле ҡыҙҙың кистәре,
Ай нурына Шираз ҡойонғанда.

Әллә ҡыҙҙар нурҙан өйөгәнме,
Бөркәп шулай баҡыр йөҙҙәрен?
Йә һөйөүҙе ныгыраҡ тойорғамы,
Айҙан-көндән һаҡлай үҙҙәрен?
Аһ, күрәһе ине күҙҙәрен!..

Ҡәҙерлем, һин ташла пәрәнжәңде,
Ҡолаҡҡа таҡ, һүҙем — ай-алҡа.
Бел үҙеңдең күркең-дәрәжәңде,
Былай ҙа бит ғүмер бик ҡыҫҡа,
Ҡолаҡҡа таҡ, һүҙем — ай-алҡа!

Яҙмышына зарлы әҙәмде лә
Мәхрүм итмәй, тиҙәр, мөхәббәт.
Шуның өсөн айҙай йөҙөңдө лә
Бөркәнсеккә йәшереү енәйәт,
Биргәс икәс әсәң-тәбиғәт!

Тынис ҡына гөлдәр иҙрәгәндә,
Башҡа бер ил килә хыялға,
Мин йырлайым үҙем, ҡой килгәндә,
Ул ғүмерҙә килмәҫ Хәйәмгә,
Тынис ҡына гөлдәр иҙрәгәндә...

*
* *

Шундай саф һәм зәңгәр һауа!
Ҡыуаҡтарға сығып ауам.
Туҡта, юлсы, туҡтап торсо,
Китмә, таңға юлың борсо —
Шундай саф һәм зәңгәр һауа!

Туғай тиһәм, баҡса буғай,
Ҡотороноп гөлөп болғай.
Мәжбүр булам эйеләргә,
Һәр сәскәнән һөйөләргә —
Туғай тиһәм, баҡса буғай.

Бышылдауы, шыштырлауы —
Нәҡ Сәғҙиҙең йыр йырлауы!
Айҙың сыңлап бер ҡарауы,
Нурға сорнап, сихырлауы —
Нәҡ Сәғҙиҙең йыр йырлауы!

Сеү, ниндәй моң? Ни юрайым?
Хәсәндең был наҙ һорнайы!
Ҡыҫып ал да ҡосағыңа,
Ул, рәхмәт, тип был сағыңа!..
Тик Хәсәндең бар һорнайы.

Бына ҡайҙа сарсап көткән,
Көтөп көтөк булып бөткән,
Хуш еҫенән ел иҫергән
Йәш бер ҡыҙҙың иренәнән
Һурып үбер мәлең еткән!

## БОЛЕРО

Атом бомбаһы төйәгән самолетты Хиросима утрауына илткәндә, радиомаяҡтар мәшһүр Равелдең ошо «Болеро» көйөн биреп, юл күрһәтәләр.

Өшәнгес еүеш ел һемереп,
Йәйелгәс күк апрель эңере,
Ағылды «Болеро» моңдары,
Өҙгөләп йөрәктең ҡылдарын.

Әйтерһең, сихырлап сорнаны
Күңелде уй-хистәр бураны.
Ел-дауыл, үс итеп һағышҡа,
Ташланды дәһшәтле алышҡа...

Ҡылыстар ҡылысҡа ҡайрала,
Ҡалалар, донъялар ҡыйрала.
Әллә был ҡиәмәт көнөндә
Сур-сорнай саҡыра өңөндә?

Саҡыра, саҡыра ул сорнай,
Иблестең үҙен дә сихырлай.
Әллә был илаһи сорнайсы
Донъяға һәләкәт юрайсы?..

Аһ, мәхшәр уйындың ахыры
Ярыла утрауға аһ ороп.
Зәһәрле көкорттөң ыуынан
Ҡалалар, донъялар быуыла!..

## ТОРМОШҠА АЯҠ БАҪЫУСЫҒА

Тормош һиңә бөгөн ишек асҡан,
Донъяға һин тәҙрә уяһың.
Һинең ҡулда — ҡан-һөйәктән ҡалҡҡан
Гүзәллектең гүзәл донъяһы!

Күҙҙәреңдә яңа яуаплылыҡ —
Эш-һүҙеңдең изге тамғаһы.
Бик-бик иҫке унда күп яңылыҡ.
Ә иҫкенең — сикһеҙ яңыһы.

Сикһеҙ алыҫ унда яҡыны ла,
Ә мәңгелек унда йоҙаҡлы.
Емерергә етә осҡоноң да,
Тик төҙөүе байтаҡ аҙаплы...

Ҡыйыуыраҡ баҫ һин хужа булып
Ул яуабын алыр ҡаты, ныҡ.
Үҙ фажиғәң менән йылыт уны,
Өҫтә йәнә һөйөү, яҡтылыҡ!..

## КИСКЕ ЭҢЕР ТӨШКӘС

*Ю. Быковҡа*

Әллә ҡайҙан осоп, әллә ҡайҙа,
Ҡаплап алып ярты офоҡто,
Шаулашты ла ҡарға тубы яуҙай,
Ҡош юлына барып олаҡты.

Тынып ҡалды күктә тауыштары,
Бүлгеләмәй донъя берлеген.
Тик сайҡала йондоҙ башаҡтары,
Моңһоу ғына һирпеп керпеген.

## ЯРТЫ ТӨНДӘ УЯНҺАҢ...

Инде күрҙең яҡшы-яман барын,
Мөхәббәт гә өттө бер саҡты.
Тик берәй мәл һиҙә был Ер шары
Хәтерләтте микән борсаҡты?

Ишетер инең өнһөҙ ҡысҡырыуын,
Күрһәң әгәр уны шул саҡлы,
Күпме кисһәң был мәңгелек һыуын,
Шул тиклем һин оло, яуаплы!..

## АЛЕКСАНДР ТРИФОНОВИЧ ТВАРДОВСКИЙ ИҪТӘЛЕГЕНӘ

Ул ғәскәрҙең күҙ-ҡолағы булды,
Алғасҡыла барҙы яу менән.
Юҡ, һайламаҫ батыр таҡыр юлды,
Ауһа ауыр яуҙа дау менән.

Шиғриәте уға инселәне
Зирәктәрҙән зирәк ҡараштьı.
Иркен теле беҙгә сер һөйләне,
Төп асылын асып тормоштоң.

Илдең гәмен иңдәренә артып,
Тогро ҡалды йырҙа иркенә.
Замандарҙың аһын йәнгә тартып,
Ише итте ирлек күркенә.

Сабый ҡарашының зәңгәрлеген,
Ботә тәрәнлеген күҙенең
Ул яндырып китте беҙгә боғон,
Ир намыҫы итеп үҙенең!..

* * *

Хәрәкәткә кәрәк хәҡиҡәт,
Тик үлсәһәң һәр бер миҡдарын,
Хәҡиҡәт тә түгел бик ҡиммәт,
Ҡиммәт уға барыр юлдарың.

Эҙләр булһаң — ҡара алысҡа,
Төҙөр булһаң — ятма ояла.
Донъя сикһеҙ бөтә тарафҡа,
Бөтәһе лә мөмкин донъяла!

Ҡәһәрләп тә уны, һөйөп тә,
Ҡосаҡҡа ал ташҡын ағымын.
Тик күҙәтмә уны бейектән,
Тыуыр көнгә илтһен аҙымың.

Айырмайса хаҡтан ялғанды,
Хаҡлыҡ күрмәҫ һинең йөҙөңдө.
Ышандыр һин бөтә йыһанды
Тиккә килмәүеңә үҙеңдең!

## УТЛЫ КИСЕҮ

Шиғырҙарым — яугир күҙ нурҙарым,
Еңеүҙәрем, һыуҙар эсеүем,
Яуған саҡта ҡурғаш ямғырҙары,
Иңрәп ятҡан һыуҙар кисеүем!..

Ни көтә һуң һеҙҙе алыҫ ярҙа?
Көйгән мейеләргә билдәһеҙ.
Мүк-һаҙҙарҙан, ҡамыш-батҡылдарҙан
Алда сығыр икән ниндәй һүҙ?

Тик терсһең, һин терсһең, йырым,
Сапҡын илткән һуңгы әмерҙәй,
Хаҡлығыңды раҫлар өсөн бары
Мин ҡорбанға әҙер хәҙерҙән...

Бар утты һин күкрәгеңә алдың,
Таң яҡтыһын ялғап төндәргә,
Ғазап менән азат юлдар һалдың
Үлем аша килгән көндәргә.

## ИКӘҮҘӘН-ИКӘҮ

Уҡып ҡына түгел,
Татып беләм
Яҙмышыма яҙған тетрәүҙән:
Ҡайһы саҡта
Иң шым бышылдау ҙа
Ҡеүәтлерәк күктәр күкрәүҙән.

Семәрләнеп күпме сер бөркөлә
Өнһөҙ баҡҡан упҡын күҙҙәрҙән.
Өндәшмә лә!
Был мәл өндәшмәүең
Аңлайышлы бөтә һүҙҙәрҙән!

## БАЙРАМ

Миңә тиһәң, ваҡыт ағышынан
Башҡа йәшәй йәйге ул сәғәт.
Ул ер еҫе, ул күк балҡышынан
Төңөлөргә һис тә юҡ сәбәп.

Зәңгәр күлдә күктәр ҡабынғандай,
Күҙҙәремдә күҙең сағылды.

Онотолоп, һүҙһеҙ табынғандай,
Тик ышаныс ҡына ағылды.

Быны белә ел дә һарығошҡай
Һәм былтырғы шыршы ылыҫы;
Белә тағы сәскә атып та
Ул илаһи наҙың-ырыҫың...

Бер сылбырға икенсеһен ялғап,
Ике йөҙөк бергә уҡмашты.
Матурлыҡҡа тик һоҡланыу һаҡлап,
Байрамыбыҙ күккә олғашты...

Ҡайҙа ғына осоп юғалһаң да,
Ҡайҙа ғына юлың илтмәһен,
Һарығошҡай һайрай, бел, һаман да
Йәйен-ҡышын ул кон иртәһен...

*
* *

Зәңгәр йыр булып айҡармын
Беҙ ҡауышҡан юл сатын.
Йондоҙ булып та байҡармын
Йәш ҡайындың йәшел ҡанатын.

Унда талдар араһынан
Ағып ятҡас йырсы шишмәһе,
Былтырғы йәй араһынан
Арынмайса быйыл нишләһен?

Һуңлап атҡан зәңгәр сәскә
Зәңгәр күктең тогро һеңлеһе —
Бөтә сәхрәгә илтеп сәнскән
Үҙ күркенең еңеү билгеһен!..

Эй, һин, тормош — тынмаҫ тауыш!
Мәңге ҡарт та, мәңге йәш тә һин,
Йәш йөрәккә — яңы асыш,
Ә ҡартына тәмле төш тә һин.

Һәр тере йән туғаныраҡ,
Үткәндәргә оҡшаш хәҙерге.
Ә шатлыҡ һуң? —
Ҡыйыныраҡ
булған,
Күркәм,
Ҡәҙерле.

## СӘЙЕР БЕР ХӘЛ ХАҠЫНДА ШИҒРИ ХАТ

Бер ниҙе лә һеҙҙән йәшермәйсә,
Бар серемде һалам аҡтарып:
Бер кемгә лә күңел төшормәйсә,
Үҙ иттем тик бер тау аһтарын.

Был урманда беҙ бик яҡынайҙыҡ,
Һәр кис һайын миңә килә ул.
Йондоҙ тетеп, бер көнйәлә-айҙың
Төнө буйы нурын иләй ул.

Шул нурҙарҙан йылы күлмәк бәйләп,
Кейендерә мине, иркәләп.
Төнәтә лә, әкиәтен һөйләп,
Ҡайтып китә бик-бик иртәләп.

Яурынына ябып таң яҡтыһын,
Алыҫтарга китеп югала.
Уның гәмен тағы кем татыһын —
Йәйҙән коҙгә үҙе юл һала.

Алҡа һымаҡ сыңлап, тик шишмәһе
Ҡолағынан наҙлай, талсыҡмай.
Көнө буйы уның үҙ эш-гәме,
Ҡайғыһы юҡ миндә, ай сыҡмай.

Ә шулай ҙа, көн байығас, тағы
Килеп етә үҙе эргәмә.
Күм-күк күҙе менән миңә бағып,
Төн пәрҙәһен тарта тәҙрәмә.

Һис үпкәм юҡ, көндәр боҙолһа ла,
Шәмдәр янмаһа ла бүлмәмдә, —
Тик ул килһен миңә, тау булһа ла,
Тик ул ҡалһын төнгә эргәмдә.

Төн һарҡылыр тағы, серле моңдай,
Шишмә ише сеңләп-сөбөрләп...
Бына ниҙәр булып ята бында —
Һеҙҙән алыҫ стө ят ерҙә...

## ЭЛЕГИЯ

Һағыш баҫҡан буш яланда
Һыҡрай ҡурай моңдары —
Таңдан алып сыңрай унда
Сыңрау торна сыңдары.

Шул мәңгелек һағыштарға
Һарылғандай һағышым.
Сақырғандай алыҫтарға
Алыҫтарҙың алыҫы...

Күк комбәҙгә тейһә ҡулым,
Селпәрәмә килер бит,

Һуңғы моңом, шаңдау булып,
Һары урманда ирер бит.

Ята унда күк ҡурпыла
Күктең өткөс һалҡыны —
Уйға талған уçаҡты ла
Ялмап алған ялҡыны.

Осор ҡоштар әллә бөгөн
Ҡанатҡайҙарын ҡағып,
Киттеме күк күкһеллеген
Керпек аçтыңа яғып?

Түк төç төшкән күҙеңә лә, —
Ҡамыш ҡаймаһы түгел.
Көйөнә лә, һөйөнә лә, —
Һағыш даръяһы күңел...

## АРТЫҢДАН ҠЫСҠЫРЫУ

Алып китә һине минән
карабың,
Мин, балыҡтай, ярҙа дулап
ҡаламын.
Һуңғы карап китеү менән
бит бергә
Һыу ҙа ярын ташлап китә
ғүмергә.
Шығырлатып айгөлағын
ҡомдарҙың,
Һығып алған һары һағыш
ҡомары.
Һөйәккәсә ҡояш өткән
тәнемде,

Һурып алган тәнемдәге
йәнемде.
Бер ҡасан да инде ташмаҫ
был һыуҙар,
Беҙҙе тағы ҡауыштырмаҫ
ярһыуҙар.
Ҡулдарыңа был ҡулдарым
тейгәнсе,
Ерҙә тормош яңы түлен
йәйгәнсе,
Әйләнгәнсе ҡулға — йөҙгөс
ҡанаттар,
Үтер тағы ерҙә мең-мең
быуаттар...
Алып китә, алыҫ китә
карабың,
Ярҙа ҡулап, эсәм һуңғы
шарабың...

## ҮҘ-ҮҘЕМӘ АҢЛАТЫУ

Мин ышандым быйыл ғына,
Көндән бер көндө
Ниндәй йөк булғанлығына
Һиңә иркемдең.

Тик ерҙәге шатлығыңды, —
Бәхет ҡошоңдо, —
Аяп, күпме утта яндым,
Күпме бошондом.

Тик бер сәйер мәле хистең
Беҙҙе ҡабаттан
Тағы алыҫ алып китте
Һуҡыр һуҡмаҡтан...

## ӘСТРХАН АЛДЫНДА

Көн һүрелә көн байыуға.
Мәңгелектең юлындай,
Мөһәбәт, киң, оло йылға
Йәйрәп ята алдымда.

Болоттар ҙа ҡуйыра бара,
Ныгыраҡ аңҡый ләм еҫе.
Тулҡындар ҙа туймай ҡарап
Һуңғы туғайҙар төҫөн.

Артта ҡалды барыһы ла:
Ярһыуы ла, яуы ла,
Баҙары ла, моң-зары ла,
Ҡыҫып торған тауы ла...

Инде еңел хаҡ яҙмышы:
Бер боролһа — диңгеҙе.
Ҙур шауына илтеп ҡушыр
Үҙ яҙмышын киң Иҙел.

Варягтарҙан гректарғаса
Ниндәй алыҫ юл сапты!..
Тик, күңелем, онотмасы
Ир-Иҙел үлгән саҡты...

## МАРТИН ЛЮТЕР КИНГ ҮЛЕМЕНӘ

Хаиндарҙың хыянатсыл ҡулы
Яҙа атмай,
Атһа мөйөштән.
Баш осоңда,
Ҡайғырғандай булып,
Тора ҡатил — гүйә, фәрештә!..

## ЮҠ ЕРҘӘ ИСЕМҺЕҘ ҺАЛДАТТАР

Гөрҫләтеп туптарҙан аталар,
Күктәрҙе күкрәтә ул туптар.
Ә гүрҙә һалдаттар яталар,
Юҡ ерҙә исемһеҙ һалдаттар.

Тамсы ҡан ҡалғансы һуғышып,
Һалдаттар окопта туңдылар.
Йәлләмәй иң һуңғы һулышын,
Ил ғәзиз тип һәләк булдылар.

Тыуған ер йылыта үҙҙәрен,
Унда иң ҡыйыуҙар йоҡлайҙар,
Еңер көн йомдорған күҙҙәрен,
Еңеүҙе уяуҙар һаҡлайҙар.

Кис шәфәҡ балҡығас һуңғы ҡат,
Казарма тын ҡала тиҙ генә.
Был киске барлауҙа ҡарт һалдат
Таный һәр һалдатты йөҙөнән.

Һәр кемдең исемен үҙенә
Тыумыштан мәңгегә биргәндәр.
Күренмәй тереләр күҙенә,
Бер сафҡа теҙелә үлгәндәр.

Бер генә бирелә һүҙ-антың,
Һөйөклө илкәй ҙә бер генә.
Шуға ла йөрәге һалдаттың
Иң ҡыйыу, иң тоғро еренә.

Ҡош теле саҡлы хат яҙғанда,
Йәлләмә, һөйөклөм, хисеңде.
Онотма, тыуған яҡ, һин унда,
Атап әйт минең дә исемде!..

*
* *

Күк томанда ҡояш энәләре
Төндә көнгә бәйләй нағышлап.
Уянсы, ас керпеккенәләрең,
Зәңгәр көндә миңә бағышлап.

Аймылышмаç инде таңдарыбыҙ,
Бит яңынан тыуҙыҡ бөгөн беҙ.
Байрам бөгөн, беҙҙең байрамыбыҙ,
Календарҙа — зәңгәр көнөбөҙ.

Ҡағылмаç ул дәфтәр-маҙарға ла,
Бутамаç ул төшкә өндәрҙе.
Йырларға ла була, иларға ла
Ҡайтҡанына иң аҡ көндәрҙең.

Бүләктәрҙең бүләге ул беҙгә,
Онотайыҡ донъя болаһын.
Беҙ тағы ла бергә, бергә, бергә, —
Тоғролоҡтоң игеҙ балаһы.

## ТАУҒА ҮРЛӘҮСЕГӘ

Ҡымшанмай ҙа мәғрүр тора тауҙар,
Кирс ҡағып заман яуҙарын.
Бер-береһен күккә сөйгән улар,
Иңдәренә болот ауҙарып.
Боҙҙарҙы ла иңдәренә һалған
Тере һыуҙың йәнен ерләүсе,
Тик был тынлыҡ мәңге түгел — ялған!
Иҫеңдә тот, тауға үрләүсем!
Ҡуҙғат тауҙың тик бер ташын ғына,
Шына ҡағып ҡая йөҙөнә,
Күк күкерәр боҙҙар ташҡынынан
Дәжжәл ҡалҡып сығыр эҙенән.
Ул ҡоторған һыбай, башын баҫып,
Осоп үтер упҡын-аранан.
Юлындағы һәр терене яҫҡып,
Йорт-ҡуранан яһар хараба.
Һис эҙе лә ҡалмай, юҡҡа сығыр
Быуаттарҙың аҫыл емеше.
Тауға ынтылһаң һин, булсы сабыр,
Артҡа ла баҡ ҡайсаҡ һин, кешем.

## БАҒЫШЛАУ

Һин — әлегә күреп белмәгән ер,
Әле асылмаған бер йылға.
Ошо билдәһеҙлек, сисмәгән сер —
Бар байлығың һинең быйылға.

Һин — әлегә башы йыр шишмәмдең,
Мәңгелектең хыял ҡанаты.
Һин — бөгөнгә иртәгәһе көндөң
Килеп етмәй ҡалған бер хаты...

## ҠЫҢҒЫРАУ СӘСКӘ

Яҙ ҡояшы ҡойған ҡыңғырау сәскә —
Биш саталы күм-күк ялҡыным,
Ниндәй илаһи көс йыйҙы һиңә
Йәшлек менән
Быуаттарҙың зиһен-аҡылын?

Бәлки, һинең матурлыҡтан башҡа
Һис ни кәрәкмәйҙер күңелгә?
Бит йылмайып күҙ һирпеүҙәр,
Һинең һымаҡ, ерҙә
Өнһөҙ бер йыр булып түгелә!..

## БЫУЫНДАР

Әй, һин — кешем,
Күпме һинең эшең!
Ә тейешен — һанап бөткөһөҙ!
Хәл итмәгән
Аҙмы ҡаршылыҡ бар,
Ҡайһын хатта хәл дә иткеһеҙ.
Үлем,
Сир бар
Һәм хаталар
Бөтмәй! —
Башын кеше ташҡа орһа ла,

Аҡыл ағасын был фажиғәләр
Шығырлатып,
Һығып торалар.
Тик быуындар
Өмөт өҙмәй:
Улар,
Сәғәт һайын эшләп эштәрен,
Мең йәшәр бер
Имән-ир шикелле,
Сәсә ергә емеш-төштәрен...

## БАР ИНЕ БЕР МАЛАЙ...

«Бында 1942 йылда яу ҡырында ятып ҡалған һалдаттар һәм 1960 йылда һәләк булған сапер Иванов ерләнгән».

*(Ҡәбер ташындағы яҙыуҙан).*

Бар ине бер малай. Китаптарҙан
Уҡып ҡына белде һуғышын,
Сөнки ҡырығынсы йылда ғына
Алғайны ул тәүге һулышын.

Үҫте. Буйға етте. Һалдат булды.
Сапер һөнәренә өйрәнде.
Үҙе менән йәштәш минаға ул
Килеп бaҫты шулай бер мәлде...

Һәм юҡ ул малай... Тик терәләр
Алһын өсөн уны хәтергә,
Ҡыҙыл йондоҙ ҡуйып, ерләнеләр
Атайҙары ятҡан ҡәбергә.

## Геннадий Молодцов

(1926—1983)

### САЛАУАТ ХАҠЫНДА ЙЫР

Юҡ, был түгел шәфәҡ байыуҙары,
Ҡылған ҡағып иҫмәй елкәйе,
Был — тауышын, ҡанын Салауаттың
Хәтерләне башҡорт еркәйе.

Кисә түгелме һуң Ерәнсәйе,
Сабып килеп Табын ягына,
Таң атҡансы ситән эргәһендә
Сапсынманы бәйҙә тагы ла?

Сеү, ниндәй ҡыҙ ойҙә быш-быш килә,
Күкрәп көлһә батыр ғынаһы?
Әй, тыуган ер! Һаман төшөңә керә
Урыҫ ҡыҙының бер гонаһы...

...Бына әле — еңһеҙ күлмәк кейеп,
Һары кәшмир яулыҡ ябынып,
Улын күтәргән дә юлга сыҡҡан,
Батырҡайын үҙенең һагынып.

Нәҡ атаһы малай — бөтә бәлә шунда —
Күршеләргә күҙ ҙә асҡыһыҙ!..
Ниңә инде гәскәр менән бергә
Китмәй ҡалдың икән, һантый ҡыҙ?

Саң борҡотмай инде коҙғо юлдар,
Воскресенды болот ҡаплаған.
Йондоҙ төҫлө алтын йәшен ҡоя
Тәҙрә төбөндәге ҡарт саған.

Көндө көнгә көлтә кеүек бәйләп,
Алышыныр моңһоу аҙналар.
Буран үкһер тиҙҙән яландарҙа,
Ағиҙелде күм-күк боҙ ҡаплар.

Ҡара ҡашы, ыласын ҡошо уның
Ҡайҙарҙа һуң? Юҡ бит һаман да...
Яуға ярһып торған ғорур яугир
Ғәйеп булды таңғы томанда.

Кем һуң әйтһен уға батырының
Мең-мең юлдар үтеп, атлығып,
Килтеререн туңған тупһаһына
Ҡауышыуҙың ҡайнар шатлығын?

Ҡайҙан белһен — кистәрҙән бер кисте
Бәхет йәштәренә төйөләп,
Күкрәгендә уның бер иларын
Һәм бағырын уға һөйөнөп?

Ҡайҙан ғына белһен йән дуҫының
Эҙҙәренән дошман килерен,
Ҡара шәүлә булып ой эсенә
Ят кешеләр баҫып инерен?

Ҡото осоп ыласыны өсөн,
Ап-аҡ ҡарҙай йөҙө ағарыр
Һәм, батырға мылтыҡ тоҫҡалғанда,
Үҙ күкрәге менән ҡапланыр.

Йығылыр ул, ләкин, тере кеүек,
Һөйөп ҡарар уға хәҙер ҙә...
...Бик күп йылдар үткән, тик йылдар ҙа
Юя алмаç быны хәтерҙән!

Ҡаһармаплыҡ ятмай ҡәберҙәрҙә,
Батырҙарға гүре юҡ ерҙең.
Мәңгегә йәш үлмәç рухы йәшәй
Юлай улы яугир шағирҙың.

Ал шәфәҡтәр балҡып һүнерҙәр ҙә,
Сал ҡылғандар тыныр гүрендә,
Тик Салауат йыры, үлем белмәй,
Яңғырар гел башҡорт ерендә!..

## СОВЕТ ҺАЛДАТЫНА ҺӘЙКӘЛ

Май айында,
Таңда булды был хәл,
Рейхстаг өсөн алыш ҡыҙғанда.
Беҙҙең һалдат
Сит бер ҡыҙ баланы
Күреп ҡалды һөрөм-туҙанда.

Бағанаға боҫоп, ҡото осоп,
Тора ине сабый ҡалтырап,
Ә һыҙғырған металл ярсыҡтары
Дәһшәт сәсә ине, ҡап һорап.

Хәтерләне һалдат,
Хушлашҡанда,
Үҙ сабыйын нисек ҡосҡанды.
Бәлки,
Тап шул ҡыҙҙың атаһы бит
Уның ҡыҙын атып йыҡҡандыр?!

Тик Берлинда хәҙер, ут эсендә,
Онотоп ул яу-дау яланын,
Шыуып барып,
Ҡурсып алып сыҡты
Аҡ күлдәкле ошо баланы.

Һәм, иркәләп уны сәстәренән,
Баҫтырҙы ул ышыҡ бер ергә.
Ә иртән был хәлде маршал Конев
Кремлгә, тиҙәр, еткергән.

Ил һаҡлаған совет һалдаттары
Ҡырып һалгас вәхшәт яуҙарын,
Күпме балаларға — балалығы,
Ҡыуанысы ҡайтты, яҙҙары!..

Һәм Берлинда, Еңеү байрамында
Һәйкәл ҡалҡты беҙҙең һалдатҡа.
Ул ҡотҡарған ҡыҙын
Ҡулға тотоп,
Ғорур ҡарай тыуыр быуатҡа.

Тора һалдат, ирлек төҫө булып,
Маяҡ һымаҡ балҡып ҡаяла.
Ватанымдың дан һалдаты шулай
Именлекте һаҡлай донъяла.

## ОСОУ ҠОМАРЫ

Һоҡланғыс та миңә,
Сәйер ҙә һин —
Морнап килгән Себер ҡалаһы!
Крандарың менән юл күрһәтеп,
Зәңгәр маяҡ булып янаһың.
Йүгереп менәм
Тимер баҫҡыстарҙан, —
Аҫта тулҡын ташып ағара.
Ҡоштай осоп,
Таштай атылам мин
Упҡынына һинең, Ангара.
Прожекторҙар
Ярһып яҡтыртҡанда,
Кран кабинам ҡыҙа ағарып.
Һәм мин, гүйә,
Йыһан карабында
Үҙем осоп барам, юл ярып.

Аҫта Себер
Ҡаршы елә миңә —
Ығы-зығы утҡа күмелгән.
Тантаналы тайга тынлығы ла
Бер йыр булып тула күңелгә.

Себер әле ырып бөтөлмәгән
Томһалы бер һәйкәл шикелле,

Ҡуйы ылыҫ ҡашын йыйырһа ла,
Ҡарай һымаҡ миңә һөйкөмлө.
Хәтәр ҙә ул,
Һылыу ҡатын һымаҡ, —
Һылыуҙар бит утҡа һалалар!
Күкрәгендә, яҡут алмазылай,
Йымылдаша ана ҡалалар.
Ә туйғыһыҙ монгол күҙҙәре
Күпте вәғәҙә итә, оҙатып...
...Биҙәмәйсә генә әйткәндә ул
Булһын да ти старт һыҙаты.
Тик барыбер,
Себер,
күгең менән
Һин үҙеңә мине ҡараттың.
Бир һин ҡанат,
Мин, Маресьев һымаҡ,
Бейеклекте үлеп яраттым.
Күк тауҙарҙы,
Йылғаларҙы байҡап,
Тын ҡурылһын һиндә осҡанда,
Тояйымсы космик тиҙлегеңде,
Булайымсы һине ҡосҡандай!
Санаң табандары,
шасси булып,
Ел һин, тройка,
Ел дә ел ары!
Күпме бында осор иркенлек бар —
О, Рустың һин осоу ҡомары!..

# V

## Абай
## Тарас Шевченко
## Иван Франко
## Коста Хетагуров
## Ян Райнис
## Ованес Туманян

## Абай

(1845—1904)

*
* *

Ялган дуҫың оҡшаш күләгәгә:
Ҡояш булһа — ҡалмаҫ артыңдан.
Әгәр инде көнөң болот булһа —
Юғалыр ул онһөҙ алдыңдан.

*
* *

Дан-шөһрәт ул шундай бейек ҡая —
Болоттарға йәйгән ҡоласын:
Йылан уға тик шыуышып менә,
Бер талпынып менә ыласын!

## Тарас Шевченко

(1814—1861)

### ВАСЫЯТ

Үлһәм, мине ерләгеҙсе
Һайлаған ҡәберемә —
Уртаһына киң даланың,
Украинам еренә.
    Ятһам ине текә ярҙа
    Ялан киңлеген күреп,
    Аҡһын ине ярһыу Днепр
    Аҫта үкһеп-үкереп.
Алып китһә ул диңгеҙгә
Дошман ҡанын еремдән,
Ырғып торор инем дә мин
Шул мәлде ҡәберемдән,
    Осор инем тәңреһенә,
    Ташлап тау һәм даланы,
    Табынырға... Ә шуғаса
    Мин белмәйем алланы!
Ерләгеҙ ҙә яу сабығыҙ,
Ватығыҙ быгау-бикте,
Дошмандың ҡара ҡанына
Мансығыҙ иреклекте.
    Ә йыйылғас үҙегеҙҙең
    Яңы, азат, ҙур ҡорға,
    Мине лә һеҙ онотмағыҙ
    Иҫләп телгә алырға.

## Иван Франко

(1856—1816)

### ЙЫРСЫҒА

Бул һин, йырсы, изге бойҙай кеүек,
Йырың һинең — алтын бөртөгө!
Тик ул көптә бешеп еткәс кенә,
Ергә төбәй ҡылсыҡ керпеген.

Белә башаҡ, белә оҙон һабаҡ
Бөртөк өсөн ҡырҙа үҫкәнен,
Бөртөк өсөн генә һут бирергә
Бөтә көсө кәрәк икәнен.

Белә башаҡ, белә оҙон һабаҡ:
Был бөртөк тә, балдай, һарғайыр —
Һәм уларҙы ураҡ, бөртөк өсөн,
Урып алыр — ҡалыр ҡара ер.

Ә шулай ҙа тос бөртөктө улар
Сайҡағанда, эйеп елдәргә,
Яңы тормош илтәһен дә белә
Яҡты, күркәм килер көндәргә...

Һин дә шулай, йырсы, үҙ йырыңа
Тоғро башаҡ, һабаҡ булырға
Бир ғүмереңде, бәхет, ҡайғыңды бир,
Ҡыҙғанмай бир барыһын шиғырға!

*
* *

Ни хәжәте май ҡойоуҙың,
Май шәмең янып бөткәс;
Ни мәғәнәһе йоҙаҡлауҙың,
Өйҙә бур булып үткәс?

Ниңә кәрәк күпер һалыу,
Йылғаһында һыу кипкәс;
Нәмәгә һуң ғашиҡ булыу,
Йәшлегең үтеп киткәс?

## Коста Хетагуров

(1859—1906)

### ЕТЕМДӘР ӘСӘҺЕ

Туңа ҡоҙғон был һалҡында...
Олой тауҙар дауылы...
Йоҡлай текә тау ҡуйынында
Ҡараңғы Нар ауылы.

Иң остағы сакля ғына
Һүндермәй һаман утын —
Ут йотоп усаҡ янында
Ултыра бер тол ҡатын.

Ауыр көнгә ҡарағанда,
Еңелерәк оҙон төн.
Тик ул нисек серем итһен,
Өҙгәс аҡтыҡ өмөтөн?

Хатта бүреләр ҡырыла
Был йотлоҡ һалҡынында.
Хәлдән тайған кешегә бит
Үлем — аяҡ аҫтында!..

Боҙҙай һалҡын таш иҙәндә,
Ҡаңғырышып аслыҡтан,
Биш етем бала, тилмереп,
Күҙен алмай усаҡтан.

— Йәгеҙ, илашмағыҙ, — тине
Әсәһе балаларға, —
Бына һеҙҙе туйҙырырмын,
Ятҡырырмын йоҡларға...

Сакляға тотон тултырып,
Артыш сытыры яна.
Ә ҡаҙанға бөрсөк-бөрсөк
Әсәнең йәше тама:

«Биш бала бит, эй атаһы!..
Ни көтә алғы көндө?
Алһаңсы һурып, исмаһам,
Күкрәктән йөрәгемде!..

Ҡара көндө таш ишелеп,
Ғәйеп булдың да үҙең,
Етемдәрҙе аямайса,
Тыныс йомолған күҙең.

Күрәһең, һин ҡатыныңдан
Аҡыллыраҡ, һөйөклөм:
Ҡәбергә бит беҙҙән башҡа
Алдан кереп өлгөрҙөң.

Ябығып кипте, һарғайып,
Яратҡан улың һинең.
Тиҙерәк инде беҙ ҙә бергә
Янында ятһаҡ ине!..»

Ә ҡаҙанға бөрсөк-бөрсөк
Әсәнең йәше тама.
Сакляға тотон тултырып,
Артыш сытыры яна.

Бөтә балаһынан элек
Йоҡлап китте кинйәһе;
Ахыры, илап арыны ул —
Иң изге йән эйәһе!

Сабыр итсе бер аҙ ғына,
Бүтәндәре лә йоҡлар —
Аслыҡ менән яланғаслыҡ
Барыһын аяҡтан йығар...

— Һаман бешмәнеме, әсәй?
Тиҙерәк ашты һоҫһаңсы.
— Хәҙер, хәҙер, бәпкәйҙәрем...
Ашарһығыҙ туйғансы.

Ҡаҙан ҡайнап сыҡты инде,
Ҡайнар һыу көлгә тама...
Көтә-көтә хәлдән тайғас,
Йомолдо күҙҙәр тамам...

Ел дә тыныбыраҡ олой,
Йоҡлай ҡайғы иҙерәп.
Йоҡо күҙ йәштәрен һөртә,
Аслыҡ ҡана тиҙерәк.

Һаламға һалды ла әсә
Хәйләһеҙ сабыйҙарын,
Өҫтәренә япҡан булды
Йылытып салғыйҙарын.

Үҙе аяҡ остарында,
Утҡа ҡарап уйлана.
Йөрәк утын йәш һүндермәй —
Ҡайғы менән ул яна.

Ҕына борсаҡ бешерәм, тип
Балаларын йыуатты.
Ә үҙе ул буш ҡаҙанда
Ҡырсынташтар ҡайнатты.

Саф һәм тыныс йоҡо күмгән
Хәйләһеҙ сабыйҙарҙы.
Әсә изге алдаҡ менән
Туйындырҙы улдарҙы!..

## Ян Райнис

(1865—1929)

### САЯ ҠЫҘЫҠАЙ

«Күҙең төшһә лә бүтәнгә,
Мөхәббәт килмәй ине.
Үҙем беләм нишләтергә —
Барыбер һин минеке!

Уның ҡулы аҡ булһа ла,
Юҡ йөҙөнөң ялҡыны.
Шәлендә сасаҡ булһа ла,
Юҡ сәсенең алтыны.

Эҙләп кенә табырһыңмы
Миндәй һөйә белгәнде?
Онот шул таш ҡурсағыңды,
Белмәй улар һөйгәнде!

Тырнаҡҡа ла тормаҫтарҙан,
Әйтсе, ҡайһы ерем кәм?
Шундай аҡылдарың барҙа,
Эсең бошмаҫмы, иркәм?

Үтеп китһәм бер эргәңдән,
Күҙемдән ялҡын атып,
Ташлап уны йөрәгеңдән,
Килерһең әле ҡайтып!..

## ҺАҠСЫЛЛЫҠ ҠУЛЛАНМАҺЫ

Һәр тинеңде тотоп һаҡлап,
Һәр тинең бит — үҙе мал!
Һыуыҡ өйҙә йөрө йоҡлап,
Ауыҙыңдан өҙөп ал! —
Байлыҡ артмаҫ артыуын,
Ҡәберҙә бар ятыуың!..
Яҙыҡ түгел тинде һаҡлау,
Байлыҡтың бит ҡото — мал,
Тик һин мине дөрөҫ аңла:
Башҡаныҡын йолҡоп ал!
Йыйырһың ул сағында
Гонаһын, байлығын да!..

## ЯРҘАМСЫЛ

Бай булһа ла, бик йомшаҡ ул:
Йылап ҡара, бисара, —
Кеҫәһенә тыға ла ҡул...
Ҡулъяулығын сығара.

## БАЛЫҠСЫЛАР

Киңлегенә тыуған яҡтарҙың
Йыш сығабыҙ, ташлап ауҙарҙы, —
Һәм ауынан сыҡмай уйҙарҙың
Сер, хыялы тыуған яҡтарҙың...
Тик тотабыҙ эстә барлығын,
Тотҡан һымаҡ ауҙа балығын.

## ДАУЫЛ ОРЛОҠТАРЫН ҺИПТЕ

Ҡояш таҡҡан баҡыр төрән,
Еребеҙҙе һөрә тәрән,
Тәрән һөрөлгәс бураҙнаң,
Иҫке күмслер бер аҙҙан!

Дауыл орлоҡтарын һипте,
Болот ямғыр һибеп китте:
Ваҡыт — сәскәнде урырға,
Ваҡыт — яуға яу торорға!

*1905*

## АЛМАС

Йөҙөгөңдөң ниндәй алмас
Ҡашы бар!
Меңә-мең йылдар аша килгән
Ташы бар.
Ер аҫтында һүнгәр күмер
Булһа ла,
Өҫкә сыҡҡас, ҡалай балҡый
Донъяла!
Барыһын ул татығанға —
Ҡатыраҡ,
Яна шулай йөрәгең дә
Яҡтыраҡ!

* * *

Маҡсатһыҙ ине тормош —
Мәғәнәле иттең уны,
Ялангас ине тормош —
Сәскәле иттең уны.

Бик һалҡын ине тормош —
Һин ялҡын булдың уға,
Ҡараңғы ине тормош —
Һин яҡты булдың уға.

Яңынан килеп телгә,
Дан йырлайым донъяға.
Тағы һүнгән күңелгә
Өмөт уттарын яғам.

*
* *

Үҙең нисек, мин дә шулай,
Беҙ икебеҙ бер күңел:
Һиңә ауыр булған саҡта
Миңә лә еңел түгел.

Шуны үҙең белә тороп,
Йәнгә тейәһең ҡайһы саҡ,
Быны менән һин үҙеңә
Үҙең ҡаҙайһың бысаҡ.

## НИ БЕЛӘМ МИН?

Беләм аслыҡты мин, ҡыш селләһен
Һәм ҡәһәрле хәсрәт әсәһен,
Иге-сиге булмаҫ, мин һөйләһәм
Юғалтҡандың әсе-сөсөһөн!

Минең әле һеҙгә һөйләгәнем
Мин күргәндең тамсы бер заты,
Нисек кенә һыҡрамаһын йәнем,
Күтәрә был йөрәк ғазапты.

Бар кояш та унда, яҙ ҙа йәшәй,
Сәскәләр ҙә, ҡоштар моңо ла.
Урман, тугай, яҡты күлдәр, рәшә,
Һыҙылып ҡына атҡан таңы ла.

Белә йөрәк әле кос барлығын,
Зиһенем дә белә сик юғын,
Уй-тойғома барыһы баш һалырын..
Ныҡлап әйтәм быға шик юғын.

## ӘШСЕ ҠЫҘ ЙЫРЫ

Һайрамасы, һандуғасым, ҡуй,
Кит тәҙрәмдән, миндә хәсрәт, уй:
Булмаһасы таңдан тораһым,
Ҡуҙғатмасы йөрәк яраһын,
Былай ҙа юҡ миндә яҡты уй...
Ҡуй, һайрама, теш ҡайрама, ҡуй!

Булмаһасы таңдан тораһым,
Һин яҡтыла тормош ҡораһың,
Ә миңә бит эшкә барырға,
Көнө буйы эшләп арырға.
Унда төтөн, шау ҙа туҙан, уй...
Ҡуй, һайрама, һандуғасҡай, ҡуй!

Һин һайраһың төнө буйына,
Эш ҡайғыһы инмәй уйыңа,
Һин эсәһең урман ысығын,
Ә мин ағыу эсәм, ҡошсоғом.
Кит тәҙрәмдән, миндә хәсрәт, уй,
Һайрамасы, һандуғасым, ҡуй!..

## ТӨП СИНЫФ

Төп синыф, ул һиңә! —
Йәшәргә, үҫергә
Һәм ижад итергә,
Бар яра уңалған
Хөр көнгә етергә!

Төп синыф, ул һиңә! —
Үҙеңде тик үҙең
Күтәреп, еңергә;
Бар синыф ыҙғышын
Ҡәбергә күмергә!

Төп синыф, ул һиңә! —
Һуғышсы булырға,
Шунан да ни яҡшы?
Маҡсатың — кешелек,
Барыр юл — ҡояшың!

## ҠИӘМӘТ КӨПӨ

Тибеүҙән туҡтар
Ҡайнар күп йөрәк:
Аяуһыҙ — туптар,
Ҡыйыуҙар — һирәк.

Киткәнсе осоп
Осҡондан ялҡын,
Мәхшәрҙән йонсоп,
Быуылыр алҡым.

Иҙелеү, йәбер
Бөткәнгә саҡлым,

Әллә ни ҡәҙәр
Ҡан ҡойор халҡым.

Иркен тын алып,
Киргәнсе күкрәк,
Башҡа таш яуып,
Күк торор күкрәп.

Ташыр ҙа диңгеҙ
Тағы ла ҡайтыр...
Булһа ул елһеҙ,
Кем һуң сайҡалыр?

Йөҙләгән йәндәр
Яуҙа юҡ булыр,
Алмашҡа меңдәр
Атлығып торор.

Тынһа бер һөрән,
Ҡанмайса ҡоно,
Уилаған өран
Ҡеүәтләр уны.

Торғансы ҡалҡып
Тау, ҡыр. йылталар,
Сал сәсен йолҡоп,
Иңрәп ер илар.

Унда ла бында
Тетрәр донъялар,
Янып ялҡында,
Ауыр биналар.

Ул саҡта һеҙгә
Ер ҡалмаç боçор,

Ә өҫтөгөҙгә
Ҡолап тау баҫыр.

Һарайҙар инде
Ҡотҡармаҫ улар,
Иңсвән илдең
Ташлар ҡаялар.

Урман да был саҡ
Асмаҫ ҡуйынын,
Һыйпар тик бысаҡ
Залим муйынын.

Диңгеҙме, көлөн,
Һеҙҙе йыуатыр? —
Ажгырып килеп
Упҡыны йотор.

Һаҙга кем бара?
Алмаҫ, сирҡаныр:
Ҡаранан ҡара
Йәндәрҙе таныр.

Инде ни ҡалһын?
Йәһәннәм ҡалыр.
Көкөртлө ялҡын
Ялмап шатланыр!..

## Ованес Туманян

(1869—1923)

### САЯТ НОВА

Йырлап килде,
Йылап китте Саят Нова *.
Һөйөп килде,
Көйөп китте Саят Нова.

Тыныс ине,
Ҡылыс таҡты Саят Нова.
Тик һөйөүҙең
Һүҙен тапты Саят Нова.

* Саят Нова — күренекле әрмән ашуғы (1712—1795).

## VI

**Туҡтағол**
**Педер Хузангай**
**Сөләймән Рөстәм**
**Ираклий Абашидзе**
**Ашот Граши**
**Сильва Капутикян**
**Степан Щипачев**
**Рәсүл Ғамзатов**
**Рәмис Рысҡулов**
**Риза Халид**
**Нәби Хәҙри**
**Алексанр Галкин**
**Хаджи-Мурат Дзуццати**
**Егор Полянский**
**Михал Шевченко**

## Туҡтағол

(1864—1933)

### НИ ЯҠШЫ?

Арғымаҡҡа атланып,
Ат саптырһаң — шул яҡшы,
Аҫыл кейем ҡапланып,
Алда торһаң — шул яҡшы,
Айҙай һылыуың шатланып,
Албырғатһа — шул яҡшы!

Яҡшы — имен йәшәһәң,
Ярышта ал бирмәһәң,
Ялҡын янһа йөрәктә,
Яңы кейемдәр кейһәң,
Яҡты йөҙ йәрең һөйһә,
Яман түгел бигерәк тә!

Илең һине ҡаҡмаһа,
Изге эшең маҡтаһа,
Ир егеткә — шул яҡшы!
Ике күҙен тултырып,
Ике ҡолағын торғоҙоп,
Ир һүҙенән ҡырғыҙым
Ирмәк тапһа — шул яҡшы!

Ҡыҙ-ҡыҙҡынға йәш саҡта
Ҡыҙыл кейгән йәй яҡшы,
Ҡарт-ҡорога ҡарт саҡта
Ҡаҡлы, баллы сәй яҡшы,
Ҡыйҡыуларға шат саҡта
Ҡырас ялды тай яҡшы!

Йәне барҙың йүне бар,
Йөҙ меңдә ҡыуаныс табар —
Йөҙ меңе лә, һай, яҡшы!
Йөҙ йыл һөйөп туймаҫ йәр
Йөҙөн йөҙөңә терәр
Йәмле төндә ай яҡшы!

Килен төшһә, байрам булһа,
Көләшһә, айран булһа,
Күңел асыу, наҙ яҡшы,
Тик муллаға, ишанға,
Түрәләргә ышанған
Тилеләр генә шаҡшы, —
Уларға намаҙ яҡшы!

## ҒҮМЕР

Ат арымаҫ булһа икән,
Йәш ҡартаймаҫ булһа икән,
Донъяларға тыуғас әҙәм,
Бәхете менән тыуһа икән!

Гөл һулымаҫ булһа икән,
Гел сәскәһен атһа икән,
Һомғол буйлы һылыу ҡыҙ
Мәңге балҡып баҡһа икән!

Ебәк уңмаҫ булһа икән,
Егет туңмаҫ булһа икән,
Йәнең һорап үлем килһә,
Күҙең күрмәҫ булһа икән!

Үлән ҡоромаҫ булһа икән,
Күҙең тонмаҫ булһа икән,
Ҡыҙҙың алһыу йөҙкәйҙәре
Һис һарғаймаҫ булһа икән!

Ир илендә булһа икән,
Һис бирешмәй торһа икән,
Был донъяны гөлдәй итеп,
Үҙ яйына ҡорһа икән!

Ил ырыҫлы булһа икән,
Ҡайғы урап уҙһа икән,
Яҡшылыҡҡа тик яҡшылыҡ
Донъяла ҡул һуҙһа икән!

Сабый саҡ та үтеп китә,
Ел ҡалдырып ҡанаттан,
Кире ҡайт, тип саҡырһаң да,
Ҡайтып килмәй ҡабаттан.

Булат, — ул да тупарыр,
Шәп ат, — ул да бер арыр,
Был донъяның матурлығын
Кем генә һуң ҡайтарыр?!

## Педер Хузангай

(1907—1970)

### ШИНЕЛЬ

Өткөләнеп бөткән ут-ялҡындан,
Ут-ярсыҡтан бөткән тишелеп.
Өнһөҙ-һүҙһеҙ, һаҡта торған һымаҡ,
Эленеп тора һаман шинелем.

Күпме юлдар саңы, йылдар сыңы
Һеңгән ошо өнһөҙ шинелгә.
Күрһәтмәһен башҡа ул күргәнде, —
Төшмәне бит Еңеү еңелгә!..

Шинелкәйем минең, йән дуҫҡайым,
Түшәгем һин, юрған-мендәрем...
Һин кәфен дә булдың ут аҫтында,
Күпме ирҙең яптың иңдәрен!..

Хәтерләһәм әле ул көндәрҙе,
Ялҡын булып сыға уфтауым.
Әсәй-Рәсәйҙе бит ҡурсып ҡалды
Ошо ҡырыҫ һалдат буҫтауы.

Шинелкәйем,
Беләм ҡәҙереңде:
Ҡыҫып-ҡымтып арыҡ һынымды,
Илкәйемә мине алып ҡайттың,
Ышаныслы,
Йылы, ныҡ булдың.

Һаман иçтә:
Саҡкау ҡалҡандар ҙа,
Ялҡындар ҙа ялмап алдылар.
Кискән саҡта боҙло йылғаларҙы
Шул шинелдәр һаҡлап ҡалдылар.

Шинелкәйем,
Нисек иçән ҡалдыҡ,
Иçем китә шуға үҙемдең...
Бик күп ипкәйҙәрең
Беҙҙе һаҡламаһа,
Еңеп сыҡмаç инек үлемде...

Шуға ла шул,
Йән дуçтарҙы уйлап,
Һайламаныҡ юлдың еңелен.
Әле лә мин, иштәреңде барлап,
Бағам һиңә, ғәзиз шинелем...

## КАСПИЙ

Тыныс саҡта Каспий бала һымаҡ,
Ышаныусан, алсаҡ, һөйкөмлө.
Тик ҡоторһа сабый тулҡындары,
Үҙ ҡулында үҙенең хөкөмө:
Кеше яҙмыштары менән уйнап,
Йән һағалап ята упҡыны.
Әммә, елкән киреп, балыҡсылар
Ауыҙлыҡлай һәр бер тулҡынын.
Ә тулҡындар — ярһыу арғымаҡтар —
Өҙөп ҡасҡанмы ни тышауын!
Тик елкәндәр ҡыуып баҫтыралар
Аҡ фетнәнең шомло был шауын.
Ҡалай ғына тулҡын дуламаһын,
Ахыр сиктә тына, талығып.
Балыҡсылар, бер ни булмағандай,
Ҡайырып алып сыға балығын.
Аҡсарлаҡтар оса хайран булып,
Ҡанат осо менән һыу гиҙеп.
Әйтерһең дә, улар шиғыр яҙа
Зәңгәр дәфтәренә диңгеҙҙең!

## БЫНА БЫНДА ТӨЙӘГЕМ...

Бына бында төйәк ҡорам! Был яҡҡа
Бар дуҫтарым килһен миңә ҡунаҡҡа.

Белеп торам: ҡайҙа ғына булмайым,
Бындай ерҙе табып булмаҫ, моғайын.

Башлыҡ урап алайым да муйыныма,
Баш һалайым тик Дәимити ҡуйынына.

Башлығымды башҡа ергә ташламам —
Ҡомартҡы ул миңә ата-бабанан...

«Бына бында!..» — тигәйнем дә, уйҙарым
Урап сыҡты Орбели-тау буйҙарын.

Унда миңә барһы туған, илаһи,
Унда ҡалған йәнем-тәнем, биллаһи!..

Ә Риони аҡҡан яҡ һуң нишләһен?
Унда ҡалған бала сағым, йәш мәлем.

Унда тәүге хыялдарым, юл башым,
Эҙҙәремде һаҡлай һаман нур ташы...

Йәнә алда Одишиҙең ҡырҙары
Хәтерләтте күк диңгеҙҙең йырҙарын.

Быш-быш килгән һәр үләне, тугайы —
Онотмайҙыр ул да мине, моғайын?

Мин мәңгегә ҡалыр инем был яҡта,
Сал Алазань һыуы нишләр ул саҡта?

Түкмәҫме һуң күккә ашҡан һырттары
Йөҙөмөнөң күҙ йәшендәй һуттарын?

Ҡараһам да илдең ҡайһы яғына,
Һәр мөйөшөн үҙ итәм мин, һағынам.

Унан күркәм, яҡын ни һуң бар тағы?
Аҡ бәхеткә сумған уның һәр яғы!..

Айҡап сыҡтым, байҡап сыҡтым Ватанды,
Һәр халҡының бәхетенә шатландым.

Һәр бер илен үгәйһетмәй ят итеп,
Әйткем килде: «Төйәгем!»— тип, ант итеп!..

Быш-быш килгән һәр үләне, тугайы —
Онотмайҙыр ул да мине, моғайын?

Мин мәңгегә ҡалыр инем был яҡта,
Сал Алазань һыуы нишләр ул саҡта?

Түкмәҫме һуң күккә атҡан һырттары
Йөҙөмөнөң күҙ йәшендәй һуттарын?

Ҡараһам да илдең ҡайһы яғына,
Һәр мөйөшөн үҙ итәм мин, һағынам.

Унан күркәм, яҡын ни һуң бар тағы?
Аҡ бәхеткә сумған уның һәр яғы!..

Айҡап сыҡтым, байҡап сыҡтым Ватанды,
Һәр халҡының бәхетенә шатландым.

Һәр бер илен үгәйһетмәй ят итеп,
Әйткем килде: «Төйәгем!»— тип, ант итеп!..

## ЯҘҒЫ БАҠСАЛА

Күршемдәге һылыу ҡыҙ
Төшөмә керең,
Икәү яҙғы баҡсала
Ҡайттыҡ беҙ йөрөп.

Бүләк иттем күршемә
Сирень сәскәһен.
Бүләгемә һөйөнөм,
Әйҙә еҫкәһен!

Асты ла һылыу күршем
Тарих китабын,
Һаҡ ҡына һалып ҡуйҙы
Сирень ботағын.

Үҙе зачетын уҡый,
Тәрән — һулышы:
Сирень еҫенә сумған
Тәре һуғышы.

Урта быуатты ла ҡыҙ
Ҡыҙыҡ тип тапты —
Шундай мөхәббәт менән
Ҡарай китапты.

Күршемдәге һылыу ҡыҙ
Төшөмә керең,
Шулай яҙғы баҡсала
Ҡайттыҡ беҙ йөрөп...

## БӘХЕТ ЙОНДОҘО

Бәхет! Һин бит ғүмер-ғүмергә
Кеше хыялында гел бергә!..
Һинең менән борон-борондан,
Ҡойонорға теләп нурыңда,
Кеше һәр саҡ илап һөйләшкән,
Сыланғанһың шуға гел йәшкә...

Балҡының һин мәңге, нур һымаҡ,
Күҙ алдында, ләкин — бик йыраҡ,
Төшөр булһаң, ҡапыл атылдың,
Төшөп етмәй тик һин ватылдың...
Кеше һинһеҙ күпме өшөгән,
Тик яңыса кил һин кешегә.

Йондоҙ булып күктән атылма,
Берәүҙәргә эҙһеҙ юғалып,
Йондоҙ булып телһеҙ балҡыма,
Кил һин беҙгә яңы юл һалып:
Һыҙған юлға ҡарап иң әүәл,
Ғаләм карабындай, кил теүәл!..

## Степан Щипачев

(1899—1979)

*
* *

Ышанган да булыр инем һиңә,
Һыуҙар бөтә,
тиһәң, диңгеҙҙә!..
Ышанмайым,
Һөйөү үтә, тиһәң, —
Һайығыу юҡ тәрән һөйөүҙә...

*
* *

Ниңә, иркәм, ниңә инде
Ут һалдың йөрәгемә?
Яраһына йөрәгемдең
Тик дауа һиндә генә!

## ЛӘҒНӘТ

Ҡәһәр төшһөн тишек турһыҡҡа,
Һаҡламаһа балдың зәһәрен.
Хәнйәр булһа әгәр тутыҡҡан,
Ҡыны менән уға — ҡәһәрем.

Ҡәһәр төшһөн һалҡын шиғырға,
Башты йылытмаған башлыҡҡа,
Ярамаһа шеш ит ҡурырға,
Ләғнәт — шешкә, ләғнәт — шашлыҡҡа.

Намыҫ заты һиңә йоҡмаһа,
Ҡәһәрләйем вәхши ғәҙәтең,
Әсәң телен һанға һуҡмаһаң,
Ләғнәт һиңә, минең ләғнәтем!

Ғүмер баҡый әҙәм балаһы
Белмәһә бер оят эрәтен.
Асылмаһа ҡупаҡ ҡапҡаһы,
Уға ла бар минең нәфрәтем.

Ҡәһәр төшһөн алдыҡ-ялғанға,
Нипдәй генә төҫкә кермәһен!
Ил йолаһын ергә һалғанға
Ләғнәт минән — күҙем күрмәһен!

Ҡәһәр төшһөн алдыҡ-ялғанға,
Өкө төҫлө ҡасҡан өрәккә,
Хилаф ҡылып анты алдында,
Һүҙе елгә осҡан сепрәккә.

Баш эймәйсә туған тауҙарға,
Башын эйһә кеше түрәгә,
Мин әҙермен уны ҡарғарға,
Маңлайына мылтыҡ терәргә.

Үҙ әсәңдең барын онотоп,
Хурлыҡ илтһәң ата йортона,
Апай-һеңлең торһа ут йотоп,
Ләғнәт минән һин ер ҡортона!

Ҡәһәр төшһөн туң бер маңлайға,
Ялағайҙы әгәр хуп күрһә,
Ләғнәт бер тәкәббер малайға,
Аҡ һаҡаллы ҡартты юҡ күрһә.

Яу юҡта ла ләғнәт ҡурҡаҡҡа,
Икеләтә ләғнәт — яу барҙа.
Ләғнәт ҡомһоҙ, моңһоҙ ир-атҡа
Ҡурҡаҡ менән бер үк ҡатарҙан.

Миңә оҡшай бөтә халыҡтар.
Берәйһенә яла яғырға,
Һүҙ әйтергә кемдең хаҡы бар? —
Өсләтә ҙур ләғнәт уларға.

Һәм ҡәһәрем төшһөн йән дуҫҡа,
Ауыр саҡта ҡулын һуҙмаһа.
Ләғнәт тағы һатлыҡ тауышҡа,
Төрлө ҡорға ярап буҙлаһа!..

## ЙЫЙЫЛЫШТАР

Йыйылыштар! Телмәр һәм сығыштар,
Ятлап бөткән һүҙҙәр — ҡойола!
Ҡайсаҡ миңә төрлө йыйылыштар
Илде баҫҡан яуҙай тойола.

Елә состав, оса самолеттар,
Кәңәшмәгә — бөтә ил менән.
Һалмай унда кеше ниндәй йорттар,
Күпме үлән сапмай тел менән!

Һүҙҙән алйып, ташсы серем итә,
Ә бинаһы көтә терәүҙе...
Аҙна буйы хирург сәсән бөтә, —
Ҡыл өҫтөндә хәле берәүҙең!

Көтөүселәр көн-төн һүҙ йоталар,
Ә малдарын көтә бүреләр.
Бер юл шиғыр баҫмай газеталар,
Йыйылыштан отчет бирәләр.

Ауылда ут сыҡҡан, өйҙәр яна,
Төтөнөн ел күккә мендерә.
Ә пожарник, телмәр тотоп, ана,
Кәңәшмәлә янғын һүндерә.

Таңдан кискә саҡлым бер конторҙа
Сират тора халыҡ хәҙер ҙә.
Ҡабул итеү көтмә директорҙан,
Замдары бит доклад әҙерләй.

Тиҙерәк, яҡташ, ҡара ҡайтыу яғын,
Иғтибар ул булмаҫ, юҡ бында.
Сөнки улар телмәр яҙа тағы
Иғтибарлы булыу хаҡында.

Әй, таçма тел! Туҡта, сеү, бер аҙға!
Һин еçкәгән хәреф юлдары
Торһа икән берәй бураҙнаға,
Һөйәлеңә эшсән ҡулдарҙың!..

Ебәрегеҙ яуға — баш һалырмын,
Йыҡ, тиһәгеҙ — урман йығырмын.
Трибунанан әйтмәç һүҙҙе әйтермен,
Яҙ, тиһәгеҙ — яҙып шиғырын.

Әй, йәшәге килә, килә яҙғы,
Илгә булһын ине һәр һулыш.
Тик шиғырым бөтмәй ҡалды тағы:
Тағы саҡырҙылар — йыйылыш!..

## МОСТАЙ КӘРИМГӘ

Бына тағы аҡ ялдарын сайҡап,
Ҡар һыпырта елдәр тауҙарға.
Тау артылып, ярһып, атлығып, тим,
Ғәскәр мәллә саба яуҙарға?

Бүркем һалып туған буçағала,
Сал сәстәрен ҡаҡтым йонсоуҙың.
Йылдар һымаҡ, осҡан йылдар һымаҡ
Күрҙем, Мостай, шул ҡар осоуҙы.

Тиҙ ирене, ҡарҙай, календарҙар...
Тартмаһа ла мода-уйындар,
Нисек кенә тимә, беҙгә лә бит
Ҡағылып үтте, дуçҡай, ул йылдар.

Хаталандыҡ беҙ ҙә һинең менән, —
Ҡыҙмаса ла, айыҡ саҡта ла.

Тик яңынан аҫкан күҙебеҙҙе
Йәшермәнек, йәштәр сыҡһа ла.

Хәтеремдә: өнһөҙ ғазап татып,
Ҡайсын Ҡолоевтар ҡайтҡанса,
Йөрәктәрҙе ауыр бер ҡара таш
Йылдар буйы баҫып ятҡан саҡ.

Аҡтар әле күңел дәфтәреңде,
Үткәндәргә шар ас ҡапҡаны.
Олоғайҙыҡ, Мостай, — бәгзеләрҙәй,
Юҡ, тормабыҙ инде ваҡланып.

Беҙҙең сая сал баштарҙа хәҙер
Уй артынан уйҙар эйәргән.
Ҡолай торғас тояҡ аҫтарына,
Иркен ултырабыҙ эйәрҙә.

Ҡар өҫтөндә усаҡ үрләтәбеҙ,
Һаҡ йәндәрҙе урап уҙабыҙ,
Һәр бәхәскә инде ташланмайбыҙ,
Бик буштары күп шул уларҙың.

Һоҡланыр мәл түгел үҙ-үҙеңә,
Ашыҡтырып юлдар саҡыра.
Шөһрәт түгел, шиғриәтте наҙлап,
Йән аямай эшләр саҡ тора.

Ерҙе бит йә саҫҡау һыуыҡ ҡоршай,
Йә сәскәгә күмә муйылдар.
Беҙгә иң-иң яҡшы уҡытыусы —
Ул бит йылдар, Мостай, ул — йылдар.

Яҙа беҙгә сырхап ятҡан ерҙән
Бәй аҫтында һулҡҡан яралар.

Тәүбәләргә килеп, хаҡ һүҙ көтөп,
Төрмәләрҙән хатта яҙалар.

Һабансы ла яҙа, ураҡсы ла,
Яҡын итеп ара алыҫын.
Ә йылдар һуң? Оса! Шул йылдарҙы
Эйәрләһен шағир намыҫы.

Туп-туп булып осоп ҡайтҡан йырҙар
Яңғырар тиҙҙән яҙын һәр ерҙә.
Ярай әле, Мостай, һин эргәлә
Тоғро дуҫ та, ысын шағир ҙа.

## ЙОНДОҘҘАР

Йондоҙҙарым, йондоҙҙарым
Күҙләй минең йырҙарҙы,
Күҙҙәреләй, күҙҙәреләй
Иҫән булмағандарҙың.

Ҡолаҡ һалам, әйтә заман,
Аттырғанда таңдарҙы:
— Намыҫы бул, намыҫы бул
Яуҙан ҡайтмағандарҙың.

Тау иленең тоғро улы
Һайламаҫ юл таҡырын;
Бәлки, мин дә, бәлки, мин дә
Йондоҙ булып балҡырым.

Һаман яныпкүҙ ташлармын
Йырына башҡаларҙың —
Күҙе булып, күҙе булып
Беҙҙең замандаштарҙың.

## ДАҒСТАН ЙОНДОҘО

«...Йондоҙ менән йондоҙ һөйләшә...»
*М. Ю. Лермонтов*

Күргәнем бар байтаҡ ҡалаларҙы,
Аполлондар баҫҡан йорттарҙы,
Арыҫландар һаҡлар ҡапҡаларҙы,
Эсендәге шәрә заттарҙы.

Бинокль тотҡан йәштәр, тай-тулаҡтар,
Беҙ үксәле туташ-ханымдар
Тамашаға килһә ағылып,
Мәрмәр һарайҙарға ингән саҡта
Шәүләләрс ҡала сағылып.

Нисә быуат шулай залдарында,
Өҫтөн-башын ҡарап ҡоҙғонән,
Күпме кеше үтеп киткән бында
Ягымлы һәм уҫал йөҙ менән!..

Күрҙем бында яҙмыш иркәләрен —
Бәрхәттәргә батып ултырған
Ҡарттарын да. Маңлай-сикәләрен
Гүйә, көй тамғаһы тултырған!..

Минең дә бар, күҙ йәшемде түгеп,
Ултырғаным өҫкө балконда.
Шашҡан мавр, юҡ, һөйгәнен түгел,
Мине быуҙы шул саҡ алҡымдан.

Дон-Кихот та мине азат итте,
Ғалим-бесәй әкиәт һөйләне,
Болот менән Демон ҡаплап китте,
Ҡаф-тау аша осоп бер мәле.

Тәүбәләргә килеп, хаҡ һүҙ көтөп,
Төрмәләрҙән хатта яҙалар.

Һабансы ла яҙа, ураҡсы ла,
Яҡын итеп ара алыҫын.
Ә йылдар һуң? Оса! Шул йылдарҙы
Эйәрләһен шағир намыҫы.

Туп-туп булып осоп ҡайтҡан йырҙар
Яңғырар тиҙҙән яҙын һәр ерҙә.
Ярай әле, Мостай, һин эргәлә
Тоғро дуҫ та, ысын шағир ҙа.

## ЙОНДОҘҘАР

Йондоҙҙарым, йондоҙҙарым
Күҙләй минең йырҙарҙы,
Күҙҙәреләй, күҙҙәреләй
Иҫән булмағандарҙың.

Ҡолаҡ һалам, әйтә заман,
Аттырғанда таңдарҙы:
— Намыҫы бул, намыҫы бул
Яуҙан ҡайтмағандарҙың.

Тау иленең тоғро улы
Һайламаҫ юл таҡырын;
Бәлки, мин дә, бәлки, мин дә
Йондоҙ булып балҡырым.

Һаман янып күҙ ташлармын
Йырына башҡаларҙың —
Күҙе булып, күҙе булып
Беҙҙең замандаштарҙың.

# ДАҒСТАН ЙОНДОҘО

«...Йондоҙ менән йондоҙ һөйләшә...»
*М. Ю. Лермонтов*

Күргәнем бар байтаҡ калаларҙы,
Аполлондар баҫкан йорттарҙы,
Арыҫландар һаҡлар ҡапҡаларҙы,
Эсендәге шәрә заттарҙы.

Бинокль тотҡан йәштәр, тай-тулаҡтар,
Беҙ үксәле туташ-ханымдар
Тамашаға килһә ағылып,
Мәрмәр һарайҙарга ингән сакта
Шәүләләре ҡала сағылып.

Нисә быуат шулай залдарында,
Өҫтөп-башын ҡарап коҙгөнәп,
Күпме кеше үтеп киткән бында
Яғымлы һәм уҫал йөҙ менән!..

Күрҙем бында яҙмыш иркәләрен —
Бәрхәттәргә батып ултырған
Ҡарттарын да. Маңлай-сикәләрен
Гүйә, көй тамғаһы тултырған!..

Минең дә бар, күҙ йәшемде түгеп,
Ултырғаным өҫкө балконда.
Шашҡан мавр, юҡ, һөйгәнен түгел,
Мине быуҙы шул сак алҡымдан.

Дон-Кихот та мине азат итте,
Ғалим-бесәй экиәт һөйләне,
Болот менән Демон ҡаплап китте,
Ҡаф-тау аша осоп бер мәле.

Марияға ғашиҡ ул мин инем,
Юҡ, ҡарт әсир — гетман шашманы.
Ул мин, ул мин эҙләп, табып бирҙем
Ҡолһылыуҙың гәлсәр башмағын.

Ялған менән хаҡлыҡ алышҡанда,
Был алышта мин дә ҡатнаштым.
Бәхетһеҙҙе ҡурсып булышҡанда,
Күҙҙәремдә йәш йә ҡап таштым.

Ә сәхнәне шаршау ҡаплағанда,
Ҡупҡан саҡта алҡыш дауылы,
Бер мин өндәшмәнем. Күҙ алдымда
Тауҙар ятты, ятты ауылым.

Аҙ инеме уның ғәм-ҡайғыһы?
Көнләгәндә ир-ат үҙ йәрен,
Уларҙың бит шулай һәр ҡайһыһы
Үкһеп-үкһеп ҡыҫты хәнйәрен!..

Гамлет, Офелия һәм Джульетта —
Барыһын да тауҙар тыуҙырҙы.
Тик тыуманы, меңәр йыл уҙып та,
Шекспиры ғына тауҙарҙың.

Тау йырланы, ҡушып үҙ моңона
Йылға шауын, ҡоштар һайрауын.
Тик тыуманы Бах, Бетховен ғына,
Баҫып тауҙың хәнйәр ҡайрауын.

Ошо хәнйәр ослап ҡуйған саҡта
Джульеттаның ҡыҫҡа ғүмерен,
Шағир түгел, ҡонсол ир был хаҡта
Ҡурғаш менән әйтте һүҙҙәрен.

Был мәңгелек ауыр хикәйәтте
Йырлаһалар тауҙа йырсылар,
Һатлыҡ булат уны һәләк итте,
Ергә ҡойоп ҡыҙыл тамсылар.

Мәңге шулай ғүмер кисерҙеләр,
Мәңге шулай ҡан-йәш түктеләр.
Аҡыллыға ағыу эсерҙеләр,
Йырсыларҙың ауыҙын тектеләр.

Йөҙөнсө ҡат шуға йырҙарымда
«Аврора»ның яңрай күкрәүе.
Ул уятты тыуған тауҙарымды,
Ул ҡуҙғатты ерем тетрәүен.

Тауҙар күкрәгендә ташып килгән
Тау йырына ул бит юл асып,
Телһеҙгә — тел, күҙһеҙгә күҙ биргән
Ирек килде, йәйеп ҡоласын.

Шул килеүҙән ерем сәскә ата,
Дуҫ ҡулдарға һуҙа ҡулдарын.
Кремлдә йырлай ошо хаҡта.
Гидат ҡумыҙының ҡылдары.

Үҙ телендә йырсы йыр йырлаһа,
Күңеле ирей тауҙар халҡының.
Бар донъяны хатта ялмай ҙаһа
Беҙҙең бейеүҙәрҙең ялҡыны!

Ят диңгеҙҙәр яры — Сингапурҙа,
Токиола — ҡайҙа булһам да,
Аңланылар барыһын минең йырҙан,
Яуап тапты минең илһам да.

Нил буйына, Сена ярҙарына —
Ҡайҙа барһам, ошо урында —
Тау йондоҙо меңдәр араһынан
Ҡойондорҙо мине нурында.

Кескәйлегеп күрһә лә бит күҙем,
Уның менән юлға ҡуҙғалам.
Нигдәй генә булһа ла ул үҙе,
Унһыҙ миңә нур юҡ донъяла.

Тик ниңә һуң беҙҙә бәгзе бәндә
Вәғәз уҡый һаман ялҡытып:
Бар халыҡҡа, имеш, күк йөҙөндә
Етмәгәнме бер ай балҡыуы?..

Ни кәрәге, имеш, баш ватыуҙың,
Ваҡ йондоҙҙар ҡасан ҙурайған? —
Тотрга ла ошо мең йондоҙҙо
Уҡмаштырыр кәрәк бер айға.

Халҡыбыҙ аҙ, еребеҙ тар икән,
Әйҙә шул ай нурын өләшһен.
Йыр-шиғырға күрше тел бар икән,
Бәй, шул телдә балаң һөйләшһен.

Ҡайһы саҡта минең ғалим яҡташ
Тамаҡ ҡырып, гәпкә керешә.
Ниңә усаҡ, имеш, әй, һантый баш,
Ут һорап бар, әнә, күршеңә!..

Әй, тыуған ил! Яҙын сәскә атып,
Емеш бирһә баҡсаң көҙҙәрен,
Сәскә атмай ҡалғаны юҡ ятып
Минең дә бит тыуған ерҙәрем.

Йәш булһа ла уның ағастары,
Аҙ булһа ла әле емеше,
Ныҡтың да бит булған йәш саҡтары,
Ныҡыр әле, тимен, мин — кеше.

Тик ишетәм йәнә шомло һүҙҙе,
Күрәҙәсем юрай ныҡышып:
Япраҡ ҡойор, имеш, ағас беҙҙең,
Тамырынан яҙыр ул ҡышын...

Был тәңгәлдә минең бар үҙ уйым:
Ҡороторғамы һуң уларҙы
Тау илкәйе быуат-быуат буйы
Ҡаны-йәше менән һуғарҙы?

Ана ҡояш, һүҙем антым булыр:
Аҙ булһа ла һаны аварҙың,
Беҙҙең дә үҙ Глинкабыҙ тыуыр,
Үҙ Пушкины тыуыр тауҙарҙың!

Йондоҙ карабында осоусылар
Айға табан аҡ юл һалырҙар,
Ерҙең төҫө итеп, бәлки, улар
Илем көйөн юлға алырҙар.

Ете диңгеҙ аръяғында яңғырар
Тауҙар йыры, күңел тетрәтеп,
Һәм тауҙарҙа тыуған рәссам яһар
Яңы мадоннаның һүрәтен!..

Үткән юлға баҡсы, замандашым:
Тау-тау булып ҡайғы теҙелгән.
Беҙ саҡ килеп таптыҡ йылға башын,
Улдарыбыҙ етер диңгеҙгә!

Ә ейәндәр яулар дан-шөһрәтте,
Тау артынан тауҙар артылып.
Беҙ баҡырын тапһаҡ шиғриәттең,
Һеҙ табығыҙ уның алтынын!..

Тағы төн уртаһы. Мин күгемә бағам —
Аҡкош юлы нурын өләшә.
Әйтерһең дә, әҙәм холҡон алған —
Йондоҙ менән йондоҙ һөйләшә.

Күк дәүен дә, кесеһен дә таҡҡан —
Бар йондоҙ ҙа биҙәй күк йөҙөн.
Минең ҡарлы тауҙарыма баҡҡан
Туған йондоҙ — бына ул үҙе...

Яңа һәр саҡ баҙлап ҡараңғыла,
Нур ғынаһы хайран итерлек.
Ҡыҫыҡ түгел уға был донъяла,
Башҡаға ла урын етерлек.

Шағирҙарға майҙан еткән һымаҡ,
Ғәҙел бүлгән улар урынды.
Әй, йондоҙом, ҡой үҙеңдең тоноҡ,
Ләкин ҡабатланмаҫ нурыңды!..

## ҺАНДУҒАС ЙЫРЫ

Таң атҡас та кис булғас,
Бер йыр йырлай һандуғас.
Берәү булғас ни бары,
Ни хаҡында ул йыры?
Ялҡытмағас һис ул йыр,
Тыуған ер хаҡындалыр!

## ТУҒАН ТЕЛ

Төш тиһәң дә төш инде был, сәйер:
Үлем килде бөгөн йән һорап.
Тауҙарымдың ҡайнар ҡуйынында
Ятам, имеш, сарсап, ҡанһырап...

Шылтыр-шылтыр аға, саба йылға,
Бер кемгә лә юҡ, тип кәрәгең.
Ә мин ятам, тыуған ерҙе ҡосоп,
Ер булмаҫтан элек йөрәгем.

Үлем баш осомда, тик хәлемде
Белмәй һис кем, килмәй янымa.
Тик ҡайҙалыр, алыҫ, бөркөт саңҡый,
Тик кемгәлер болан ялына...

Ир ҡорона аяҡ баҫҡас ҡына
Әрәм булды, тиеп иларға —
Әсәм дә юҡ, дуҫ-иш, бисәм дә юҡ,
Һынсы ла юҡ сеңләп йырларға.

Ятам шулай хәлһеҙ, тәнем йәнһеҙ...
Ҡапыл шул саҡ быпа яҡында
Ике кеше килә лабырлашып
Үҙ телемдә ниҙер хаҡында.

Тау иленең бөркөү ҡыуанында
Мин йән бирәм, үләм... Ә улар? —
Ниндәйҙер бер Хәсән хәйләләрен,
Мут Ғәлиҙе һөйләп баралар!..

Йәнгә яҡын, таныш был һүҙҙәрҙән
Мин аңыма килдем, аңланым:
Юҡ, үлемдән мине им-том түгел,
Тик туған тел ҡурсый алғанын.

Башҡаларға башҡа телдәр дауа,
Тик ул телдә яҙмам ғүмергә.
Әгәр иртән, телең юҡ, тиһәләр,
Мин бөгөндән әҙер үлергә.

Телем өсөн һәр саҡ йәнем әсей,
Ярлы тиһәләр ҙә телемде,
Бейек меңмәһә лә, бөйөк миңә,
Төҫкәйе ул миңә илемдең.

Тойормо һуң улым башҡа телдә
Мәхмүт йырындағы ялҡынды?
Шулай уҡ мин үҙ телендә яҙған
Һуңғы йырсыһымы халҡымдың?

Мин тормошто һөйәм, һөйәм ерҙе,
Ерҙең хатта һәр бер мөйөшөн.
Йырланым мин бөтә Совет илен,
Сыҡмаһа ла һәр йыр килешеп...

Мин йәнемдәй күрәм ирек илен,
Мин әҙермен ғәзиз йәнемде
Уның өсөн ҡайҙа бирергә лә!..
Тик үҙ ерем алһын тәнемде!

Тик ҡайһы саҡ яҡташтарым менән
Цадалағы бер таш янында:
Ғамзат улы Рәсүл ята, тиеп,
Туған телдә иҫкә алһындар.

## ЕР ӘЙЛӘНӘ ИКӘН...

Мин ҡояшты эстем, һыу эскәндәй,
Үрләй-үрләй тауын ғүмерҙең.
Шәфәҡ ҡалҡып, шәфәҡ батҡанда ла
Алһыу һутын уның һемерҙем.

Ҡырлас, мәғрүр тауҙар илендә мин,
Шарлап ятҡан саҡта ҡар һыуы,
Йондоҙҙарҙы эстем шишмәләрҙән,
Баҫмаҫмы тип йөрәк ярһыуын.

Йәшел туғайҙарға, ҡыуаҡтарға
Белдем киндәй болот яуаһын.
Күк йөҙөнөң зәңгәр касаһынан
Ҡомһоҙланып эстем һауаһын!

Тау ягалап менгән һуҡмаҡтарҙа
Эстем елбәҙәк ҡар бөртөгөн.
Ирегән шул елбәҙәктең әле
Иренемдә тоям һәр төгөн.

Мин яҙҙарын эстем тауҙарымдың
Яландарҙа орлоҡ сәскәндә,
Эстем саскау Төньяҡ һалҡыпдарын,
Ҡеүәтле бер хәмер эскәндәй.

Мин, йәшенле ямғырҙарҙы эсеп,
Күрҙем нисек үлән ҡалҡыуын,
Мөлдөрәмә тулы гәлсәр кеүек,
Ер өҫтөндә йәйгор балҡыуын.

Сәскә атты тағы гөлйемештәр,
Ҡомалаҡтар толом үҫтерҙе.
Ҡаяларға менеп, мин уларҙың
Хуш эстәрен эсеп иҫерҙем.

Иҫерҙем мин ерҙең күркен күреп,
Яҙмышына бәхет юраным.
Үлә яҙып күпме ғашиҡ булдым,
Йырҙар эсеп, йырҙар йырланым.

Таш түгел бит кеше күңеле ул,
Мин, дуҫлыҡтың белеп ҡәҙерен,
Ҡыуанғанда — балдан буҙа эстем,
Ҡайғырғанда — эстем хәмерен.

Эсһәм эстем тик күңелем менән,
Уйын-көлкө өсөн эсмәнем.
Күрҙем сөнки Хиросима көлө
Фестивалдәр буйлап күскәнен...

Һыра эскән һымаҡ, өрә-өрә —
Күбегенән бөткәс асылып, —
Мин тормоштоң нәҡ асылын эстем:
Ялған түгел уның асылы!

Һөйәм, һөйөнәм һәм көйөнәм мин,
Төбөнәсә эсәм көнөмдө.
Эскән һайын һаман эскем килә
Һәр бер көнөн шулай еремдең.

Ер әйләнә икән, мин йыуанам, —
Танһыҡтарым ҡанмай ҡалһа ла, —
Мин китһәм дә, кешеләр бит ҡала
Ошо һыуһау менән донъяла!

*
* *

Ракеталар оса йондоҙҙарға,
Оса алыҫ, төпһөҙ диңгеҙгә.
Кешеләрем — бейек йондоҙҙарым,
Етһәмсе мин осоп тик һеҙгә.

## МАНАС-ХАЛҠЫМ

Бар күҙ йәшен йыйһаң һин халҡыңдың,
Алатауға ашыр тоҙ тауы,
Ыссыҡкүлде күмер ҡан-һарҡынды,
Ал сәскәләй алыр күҙ яуын!..

Бергә тойһаң бөгөн йылмайыуын,
Бар бәхетен, барлыҡ шатлығын,
Һин күрерһең, ҡояш ҡалҡыныуын,
Хакимдарҙың шашын шартлауын...

Бөйөк юламан ул — күсмә халҡым,
Мең-мең йылдар — үткән юлдары.
Ул, бер гигант Манас һымаҡ ҡалҡып,
Ҡояшына һонған ҡулдарын.

Мильон күҙле, мильон ҡул-аяҡлы,
Барыһын тоя, күрә, ишетә.
Ә хәтере уның ҡырҡ ҡатлы,
Ғәҙеллекте генә иш итә.

Һөйләй, көйләй теле менән уның
Барлыҡ ауыл, барлыҡ ҡалаһы.
Ни теләһәң, ни эҙләһәң — шуны
Шул диңгеҙҙән һоҫоп алаһың!..

*
* *

Ғүмергә тамһалар тамсылар, туктамай,
Хатта ки коростай мәрмәрҙе кыйрата!
Аңла һин, үпкәле һүҙҙәрең нәк шулай
Йөрәкте телгеләй, йөрәктән дәрт кайта.

Бик якшы беләһең: тамсыла йөрәк юк,
Тамсыға юл асык — тамырға, ағырға.
Беҙҙә бит йөрәк бар, теләк бар шулай ук,
Ни өсөн уларҙы һуң утка яғырға?

*
* *

Һине бит сабырһыҙ һөйгәндә,
Үҙеңдән тик һүҙҙәр көттөм мин.
Һинең һәр һүҙеңдән, йөмләңдән
Бәхет һәм хис өмөт иттем мин.

Күп йылдар үтһә лә, һылыу кыҙ,
Бер юлдан киләбеҙ барыбер.
Инде һүҙ кәрәкмәй, нәмә һүҙ? —
Йөрәгең ялкынын бирһәң бир!

## ШИМАЛ КӨҘӨ

Салланған болоттар ҡапланы күктәрҙе,
Ал ҡояш бик һирәк күренә.
Сәскәләр хуш еҫен һаҡлаған ерҙәрҙе
Күрһәм мин, йөрәгем тереләй.

Оҫтаның һүҙҙәрен тыңлаусан бер саздай,
Тартылған телеграф ҡылдары.
Уларҙы иркәләп, йыр йырлап зырылдай
Шималдың ҡеүәтле елдәре.

Ҡарттарҙай ойоған урмандар һәр ерҙә,
Моңланмай, һайрашмай шат ҡоштар.
Өшөгән йылғаға тошә тик ҡай берҙә
Тәңкәләй һарғайған япраҡтар.

Ҡып-ҡыҙыл миләштең тәлгәше эйелгән,
Ул тиҙҙән төрөнөр аҡ ҡарға.
Торпалар осалар пальмалар теҙелгән,
Ҡыш барын белмәгән яҡтарға.

Үҙеңсә гәжәйеп сибәрһең, алтын көҙ,
Мең ҡабат гүзәлһең һин ҡыштан.
Күңелдән ҡаршылап алабыҙ һине беҙ,
Айырылһаҡ та беҙ йәйге шатлыҡтан.

*Ленинград*

*
* *

Әлбиттә, шиғырың оҙон уҡ, киң дә ул,
Һүҙҙәрең дә һинең яуа ямғырҙай.
Үпкәм юҡ: ярашлы һин яҙған һәр бер юл,
Тик бары йөрәкте гепә яндырмай.

## ҠАРТ ӘСӘЙЕМ

Ул һулыған һары япраҡтай,
Йомарланған инде, йомғаҡтай,
Хәтерләһәм...
                    ҡыйын саҡтарҙа,
Ул тау һымаҡ тыуған яҡтарҙа, —
Ҡанат ҡуя ҡыйын саҡтарҙа.

## АЛТЫН КӨҘ

*«Чехословакия йырҙары»нан*

Ал таң ата. Томан ята
Үләндәрҙе йыуып китергә.
Урман йыры, ҡояш нуры
Һәр япраҡҡа теләй үтергә.

Бар күк хәҙер — болоттарға,
Бар күк хәҙер — һайрар ҡоштарға,
Алыҫтарҙан алыҫтарға
Туп-туп булып осар дуҫтарға.

Көмөшмө ни күк көмбәҙе,
Йылғаларға гәлсәр сыңмы ни?
Кемдер көлгән, тауыш биргән
Һалҡын урман алтын моңмо ни?

Иләҫ-миләҫ, еләҫ елдәр
Үрмәксенең кейгән ауҙарып.
Ә тарлауыҡ ыргый тауҙан,
Алтын тәңкәләрен ауҙарып.

Күҙ күреме етмәҫ киңлек!
Йомартлығы күҙҙе ҡыҙҙыра.
Тик алтынын ҡайҙа итһен? —
Уңлы-һуллы елгә туҙҙыра.

Бына инде көндә, байып,
Ер ялҡыны менән тоташты.
Ана ошо имәнлектә
Серем итә, тиҙәр, ҡояшты.

Йондоҙ яуған, әй, күркәм яҡ!
Ҡайғы-хәсрәт осоп киткән ер!
Алтын кешеләрҙе данлап,
Көҙөң дә бит йырлай алтын йыр.

## ЧИНАР ШАҠЫЙ ТӘҘРӘМДЕ

Ҡыш... Ҡар яуа, ап-аҡ ҡар...
Тарлауыҡтар, туғайҙар
Кейенгәндәр тоташ шау аҡтан.
Чинар шаҡый тәҙрәмде:
— Тарт, — ти чинар, — пәрҙәңде,
Индер мине, һаҡла һыуыҡтан.

Йәй... Көн эҫе, бешерә,
Ҡара тиргә төшөрә,
Һыймаҫтайһың иркен бүлмәгә!..
Чинар шаҡый тәҙрәмде:
— Тарт, — ти чинар, — пәрҙәңде,
Сыҡ янымa, бында күләгә...

## ИКЕ ТАУЫШ

### I

Яратаһың,
Таңдар һаргайтаһың.
Күҙҙәреңә донъя нур яға.
— Әйт әле һин, ниңә яратаһың?
— Яратырға тыуҙым донъяға.

Һөймәйһең һин,
Йоҡо белмәйһең һин,
Үткәндәрең, төштәй, сәйер бик.
— Әйтсе әле, ниңә һөймәйһең һин?
— Ташлағаным уны хәйер бит...

### II

Һин яҙаһың,
Һин һыҙаһың тағы,
Йән дуҫыңдай был саҡ кос-илһам.
— Әйтсе, был кис ниңә һин яҙаһың?
— Яҙылғаны яҡшы, исмаһам!

Яҙылмай һис.
Зая үтә был кис.
Уйың — тәрән, бик һай — юлдарың.
— Әйтсе, ниңә бушҡа үтә был кис?
— Ял да итһен был кис ҡулдарым.

### III

Ике тауыш!..
Шулай һине мәңге
Алмаш-тилмәш хөкөм итәләр.
Береһе яҡлап, береһе ғәйепләп гел,
Серле донъя буйлап илтәләр.

## Александр Галкин

### СӘЛӘМ-ХАТ

Икәү бер аҙ беҙ баҡсала
Ике саған ултырҙҡас:
«Был саған, — тинең, — һинеке,
Быныһы — минең ағас.
Әйҙә тинең, шаһит булһын
Беҙҙең һөйөүгә улар...»
Шул мәлдә йәшен йәшнәне,
Тамды тәүге тамсылар.
Аҙаҡ үҙең китеп барҙың
Сит яҡҡа, бик алыҫҡа.
Ә мин һаман һине көттөм,
Сер һөйләп ике дуҫҡа.
Ҡауышыуҙың өмөт уты
Саҡырҙы йылдар аша.
Тик сагандар үҫеп еткәс,
Булды шундай тамаша:
Күпме генә һыу һипһәм дә,
Ҡороно бит сағаның.
Әллә йәшел япрағына
Ҡағылдымы ялғаның?
Күпме сәләм-хат яҙһам да,
Елдәр генә алғандай!..
Әллә беҙҙең мөхәббәт тә
Булдымы шул сағандай?..

## АЛМАШЫЫҘ МИН

Беҙ мәңгелек заттан түгел,
Фани йән-тәнең.
Ҡануны был тәбиғәттең,
Ерҙең, матдәнең.
Ә шулай ҙа алып китһә
Үлем дуҫтарҙы,
Һыҙлай йөрәк, әрнеүенән
Белмәй туҡтарҙы.
Бер юл ботһә, башҡа юл бар,
Мөмкин юл һалыу,
Тик дуҫ китһә, кире ҡайтмай,
Ҡайтмай йылмайыу.
Алыштырмай дуҫ — дуҫыңды,
Туған—туғанды.
Юҡ, тиһеңме? Һөйләмә лә
Миңә ялғанды!
Юҡ, киткәндәр онотолмай,
Ҡала күңелдә,
Бер кемдең дә алмашы юҡ
Был ер йөҙөндә.
Күҙгә бөрәү ташланып та,
Бәлки, бармайҙыр,
Тик бөрәү ҙә уға алмаш
Була алмайҙыр.
Мин бар икән — йондоҙом бар,
Бар үҙ юлдашым,
Мин кешемен икән, тимәк,
Юҡ һис алмашым!

## ЯБАЙ ЙОРТ

Ауыр, һәлмәк ҡыҙыл кирбестәрҙән,
Ялҡын һымаҡ үрләп юғары,
Кем уҙарҙан беҙҙе ярыштырып,
Ҡалҡа йорттоң дүрт яҡ диуары.

Ә үҙебеҙ, һуғыштарҙа һымаҡ,
Ҡыуыштарҙа йоҡлап-ҡабындыҡ.
Бына бер кис, шәфәҡ нурын еңеп,
Өй ҡотларға уттар ҡабынды.

Артыҡ биҙәнмәгән ыҡсым был йорт,
Конләштереп олпат йорттарҙы,
Тәүге шиғыр йыйынтығы һымаҡ,
Эргәһенә баҫты томдарҙың.

Баҫты ла ул ябай бер сер асты:
Беҙ ҙә, тине, һеҙҙең ишеләр.
Уйлап сығарылған кеше түгел,
Йәшәй беҙҙә ысын кешеләр...

* *

Шекспирҙар әле тыуырҙар,
Ер-әсәбеҙ инде ауырҙа...
Ул әлегә генә тын ҡалған —
Тулғаҡ тотор мәле алдынан.

Кешеләргә шелтә ташлама,
Үҙ һүҙҙәрен әйтер бер улар.
Фажиғәләр бөтә, башлана —
Шекспирҙар әле тыуырҙар!..

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Дуҫлыҡ китабы . . . . . . . . . . . . . 5

I

*ЛИ БО (ҡытай шағиры)*
«Эҫе көндәп ял итергә...» . . . . . . . . 10

*АБУАБДУЛЛА РУДАКИ (тажик шағиры)*
Яратмайһың . . . . . . . . . . . . 11
Һин киткәс . . . . . . . . . . . . . 11
Ҡауышыу . . . . . . . . . . . . . 12
Мәрхәмәт . . . . . . . . . . . . . 12
Бәхет . . . . . . . . . . . . . . 13
Хараба . . . . . . . . . . . . . . 13
Ҡой шарабың! . . . . . . . . . . . 13
Һорағанды яратмайҙар . . . . . . . 14
Сәскәләр . . . . . . . . . . . . . 14
Фани донъя . . . . . . . . . . . . 14
«Кил, уйнатсы сорнайыңды...» . . . . . 15
«Аҡыллы гел яҡшылыҡҡа...» . . . . . . 15
«Хәтерләйҙәр минең хаҡта...» . . . . . 15

*ХАФИЗ (фарсы шағиры)*
«Әгәр Шираз һылыуҡайы...» . . . . . . 16

*ЖӘМИ (фарсы шағиры)*
«Яҙғы баҡса» шәлкеменән . . . . . , 17
«Һине күрмәй, көтә алмайым...» . . . . 19
«Бер танышым зарланды...» . . . . . . 19

*АЛИШЕР НАВОИ (үзбәк шағиры)*
«Кеше булған кешелә...» . . . . . . . 20

*ХОСЕ РИСАЛЬ (филиппин шағиры)*
«Һаҡлай белһә халыҡ үҙ телен...» . . . . 20
*ИСИКАВА ТАКУБОКУ (япон шағиры)*
«Эш тә эш...» . . . . . . . . . . . 21
«Һугам!» — тинеләр миңә...» . . . . . . 21
«Бер ҡыҙға һорау бирәмен...» . . . . . 21

II

*ФРАНСУА ВИЙОН (француз шағиры)*
«Һыуһап үләм шишмә эргәһендә...» . . . . 23
*ПЕРСИ ШЕЛЛИ (инглиз шағиры)*
Озимандия . . . . . . . . . . . . 24
Яңғыҙлыҡ хыялдары . . . . . . . . 25
*Дж. Г. БАЙРОН (инглиз шағиры)*
«Хыялдарын юлда кешенең...» . . . . . . 26
*ГЕНРИХ ГЕЙНЕ (немец шағиры)*
«Алтын аяҡлы йондоҙҙар...» . . . . . . 27
«Эй һин, һылыу...» . . . . . . . . . 27
«Ғашиҡ булды ҡыҙға егет...» . . . . . 28
«Шайтан менән бик шаярма...» . . . . . 28
«Ғәмһеҙлекте, һүрәнлекте...» . . . . . . 29
«Йөрәгемдең иң түренә...» . . . . . . 29
«Мәңге-мәңге ҡуҙғалмайса...» . . . . . . 29
«Яла ягыр тотош бер йыйылыш...» . . . . 30
«Йөрәгемдең һулҡып һыҙлағанын...» . . . 30
*ГЕНРИ ЛОНГФЕЛЛО (америка шағиры)*
Уҡ менән йыр . . . . . . . . . . . 32

III

*АЛЕКСАНДР ПУШКИН*
Тотҡон . . . . . . . . . . . . . . 34

Болот . . . . . . . . . . . . . . . . 34
Багыусыма . . . . . . . . . . . . . . 35
Ҡышҡы юл . . . . . . . . . . . . . . 35
«Асыуланма, ҡайғырма һин...» . . . . . 36
«Һөйҙөм һине...» . . . . . . . . . . . 36

*МИХАИЛ ЛЕРМОНТОВ*

Шағир үлеме . . . . . . . . . . . . 37
Баллада . . . . . . . . . . . . . . . 39
«Мин яңғыҙым ғына юлға сығам...» . . . . 40
Хәйерсе . . . . . . . . . . . . . . 41
Елкән . . . . . . . . . . . . . . . 42
Ҡая . . . . . . . . . . . . . . . . 42
Тотҡон . . . . . . . . . . . . . . . 43
О. Смирноваға . . . . . . . . . . . . 44

*ФЕДОР ТЮТЧЕВ*

«Оло мәғәнә бар айырылыуҙа...» . . . . . 45
Ике стихия . . . . . . . . . . . . . 45

*АЛЕКСЕЙ ТОЛСТОЙ*

Шөңгөр сәскәләр . . . . . . . . . . . 46
Томан . . . . . . . . . . . . . . . 47

*АПОЛЛОН МАЙКОВ*

Емшән . . . . . . . . . . . . . . . 48

*ИВАН НИКИТИН*

Мужик . . . . . . . . . . . . . . . 52

*АЛЕКСЕЙ ПЛЕЩЕЕВ*

Алға! . . . . . . . . . . . . . . . 53

*ИВАН БУНИН*

Яңғыҙлыҡ . . . . . . . . . . . . . . 55

*АЛЕКСАНДР БЛОК*

«Ах, йәшәгем килә, йәшәгем...» . . . . . 56
«Тәүҙә барыһын да уйынға алды...» . . . 56
«Гамлет — мин ул...» . . . . . . . . . 57
«Төнгө урам, фонарь, аптекаһы...» . . . . 57

VI

*СЕРГЕЙ ЕСЕНИН*

«Алһыу һыуҙар һибеп йөрөгән ерҙә...» . . 59
«Кис булды...» . . . . . . . . . . 59
«Ябылған да ялбыр юрған...» . . . . . . 60
«Уҡаланған күл өҫтө шәфәҡ нурынан...» . 61
«Ташҡын томаны...» . . . . . . . . 61
«Ҡарҙарын ҡоя муйылым...» . . . . . . 62
Ҡырпаҡ ҡар . . . . . . . . . . . 62
«Әй һин, минең тыуған Рәсәй!..» . . . 63
Һыйыр . . . . . . . . . . . . . 64
Өйөр . . . . . . . . . . . . . . 64
Эт хаҡында йыр . . . . . . . . . 66
«Йөрөмәм инде, иҙмәм ал ҡыуаҡты...» . . 67
Төлкө . . . . . . . . . . . . . 68
«Ҡыр ялангас, ҡыуаҡтар буш...» . . . . 68
«Ярып киләм тәүге аҡ ҡарҙы...» . . . . . 69
«Беләм, беләм: бар ул бәхет...» . . . . . 69
«Йәшел генә толомҡайың...» . . . . . . 70
Кантата . . . . . . . . . . . . . 71
«Күҙгөсә уһылдай ябалаҡ...» . . . . . . 71
«Йәлләп, саҡырып йәш тә ҡоймам инде...» 72
Әсәйемә хат . . . . . . . . . . . 73
Совет Рәсәйе . . . . . . . . . . . 74
«Һөйләште лә тынды алтын сауҡа...» . . 78
Ленин . . . . . . . . . . . . . 79
Егерме алты хаҡында баллада . . . . 82

*ФАРСЫ МОҢДАРЫ*

«Уңалдылар иҫке яраларым...» . . . . 89
«Һорапым мин бөгөн асламсынан...» . . 90
«Шаһәнәм һин минең, Шаһәнәм...» . . . 91
«Һин әйтәһең, Сәғәҙи, тип...» . . . . 92
«Булғаным юҡ Босфор ерҙәрендә...» . . . 92
«Зәғфрандай илдең зәңгәр кисе...» . . . 93
«Шундай саф һәм зәңгәр һауа!..» . . . 95

«Күктә — айҙың һалҡын алтыны...» . . . 96
«Хорассанда шундай ишектәр бар...» . . 97
«Фирҙәүсиҙең зәңгәр илкәйе!..» . . . . 98
«Шағир булыу — шул уҡ шәһит үлеү...» . . 99
«Ике аҡҡош — йәрем ҡулдары...» . . . 100
«Нилектән ай шулай тонoҡ ҡарай...» . . 101
«Типмә инде, һантый йөрәк!..» . . . . 102
«Эй һин, зәңгәр илдең алсаҡ алыҫы!..» . . 103
Ер капитаны . . . . . . . . . . 104
«Әйтен бөтөргәһеҙ наҙлы, күм-күк...» . . 106
«Хуш бул инде, дуҫҡай...» . . . . . . 107

*МИХАИЛ ИСАКОВСКИЙ*

Сейә . . . . . . . . . . . . . . 108

*МИХАИЛ СВЕТЛОВ*

«Туптар гөрһөлдәүе менән бергә...» . . . 109

*ЯКОВ ШВЕДОВ*

Аҡкошом . . . . . . . . . . . 110

*АЛЕКСАНДР РЕШЕТОВ*

Ҡағыҙ сәскәләр . . . . . . . . . 111

*АЛЕКСАНДР ТВАРДОВСКИЙ*

Ленин һәм мейессе . . . . . . . . 112

*БОРИС РУЧЬЕВ*

«Көндәр, айҙар, йылдар буйы...» . . . . 119

*КОНСТАНТИН СИМОНОВ*

Көт мине . . . . . . . . . . . 121

*ВАДИМ ШЕФНЕР*

Ситлектәге бөркөт . . . . . . . . 123
«Әгәр ҙә беҙ бер ташлашыр булһаҡ...» . . 124
Яҙғы ямғыр . . . . . . . . . . 124
Сүл ҡоҙого . . . . . . . . . . 125
Сабый саҡ . . . . . . . . . . 125
Шәхси дошман . . . . . . . . . 126

*МИХАИЛ ДУДИН*

«Уҙгандарҙың алыҫ осҡондары... . . . . 128
Ғәрәсәттән һуң . . . . . . . . . 128
Замандашҡа . . . . . . . . . 129
Докучаевты уҡығанда . . . . . . . . 130
1971 йылдың 3 июлендә . . . . . . . 131
Болеро . . . . . . . . . . . . . 132
Тормошҡа аяҡ баҫыусыға . . . . . . 133
Киске эңер тошкәс . . . . . . . . 133
Ярты тондә уянһаң... . . . . . . . . 134
Александр Трифонович Твардовский иҫтәлегенә . . . . . . . . . . . . . 134
«Хәрәкәткә кәрәк хәҡиҡәт...» . . . . . 135
Утлы кисеү . . . . . . . . . . . 135
Икәүҙән-икәү . . . . . . . . . . 136
Байрам . . . . . . . . . . . . . 136
«Зәңгәр йыр булып айҡармын...» . . . 137
Сәйер бер хәл хаҡында шигри хат . . . 138
Элегия . . . . . . . . . . . . . 139
Артыңдан ҡысҡырыу . . . . . . . . 140
Үҙ-үҙемә аңлатыу . . . . . . . . . 141
Әстрхан алдында . . . . . . . . . 142
Мартин Лютер Кинг үлеменә . . . . . 142
Юҡ ерҙә исемһеҙ һалдаттар . . . . . . 143
Тауға үрләүсегә . . . . . . . . . . 144
Бағышлау . . . . . . . . . . . . 144
«Күк томанда ҡояш эҙҙәре...» . . . . . 145

*ВЛАДИМИР ТОРОПЫГИН*

Ҡыңғырау сәскә . . . . . . . . . 146
Быуындар . . . . . . . . . . . 146
Бар ине бер малай . . . . . . . . 147

*ГЕННАДИЙ МОЛОДЦОВ*

Салауат хаҡында йыр . . . . . . . 149

*НИКОЛАЙ РУБЛЕВ*

Совет һалдатына һәйкәл . . . . . . . . 152

*ИГОРЬ ВОЛГИН*

Осоу ҡомары . . . . . . . . . . . . 154

V

*АБАЙ (ҡаҙаҡ шағиры)*

«Ялған дуҫың оҡшаш күләгәгә...» . . . . 157
«Дан-шөһрәт ул шундай бейек ҡая...» . . 157

*ТАРАС ШЕВЧЕНКО (украин шағиры)*

Васыят . . . . . . . . . . . . . 158

*ИВАН ФРАНКО (украин шағиры)*

Йырсыға . . . . . . . . . . . . . 159
«Ни хәжәте май ҡойоуҙың...» . . . . . . 160

*КОСТА ХЕТАГУРОВ (осетин шағиры)*

Етемдәр әсәһе . . . . . . . . . . . 161

*ЯН РАЙНИС (латыш шағиры)*

Сая ҡыҙыҡай . . . . . . . . . . . . 165
Һаҡсыллыҡ ҡулланмаһы . . . . . . . . 166
Ярҙамсыл . . . . . . . . . . . . . 166
Балыҡсылар . . . . . . . . . . . . 166
Дауыл орлоҡтарын һипте . . . . . . . 167
Алмас . . . . . . . . . . . . . . 167
«Маҡсатһыҙ ине тормош...» . . . . . . 167
«Үҙең нисек, мин дә шулай...» . . . . . 168
Ни беләм мин? . . . . . . . . . . . 168
Эшсе ҡыҙ йыры . . . . . . . . . . . 169
Төп синыф . . . . . . . . . . . . . 170
Ҡиәмәт көнө . . . . . . . . . . . . 170

*ОВАНЕС ТУМАНЯН (әрмән шағиры)*

Саят Нова . . . . . . . . . . . . . 173

## IV


*ТУЌТАҒОЛ (ҡырғыҙ шағиры)*

Ни яҡшы? . . . . . . . . . . . . . 175

Ғүмер . . . . . . . . . . . . . 176

*ПЕДЕР ХУЗАНГАЙ (сыуаш шағиры)*

Шинель . . . . . . . . . . . . . . 178

*СӨЛӘЙМӘН РӨСТӘМ (әзербайжан шағиры)*

Каспий . . . . . . . . . . . . . . 180

*ИРАКЛИЙ АБАШИДЗЕ (грузин шағиры)*

Бына бында төйәгем... . . . . . . . . 181

*АШОТ ГРАШИ (әрмән шағиры)*

Һандуғас . . . . . . . . . . . . . 183

Яҙғы баҡсала . . . . . . . . . . . 184

*СИЛЬВА КАПУТИКЯН (әрмән шағирәһе)*

Бәхет йондоҙо . . . . . . . . . . . 185

*СТЕПАН ЩИПАЧЕВ*

«Ышанған да булыр инем...» . . . . . . 186

«Ниңә, иркәм...» . . . . . . . . . 186

*РӘСУЛ ҒАМЗАТОВ (авар шағиры)*

Ләғнәт . . . . . . . . . . . . . . 187

Йыйылыштар . . . . . . . . . . . 189

Мостай Кәримгә . . . . . . . . . . 190

Йондоҙҙар . . . . . . . . . . . . 192

Дағстан йондоҙо . . . . . . . . . 193

Һандуғас йыры . . . . . . . . . . 198

Туған тел . . . . . . . . . . . . 199

Ер әйләнә икән . . . . . . . . . . 200

«Ракеталар оса йондоҙҙарға...» . . . . . 202

*РӘМИС РЫСКУЛОВ (ҡырғыҙ шағиры)*

Манас-халҡым . . . . . . . . . . . 203

*РИЗА ХАЛИД (ҡырым татары шағиры)*
«Ғүмергә тамһалар тамсылар...» . . . . . 204
«Һине бит сабырһыҙ һойгәндә...» . . . . 204
Шимал көҙө . . . . . . . . . . . . . 205
«Әлбиттә, шиғырың оҙон уҡ...» . . . . . 205
«Йәшел үлән һарғайманы...» . . . . . . 206
«Ниндәйен көн һуң был!..» . . . . . . 206
Уттан тыуҙы һүҙҙәрем . . . . . . . . 207

*НӘБИ ХӘҘРИ (әзербайжан шағиры)*
Ҡарт әсәйем . . . . . . . . . . . . 208
Алтын көҙ . . . . . . . . . . . . . 208
Сипар шаҡый тәҙрәмде . . . . . . . 209
Ике тауыш . . . . . . . . . . . . . 210

*АЛЕКСАНДР ГАЛКИН*
Сәләм-хат . . . . . . . . . . . . . 211

*ХАДЖИ-МУРАТ ДЗУЦЦАТИ (осетин шағиры)*
Алмашһыҙ мин . . . . . . . . . . . 212

*ЕГОР ПОЛЯНСКИЙ*
Ябай йорт . . . . . . . . . . . . . 213

*МИХАИЛ ШЕВЧЕНКО*
«Шекспирҙар әле тыуырҙар...» . . . . . 214

Литературно-художественное издание

**ГАРИПОВ Рами Ягафарович**

**МОЯ АНТОЛОГИЯ**

**Переводы**

*(на башкирском языке)*

Редакторы *Р. Зәйнуллин*
Рәссамы *В. Ковалев*
Художество редакторы *И. Файрушин*
Техник редакторы *Н. Зарипова*
Корректоры *Ә. Әсәҙуллина*

ИБ № 4178

Наборға бирелде 17.04.90. Баҫырға ҡул ҡуйылды 13.08.90. Ҡағыҙ форматы 70×90 1/32. Яңы ябай гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Тип ҡағыҙы № 1. Шартлы баҫма таб. 8,19. Шартлы буяу отт. 8,34. Учет.-изд. таб. 7,20. Тиражы 10 000 экз. Заказ № 55. Хаҡы 95 тин.

Башҡортостан китап нәшриәте. 450000, Өфө-үҙәк, Совет урамы, 18. Башкирское книжное издательство. 450000, Уфа-центр, ул. Советская, 18.

Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.